ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

18-24 июль (майай) 2025
№28 (1172)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ауылдарығыҙға ярҙам итегеҙ!**



2

**Кеше ғүмерҙәрен ҡотҡарыу -**

ин сауаплы ғәмәл ул



8-9

**"Етебөгөлөш" үре**



12

**Еләктәр йыйылды, артабан...**



13

*Кешеләр бер генә нурҙан тыуылған фәрештә түгел, шулай уҡ бер көтөүҙә тота торған хайуан да түгелдәр.*
*(В. Короленко).*

ҺӨЙӨНСӨ!

# ШҮЛГӘНТАШ МӘМЕРЙӘҺЕ...

## лайыҡлы баһаһын алды!

**Шүлгәнташ мәмерйәһе халыҡ-ара статус алды һәм ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индерелде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был ваҡиғаны республика өсөн тарихи әһәмиәткә эйә, тип билдәләне.**

"Бындай юғары баһа - ғалимдарыбыҙҙың, белгестәребеҙҙең, ғилми институттарыбыҙҙың, идара итеү командаһының, Шүлгәнташ мәмерйәһенең боронғо һүрәттәрен һаҡлап ҡалыу өсөн мөмкин һәм хатта мөмкин булмағанды эшләүселәрҙең күп йыллыҡ хеҙмәтен таныу ул. Был уникаль объект ЮНЕСКО исемлегенә индереүгә кандидаттар иҫәбенә алынғандан бирле ғәйәт ҙур эш башҡарылды. Тәүтормош заманы рәсемдәрен һаҡлау һәм мәмерйәгә антропоген йоғонтоно кәметеү өсөн тотош инфраструктура булдырыуға ирештек. Тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулыҡҡа нигеҙ һалдыҡ, алдынғы халыҡ-ара стандарттарға ярашлы, лаборатория һәм һүрәттәрҙең теүәл күсермәләре менән ультразаманса музей комплексы төҙөнөк. Мәмерйә эсенә автономлы мониторинг системаһы ҡуйҙыҡ һәм туристик маршруттарҙы яңынан һалдыҡ. ЮНЕСКО-ның барлыҡ талаптарын да үтәп сыҡтыҡ", - тип яҙҙы ул.

Төбәк етәксеһе ғалимдар берләшмәһенә, "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы коллективына, республиканың ЮНЕСКО Эштәре буйынса комитетына һәм шәхсән Һәйкәлдәрҙе һәм иҫтәлекле урындарҙы һаҡлау буйынса халыҡ-ара советтың (ICOMOS) Милли комитеты вице-президенты, Рәсәй ICOMOS-ның төбәк бүлексәһе етәксеһе Данир Ғәйнуллинға рәхмәт белдерҙе.

Радий Хәбиров республика был ҡаҙаныштар менән генә сикләнеп ҡалырға йыйынмауын һәм ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә Торатау, Йөрәктау һәм Ҡуштау шихандарын, шулай уҡ Воскресенск баҡыр иретеү заводы комплексын индереү өсөн көрәшәсәген билдәләне. "Улар шундай уҡ халыҡ-ара статус алыуға өлгәшһен өсөн беҙҙе номинация досьеларын әҙерләү буйынса күп йыллыҡ эш көтә. Шүлгәнташ миҫалында күреүебеҙсә, мөмкин булмаған бер нәмә лә юҡ. Тимәк, артабан атлайбыҙ", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## ШҮЛГӘНТАШ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШЕҮ

*Ете яттар һиңә ағылалар*
*Мөғжизәләр эҙләп һаман да.*
*Ә бөрйәндәр арыу-талыу белмәй*
*Бесән эшләй ҡырҙа, яланда.*
*Ете диңгеҙ аръяғынан килә*
*Аҡсалылар, етеҙ туристар.*
*Күп бөрйәндәр һине күрмәгәндәр -*
*Донъя көтөү тигән бурыс бар.*
*Рюмин һине "асҡан" тиҙәр, ана,*
*Ҡағыҙ түҙә, хәтер яңыра.*
*Һиңә нисәнсе ҡат килһәм дә бит,*
*Шүлгән, һине асам яңынан.*
*Урал батыр эҙен һаҡлайһың һин,*
*Шүлгәндең дә бында үстәре.*
*Дүрт ырыуҙың вариҫтары шунда*
*Үрсетәләр башҡорт күстәрен.*
*Донъяға һин беҙҙе танытаһың,*
*Эй, серле лә Шүлгән бишеге.*
*Һин, моғайын, Европаға - тәҙрә,*
*Ә донъяның инде ишеге.*
*Ете яттар һиңә ағылалар*
*Төшөнөргә теләп сереңә.*
*Таш һәйкәлһең беҙҙең сал тарихҡа,*
*Таш мөһөрһөң башҡорт еренә.*
*Шүлгәнташым - атайсалдың үҙе,*
*Йәнтөйәге рухтың, милләттең.*
*Быуын-быуын башҡорт балаһына*
*Быуат-быуат тағы һин тор әле*
*Киләсәккә юлды күрһәтеп.*

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА**

(Дауамы 16-сы биттә).



@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# АУЫЛДАРЫҒЫҘҒА ЯРҘАМ ИТЕГЕҘ!

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



***Камиль ХӘЙРУЛЛИН, инвестор, Санкт-Петербург ҡалаһы***: Мин Себеҙе өлкәһе башҡорто, инде 50 йыл тирәһе Санкт-Петербургта йәшәйем. 67 йәштәмен. Бынан 7 йыл элек үҙем тыуып үҫкән Ҡонъшаҡ районы Солтан ауылының яҙмышы ныҡ борсой башланы. Ауылымда башлыса оло йәштәгеләр генә тороп ҡалған, йәштәр ситкә китә. Башҡа Рәсәй ауылдары кеүек үк, торабара минең тыуған бишегемдең дә юҡҡа сығыуы ихтимал бит, тигән ҡурҡыу килеп инде күңелгә. Борон-борондан Силәбе өлкәһендәге ошо башҡорт ауылында минең ата-бабаларым йәшәгән, минең балалыҡ һәм йәшлек йылдарым хәтирәләре ошо ауыл менән бәйле, ауыл мәктәбе уҡытыусыһы булған әсәйем дә ошонда ауыр хеҙмәт юлын үтте. Уны мин бөйөк кеше тип әйтә алам: ул өс улына һәм дүрт ҡыҙына ғүмер бирҙе, уларҙы уҡытып, яҡшы кешеләр итеп тәрбиәләне. Ул, үҙ заманы кешеләренә хас булғанса, иленә намыҫлы хеҙмәт итте. Ошоларҙы хәтерләп ултырҙым да, тап шул саҡта яңы ниәтем барлыҡҡа килеп, тыуған ауылымды тергеҙеү, үҫтереү хаҡында уйлана башланым.

Тик шуныһы: ошо эште ниҙән башларға, нимәләр эшләргә икәне тураһында кәңәшләшер тәжрибәле кешеләр юҡ ине. Уйлана торғас, фекеремдең осона сыға яҙҙым һәм үҙем эшләп тапҡан аҡсаға Атайсалымда түбәндәге эштәрҙе башҡарырға ҡарар иттем: беренсенән, ауылдаштарыма хужалыҡтарын ҙурайтырға, киңәйтергә ярҙам итергә; икенсенән, ауылыма башҡа урындарҙан фермерҙарҙы йәшәргә саҡырырға; өсөнсөнән, ауылға күп балалы ғаиләләрҙе күсереп килтерергә; дүртенсенән, һөт эшкәртеү предприятиеһы асырға, эш урындары булдырырға.

Ауылымдың социаль инфраструктураһын яҡшыртыуҙың ни тиклем мөһим булыуын аңлай инем. Иң тәүҙә ситтән саҡырылған балалы ғаиләләр йәшәй алырлыҡ өйҙәр һалынып, уларға бушлай ҡуртымға бирелде. Ауылыбыҙға үҙәк һыу үткәргес, кәрәҙле элемтә, интернет, хатта газ да үткәрелде. Сыр яһау цехы асып, уны бушлай ҡуртымға бирҙем, уны артабан ҙурайтырға ла иҫәп бар. Шуныһы ҡыуаныслы, күсеп килгән ғаиләләр балалар баҡсаһын, башланғыс мәктәпте, тимәк, ауылды ла, һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген бирҙе. Әле алда тағы ла бер ҡатмарлы эш тора: ауылға тиклем юлға асфальт түшәү. Был эш байтаҡ ҡына финанс сығымдары талап итә, әлбиттә, проект-смета документтарын әҙерләүгә генә 10 миллион һум аҡса кәрәк булды. Бында икеләнеп тороу файҙаһыҙ - маҡсат ҡуйһаң, эшләргә генә кәрәк.

Эйе, шәхсән мин үҙем йәштәрҙең ауылдарҙан ҙур ҡалаларға китеүен хупламайым. Күп йыллыҡ йәшәйеш тәжрибәмдән сығып беләм: тик ауыл мөхитендә генә гармониялы тормош ҡороп була. Ҡалаларҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең балалары этник берҙәйлеген юғалта барыуы үҙе бер трагедия. Ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡала алһаҡ, милли традицияларыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ һәм телебеҙ, ата-бабалар мираҫы юғалмаясаҡ. Башҡортостанда ғәмәлгә ашырылған "Атайсал" программаһы тап ошо маҡсатҡа хеҙмәт итә тип аңлайым һәм ҡуш ҡуллап хуплайым. Бындай шәп проект башҡа бер ерҙә лә юҡ һәм уны уйлап табыусы, ғәмәлгә ашырыусы республика етәкселегенә рәхмәтлемен. Ошо проектҡа ярашлы, үҙ ауылдарын тергеҙергә ярҙам итеүселәр арта бара икәнен ишетә-күрә йөрөйөм, үҙемдә лә улар менән бер сафта, бер фекерҙә итеп тоям.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

КӨН ҠАҘАҒЫ




# ТЫУЫММЫ, ҮЛЕММЕ?

**Ер йөҙөндәге кеше һаны бына-бына 8 млрд сиген үтеп китәсәк, тип көтөлә. Был кемдәрҙелер борсоуға һала: шул тиклем гәмдә аҫрау өсөн планеталағы ресурстар етмәйәсәк, ти улар.**

Шул уҡ ваҡытта күпселек илдәрҙә тыуымдың кәмеүе лә хәүефләндерә. Ләкин тыуымдың кәмеүе йәһәтенән демографтар әлегә ни сәбәптәндер артыҡ борсолоу белдермәй. Ер шарында халыҡ һаны 9-ҙан алып 11 млрд кимәленә еткән осраҡта ғына ниндәйҙер проблемалар башланыуы ихтимал, ти улар. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы (БМО) күҙаллауынса, яңынан берәй 50 йылдан дөйөм халыҡ һаны 10 миллиардҡа етеүе һәм 2100 йылға ошо кимәлдең һаҡланыуы мөмкин. БМО мәғлүмәттәренән күренеүенсә, ошо быуат урталарына күҙалла免 ныусы халыҡ һаны үҫеше нигеҙҙә Конго, Египет, Нигерия, Эфиопия, Һиндостан, Пакистан, Танзания иҫәбенә тулыландырыласаҡ, сөнки ***Европа илдәре күптән, үткән быуаттың 90-сы йылдарынан алып, демографтар әйтмешләй, "миграция энәһе"ндә ултыра: был илдәрҙә халыҡ һаны кәмеүе ситтән килгән кешеләр, ҡасаҡтар иҫәбенә тулыландырыла. Бындай шарттарҙа, әлбиттә, теге йәки был илдең милли йөҙө хаҡында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Демография көрсәгәнең тағы бер үкенесле эҙемтәһе булыр был.***

Белгестәр баһалауынса, Европа буйынса алып ҡарағанда, Венгрияла ғына хәлдәр башҡасараҡ тора. Власть башына әлеге премьер Виктор Орбан хөкүмәте килгәндә, тыуым коэффициенты (бер ҡатынға тура килеүсе сабый һаны) 1,25 күрһәткесен тәшкил иткән булһа, яңы власть ил халҡының мигранттар иҫәбенә артыуынан ҡәтғи баш тарта. Премьер Орбан, үҙе биш бала атаһы булараҡ, Венгрияла балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы программаһы ҡабул итә. ***Уның буйынса тәү тапҡыр кейәүгә сығыусы 40 йәштән кесерәк ҡатын-ҡыҙға 35 мең доллар күләмендә процентһыҙ кредитҡа хоҡуҡ бирелә; әгәр ул өс бала тапһа, кредит түләүҙән азат ителә. Өс һәм унан күберәк балалы ғаиләләр йән башына килем һалымынан ҡотолдорола, машина һатып алыуға субсидия түләнә һәм башҡалар. Шәп бит!***

"Ғаиләләргә ярҙам саралары беҙҙә лә бар, - ти РФ Президент академияһы үҙәге демография тикшеренеүҙәре лабораторияһы мөдире Алла Макаренцева. - Бала ҡарау буйынса отпуск системаһы, сабый тыуыу менән бәйле пособие һәм түләүҙәр, ғаилә ипотекаһы һәм башҡалар". Тик беҙҙә компенсация күләме бик түбән, ти демограф: эш хаҡының ни бары 40 проценты. Ясле төркөмдәре, балалар баҡсалары, бәләкәй кластарҙа бала-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Әбйәлил, Баймаҡ һәм Бөрйән райондарында, янғын хәүефенә бәйле, 27 июлгә тиклем граждандарға, шул иҫәптән туристарға һәм һунарсыларға, урманға инеү сикләнгән. Янғынға ҡаршы махсус режим шарттарында урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоу граждандарға - 40 меңдән 50 мең һумға тиклем; вазифалы кешеләргә - 60 меңдән 90 мең һумға тиклем; юридик шәхестәргә 600 меңдән 1 миллион һумға тиклемге күләмдә административ штраф һалыуға килтерә, тип белдерәләр Урман хужалығы министрлығында. 2025 йылдың 3 апреленән 14 июленә тиклем Башҡортостанда 26,6 гектар майҙанда 10 урман янғыны теркәлгән.

✓Башҡортостанда республика дауаханаларының баш табиптары менән телекүперҙәр асылды. Ике аҙна һайын медицина округтарының үҙәк дауаханалары һәм республика дауаханалары табиптары тура эфир үткәрә. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, республика халҡы баш табиптар менән тура эфирҙа көнүҙәк һорауҙарға яуап алырға һәм медицина учреждениеларының эшен яҡшыртыу өсөн күре бәйләнеш ҡалдырырға мөмкин. Телекүперҙәр үткәреү датаһы һәм ваҡыты дауаханаларҙың социаль селтәрҙәге төркөмдәрендә баҫылып сыға.

✓Башҡортостан быйыл Ҡытайға 8,6 мең тонна көнбағыш майы оҙатҡан. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы буйынса Россельхознадзор идаралығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Көнбағыш майы - Шишмә һәм Көйөргәҙе районының Маячный ҡалаларында урынлашҡан предприятиеларҙың продукцияһы. Ҡытай ағы менән тәҙәлгән килешеүгә ярашлы, ул баҫыуҙан алып һуңғы продукт алғанға тиклем тулы етештереү контроле үткән. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре буйынса, майҙа хәүефле организмдар табылмаған, улар импортлаусы ил талаптарына яуап бирә.

✓"Алға" картаһына транспортта түләүҙең яртыһы тиерлек тура килә. 2019 йылдан, был проект эшләй башлағандан алып, Башҡортостанда 1 миллиондан ашыу карта һатылған. 2025 йыл башынан уны 44 мең дана һатып алғандар, йәғни ай һайын әйләнешкә 7 мең "Алға" сыға. "Бәхетле сәғәт" сиктәрендә, карта ғәмәлдә булған осорҙа, 28,6 миллион кеше бушлай икенсе транспортҡа күсеп ултырған. Был ярты йыллыҡта электричкаларҙа "Алға"ны ҡулланыу 1,5 тапҡырға артҡан.

✓Башстат 2025 йылдың беренсе кварталы мәғлүмәттәре буйынса республика муниципалитеттарында эш хаҡы кимәле тураһында мәғлүмәт баҫтырып сығарҙы: Өфө районы (90 127 һум); Хәйбулла районы (89 365); Өфө (87 269 һум); Благовещен районы - 81 024 һум; Учалы районы - 80 839 һум. Был ҡалаларҙа һәм райондарҙа халыҡтың килеме республика буйынса уртаса күрһәткестән юғарыраҡ (айына 68 848 һум).

***✓ Дәүләт Думаһы күп балалы ғаилә башлыҡтары - атайҙарға пенсия йәшен кәметеү, бындай ғаиләләге балаларға бушлай юғары белем алыуға хоҡуҡ биреү, ипотека түләүҙәргә ярҙам күләмен ике тапҡырға арттырыу хаҡында ла һүҙ ҡуҙғата.***



ны дәрестәрҙән һуң алып ҡалыу төркөмдәре етешмәй. Ә шулай ҙа Венгрия миҫалынан өлгө алырға нигеҙ бар әле беҙҙең хөкүмәткә лә. ***Мәҫәлән, Дәүләт Думаһының "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" фракцияһы етәксеһе Сергей Миронов балалы ғаиләләргә ихтыяжлыҡ кимәле күрһәткесен ике йәшәү минимумы күләменә еткереү, бөтөн төбәктәрҙә лә торлаҡ-коммуналь түләүҙәргә 50 процент ташлама индереү, балалар пособиеларын арттырыу, илдә алимент фонды булдырыу кәрәклеге тураһында тәҡдим әҙерләүҙәре хаҡында белдерҙе.*** Дәүләт Думаһы күп балалы ғаилә башлыҡтары - атайҙарға пенсия йәшен кәметеү, бындай ғаиләләге балаларға бушлай юғары белем алыуға хоҡуҡ биреү, ипотека түләүҙәргә ярҙам күләмен ике тапҡырға арттырыу хаҡында ла һүҙ ҡуҙғата. Ләкин былар әлегә проектта ғына ҡала.

Росстат мәғлүмәттәре буйынса былтыр Рәсәйҙә халыҡ һанының тәбиғи кәмеүе 596,2 мең кеше тәшкил иткән: 2023 йыл менән сағыштырғанда был күрһәткес 20,4 процентҡа артҡан. Белгестәр аңлатыуынса, Рәсәйҙә тәбиғи кәмеү күрһәткесенең артыуы тыуымдың кәмеүе һәм үлемдең артыуы сәбәпле килеп сыға. Былтыр үлем һаны 3,3 процентҡа артҡан һәм 2023 йылға ҡарағанда 1,819 млн кеше тәшкил иткән. Шулай уҡ былтыр, тип хәбәр итә Росстат, 1,222 млн бала тыуып, был күрһәткес 3,4 процентҡа кәмегән.

Демография көрсөгө сәбәптәре күп төрлө, әлбиттә. Илдә балалы ғаиләләргә күп төрлө дәүләт ярҙамы саралары күрелеүгә ҡарамаҫтан, тыуымдың кәмеүен Юғары иҡтисад мәктәбе өлкән ғилми хеҙмәткәре Елена Чурилова, мәҫәлән, былай тип аңлата: "Балаларҙы үҫтереүе ҡиммәткә төшә. Тормош сифаты менән етеш йәшәү кимәленә талаптар юғары хәҙер". Ысынлап та, белгес әйтеүенсә, шуларҙың береһе, атап әйткәндә - ҙур ғаилә өсөн ҙур йорт йә фатир кәрәклеге генә лә мөһим проблема булып тора. Халыҡ араһында һорау алыуҙар үткәргән саҡта иң тәүге урынға улар матди ҡыйынлыҡтарҙы ҡуя, сөнки баланың донъяға килеүе менән бәйле, һәр ғаилә ағзаһына тәғәйен килемдең кәмеүен ата-әсәләрҙән дә яҡшыраҡ тағы кем белә?

Киләсәк өсөн хәүефләнеү мәсьәләһе лә халыҡты бик борсой. Был турала яуаптар икенсе урында килә. Иҡтисади һәм сәйәси проблемалар, эпидемиялар, һуғыштар арҡаһында кешеләр бала табыу бурысын онотобораҡ тора йә яҡшы ваҡыттарға өмөт итеп, кисектерә бара, ә ваҡыт көтмәй: буласаҡ ата-әсәләрҙең бала табыу өсөн иң ҡулай йәш мөҙҙәте үтеп тә китә...

Тыуымдың түбән кимәлдә ҡалыуы һәм шуға бәйле халыҡ һанының кәмей барыуы Башҡортостан буйынса ла күҙәтелә һәм хәүефләндерә. "Комсомольская правда" гәзите сайтында яңыраҡ ҡына был хаҡта республиканың санитар-эпидемик торошо хаҡындағы рәсми докладҡа һылтанма менән "Башҡортостандағы һигеҙ районда ҡатмарлы демографик хәл" тураһында яҙылды. ***Унда хәбәр ителеүенсә, республикала былтыр халыҡ һанының тәбиғи кәмеүе 18 246 кеше тәшкил иткән. Был, тимәк, бер мең халыҡ һанына 4,5 кеше тура килә тигән һүҙ. Башҡортостандың айырыуса ҡатмарлы демографик хәл килеп тыуған 50 муниципаль берәмегендә күрһәткестәр уртаса республика кимәленән юғарыраҡ. Был йәһәттән сайт материалында һигеҙ район атап кителә: Краснокама, Борай, Йәрмәкәй, Бишбүләк, Ауырғазы, Федоровка, Стәрлебаш һәм Балтаста халыҡ һанының тәбиғи кәмеү коэффициенты республикалағы уртаса күрһәткестән 2,6-3,2 тапҡырға юғары.*** Шул уҡ ваҡытта 2-2,5 тапҡырға юғары күрһәткесле райондар ҙа телгә алына: Миәкә, Көйөргәҙе, Ҡалтасы, Илеш, Тәтешле, Әлшәй, Шаран, Ғафури, Күгәрсен, Яңауыл, Мишкәлә лә демографик хәл яҡшынан түгел.

Шул уҡ докладта әйтелгәнсә, Башҡортостанда үлем осраҡтары йыш күҙәтелгән райондар ҙа байтаҡ: Архангел, Тәтешле, Ҡалтасы, Краснокама, Мишкә, Шаран, Федоровка, Асҡын, Көйөргәҙе, Ҡыйғы, Баҡалы, Әлшәй, Илештә үлем кимәле уртаса республика күрһәткесенән 1,3-1,4 тапҡырға артығыраҡ. Йыйып әйткәндә, Башҡортостанда былтыр үлем кимәле 100 меңгә 1262,9 кеше тура килгән һәм үлгәндәр һаны яңы тыуған сабыйҙар һанынан 35,6 процентҡа юғарыраҡ булған. Был хәл республика властары иғтибарының үҙәгенә алынып, сәбәптәре асыҡланып, ентекле анализланырға һәм кисекмәҫтән Башҡортостан демографияһы торошон яҡшыртыу саралары күрелергә тейештер инде, тимәксе генә инек...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# "ТОЛЯ ӨСӨН! КУРСК ӨСӨН!"

**Ҡыйын булһа ла бөгөнгө сығарылышты фажиғәле хәлдән башларға тура килә: ни хәл итмәк, шундай шарттарҙа йәшәйбеҙ… 9 июлдә Курскиҙа 6 йәше тулырға өс кенә көн ҡалған Толя Минашкин ҡала пляжына йүнәлтелгән украин дронынан әсәһен үҙ кәүҙәгенәһе менән ҡаплап йән биргән. Тәненең 30 проценты янған бала Мәскәү дауаханаһына оҙатҡанда үлә, ә шулай уҡ тәне янып, йәрәхәттәр алған әсәһе әлеге ваҡытта дауаханала. Бала менән хушлашырға килгән Курск өлкәһе губернаторы вазифаһын башҡарыусы Александр Хинштейн кескәй Толяның батырлығы хаҡындағы хәбәр беҙҙең яугирҙар араһында таралып өлгөрөүе һәм алғы һыҙыҡта дошманға төбәп атыласаҡ боеприпастарға "Толя өсөн!", "Курск өсөн!" тип яҙа башлауҙары хаҡында һөйләне.**

Нимә генә тимә, дошмандың аяуһыҙлығы иң беренсе уның тыныс халыҡтан үс алырға маташыуында, тыныс ауыл һәм ҡалаларҙы утҡа тотоуында күренә. 13 июлгә Махсус хәрби операция белешмәһенән күренеүенсә, Украина командалығы беҙҙең биләмәләргә пулеметтар ҡуйылған хәрби роботтар ебәрә башлаған. Хәрби хәбәрселәр Telegram-каналы хәбәр итеүенсә, Рәсәй ғәскәренең 103-сө полҡы яугирҙары Константиновск йүнәлешендә Украина Ҡораллы көстәре боевиктарын ҡырып, уларҙың позицияларын һәм әлеге роботлаштырылған комплекстарын юҡ иткән. Эксперттар әйтеүенсә, дошман контрһөжүмендә автоматлаштырылған системалар ҡулланыу нисек тә Рәсәй ғәскәре ҡыҫымын тотҡарларға тырышыу һәм ҡурҡытыу маҡсаты ғына ул. "Әлегә һүҙ тәгәрмәстәрҙә һәм гусеницала йөрөүсе ҡулдан ҡоролған һәм ҡоралландырылған роботтар хаҡында бара,- тип һөйләй хәрби эксперт Александр Ивановский.- Уларҙың тиҙлек һәм һөжүм һөҙөмтәлелеге әллә ни шәптән дә түгел. Беҙҙең яугирҙар был украин "монстр"ҙарын FVP-дрондар һәм атыу ҡоралдары менән юҡ итә".

РФ Оборона министрлығы белешмәһе буйынса, Константиновка йүнәлешен контролдә тотоусы "Көньяҡ" хәрби төркөмө Украина Ҡораллы көстәренең 8 бригадаһы төркөмөн ҡырған, ошо йүнәлештә дошман 200-ләп һалдатын юғалтҡан, йәрәхәтләнеүселәр байтаҡ. Рәсәй Ҡораллы көстәре шулай уҡ Украинаның оборона сәнәғәтен, дрондар менән идара итеүсе операторҙар әҙерләү үҙәген утҡа тотҡан. Үткән аҙна эсендә Донецк халыҡ республикаһы, Сумы һәм Днепропетровск өлкәләренең 7 тораҡ пункты: Карл Маркс, Николаевка, Йәшел Үҙән, Новониколаевка, Толстой, Бессаловка, Дачное ауылдары азат ителгән, шул уҡ ваҡытта беҙҙең дрондар һәм ракеталар Житомир өлкәһендәге "Озерное" аэродромын, Луцкиҙағы"Мотор" заводын һәм тағы ла биш нөктәлә дошман авиабазаларын шартлатҡан.

Һәм, ғөмүмән, Австрияның хәрби күҙәтеүсеһе, полковник Маркус Рейнсснер фекеренсә, Рәсәй хәрби көстәре көн һайын тип әйтерлек 15-20 кв.км биләмә яулай барып, һөжүмде дауам итә, ә Украина армияһының ресурстары элекке кеүек етерлек кимәлдә түгел һәм уларҙың иң йомшаҡ урыны - һалдаттар етешмәүе. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, "Хәрби хроника" баҫмаһы билдәләүенсә, Украина Ҡораллы көстәре Часов Яр, Константиновка, Покровск кеүек айырым нөктәләрҙә һаман булһа оборона тотоп килә, ләкин, дөйөм алғанда, юғалтыуҙарҙы ҡапларлыҡ тере көстәр мобилизациялау өсөн кеше юҡ; дезертирҙар һәм үлгәндәр һаны яңы саҡырылған көстәрҙән күпкә артығыраҡ. Хәрби күҙәтеүсе Юрий Подоляка әйтеүенсә, тиҙҙән беҙ Покровскиҙа Украина Ҡораллы көстәренең бөтөн бәйләнештәрен өҙәсәкбеҙ, бына шунан һуң дошман ғәскәре йә ҡыйратыла, йә хурлыҡлы рәүештә ҡасырға мәжбүр буласаҡ.

Килеп тыуған ошондай шарттарҙа Рәсәй ғәскәре һөжүмде тиҙләтеп, штурмлаусы көстәр тактикаһын ҡулланыуҙы бермә-бер арттырырға тейеш. Етмәһә, беҙҙең дуҫ - Төньяҡ Корея лидеры Ким Чен Ын: "Рәсәй - һин яңғыҙың түгел",- тип дәртләндереп тора. Әйткәндәй, 11-13 июлдә РФ сит ил эштәре министры Сергей Лавров Корея Халыҡ Демократик Республикаһында рәсми визит менән булып, Ким Чен Ын менән осрашты һәм уға Владимир Путиндан сәләм тапшырҙы, яҡын араларҙа Владимир Путиндың Ким Чен Ын менән тура бәйләнешкә иҫәп тотоуы хаҡында белдерҙе.

Ошо ваҡиғаны яҡтыртып, мәғлүмәт саралары бөгөн Төньяҡ Корея менән Рәсәйҙең партнерҙар ғына түгел, ә тулы көскә эйә союздаштар булыуын билдәләй. Һәм, ысынлап та, Ким Чен Ын әйтеүенсә, Мәскәү менән Пхеньянды уртаҡ маҡсаттар берләштерә: Корея ярымутрауында һәм Төньяҡ-Көнсығыш Азияла АҠШ һәм уның эйәрсәндәре тарафынан көсәйә барған баҫым, уларҙың ядро көстәр ҡатнашлығында хәрби күнекмәләр үткәреүе шарттарында бындай берҙәмлек мөһим әһәмиәткә эйә. Осрашыуҙа билдәләнеүенсә, ике ил араһында юғары кимәлдә ҡул ҡуйылған килешеүҙәр үҙ көсөндә ҡала. РФ Сит ил эштәре министрлығының матбуғат хеҙмәте яҙыуынса, Рәсәй яғы Махсус хәрби операция барышында ярҙам күрһәткәне, Корея халыҡ армияһы яугирҙарының Курск өлкәһе биләмәһенән украин нацистарын ҡыуып сығарыуҙары өсөн рәхмәт белдерә.

Ошо йәһәттән көнбайыш мәғлүмәт саралары хәүефләнеүенсә, Пхеньян тағы ла Мәскәүгә хәрби ярҙам ебәреүе ихтимал, тип белдерә Reuters Көньяҡ Корея разведкаһы мәғлүмәттәренә һылтанып. Ким Чен Ын Украина конфликтында Рәсәйгә һис һүҙһеҙ ярҙам күрһәтергә әҙер булыуын белдерҙе. Сәйәсәттән тыш, иҡтисад мәсьәләләре ҡаралды. Сергей Лавров әйтеүенсә, рәсәйҙәр тиҙҙән Япон диңгеҙ яры буйында асылған Вонсан курортына ялға бара аласаҡ. Ким Чен Ын был объекттың таҫмаһын киҫте, ә Рәсәй яғы ошо йүнәлештә авиарейс асыу мөмкинлеген ҡараясаҡтары тураһында әйтте. КХДР өсөн был, әлбиттә, валюта йәлеп итеү булһа, Рәсәй өсөн Төньяҡ Корея менән мөнәсәбәттәрҙе артабан нығытыу буйынса тағы бер аҙым буласаҡ..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө - Бөрө - Яңауыл автомобиль юлын ремонтлау тамамланды, тип хәбәр итәләр Башҡортостандың Транспорт министрлығынан. Мишкә һәм Борай райондары биләмәләрендәге 5,8 километлыҡ дүрт участкала тулыһынса юл япмаһы яңыртылған, иҫкеһен алып, ике ҡатлам яңы асфальт һалынған, юл ситтәре нығытылған, тамғалар эшләнгән. "Өфө - Бөрө - Яңауыл юлы республиканың баш ҡалаһын төньяҡ-көнбайыш райондары менән бәйләй, ауылда йәшәүселәр өсөн транспорт бәйләнешен тәьмин итә", - тип белдерҙе республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы предприятиелары 2025 йылдың алты айында 112 мең тонна бөртөклө культураларын һәм уны эшкәртеү ризыҡтарын экспортҡа сығарған. Улар Әзербайжанға, Беларусҡа, Бельгияға, Германияға, Һиндостанға, Ҡаҙағстанға, Ҡырғыҙстанға, Ҡытайға, Латвияға, Монголияға, Польшаға, Төркмәнстанға, Төркиәгә, Үзбәкстанға һәм Швейцарияға оҙатылған. Продукцияға кәрәкле бөтә лаборатория һынауҙары үткәрелгән.

✓Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетында белдереүҙәренсә, республикала социаль яҡланмаған балалы ғаиләләргә GSM-модуле менән иҫкәртеү аппараты тапшырыла. Пилот проектында Ауырғазы, Бөрө, Благовещен, Дәүләкән, Ҡариҙел, Мишкә һәм Өфө райондары ҡатнаша. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "аҡыллы" мини-сиреналар бер юлы дүрт адресҡа - опека органдарына, туғандарына, ашығыс хеҙмәттәргә, ауыл советына сигнал ебәрә. Быға тиклем бындай ҡоролмалар инвалидтарға һәм Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә генә бирелгән.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, 2020 йылдан республикала юл буйы сервисын үҫтереү концепцияһы ғәмәлдә. Дүрт йыл эсендә 1018 яңы объект сафҡа индерелгән, тағы ла 1031-е яңыртылған. Быйыл яңы концепция раҫланған. Һүҙ тәү сиратта ҡунаҡ йорттары, отелдәр, ашханалар, бәҙрәф, ял итеү зоналары, техник хеҙмәтләндереү станциялары, магазиндар менән АЗС-тар төҙөү тураһында бара. 2030 йылға тиклем тағы ла 1000 яңы объект индереү һәм шул уҡ һанда реконструкциялау маҡсаты ҡуйыла.

✓Белорет районының Ноҡат ауылында яңы фельдшер-акушерлыҡ пункты асылды, тип хәбәр итә муниципалитет башлығы Азат Хәкимов. Ул Арышпар һәм Айыс ауылдары халҡын да - барлығы 150-нән ашыу кешене хеҙмәтләндерәсәк. Медпункт ЭКГ аппараты, тонометр, пульсоксиметр, дефибриллятор, ингалятор һәм башҡа кәрәкле ҡоролмалар менән йыһазландырылған. ФАП "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының "Беренсел звеноны модернизациялау" программаһы буйынса төҙөлгән.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ТЫНЫС ХЕҘМӘТТӘ ЛӘ...

**"Башҡортостан Геройҙары" программаһы, Рәсәй Президенты Владимир Путин башланғысы менән ҡабул ителгән "Геройҙар ваҡыты" федераль проектының төбәк ҡушымтаһы булараҡ, 2025 йылдың 24 февралендә эшләй башланы. Уның төп маҡсаты - артабан дәүләт һәм муниципаль власть органдарында, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы предприятиеларында эшләү өсөн Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙан һәм ветерандарҙан идара итеү резервын туплау.**

Проект менән төбәк Башлығы Радий Хәбиров шәхсән үҙе етәкселек итә. "Беҙ геройҙарыбыҙҙың тыуған төйәгебеҙгә енеү менән ҡайтыуын көтәбеҙ. Алғы һыҙыҡта улар булдыҡлы етәксе, дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәр өсөн бик мөһим сифаттарға эйә булды. Тәү сиратта был - намыҫ һәм абруй, бурысҡа тоғролоҡ, Ватанға бирелгәнлек. Ысын патриотизм һәм яуаплылыҡ тойғоһо уларға Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең сәскә атыуы өсөн йүнәлтелгән тыныс хеҙмәттә ярҙам итер, тип ышанам", - ти Радий Фәрит улы.



***Илдус Вәсим улы Ғәббәсов*** "Башҡортостан Геройҙары" программаһы сиктәрендә әҙерлек үтеүселәр исемлегенә ингән. Ул Махсус хәрби операцияға үҙ теләге менән 2023 йылдың июнь айында китә. 31-се "Башҡортостан" полкында инженер-техник взвод командиры булып хеҙмәт итә. "Мин - запастағы офицер. Өлкән лейтенант дәрәжәһендәмен. Ватаныбыҙ алдында бурысымды үтәү маҡсатын күҙҙә тотоп, Махсус хәрби операцияға үҙ теләгем менән яҙылдым. Төрлө саҡтар булды, хәрби иптәштәрҙе юғалтыу бигерәк ауыр, башҡаһына түҙеп була", - ти ул. Илдус Вәсим улы Луганск Халыҡ Республикаһының Кременная ҡалаһы йүнәлешендә барған ауыр алыштарҙа ҡатнаша. Йәше тулыу сәбәпле, 2024 йылдың мартында, утҡа инеүенә туғыҙ ай тигәндә, демобилизация буйынса тыныс тормошҡа кире ҡайта.

Илдус Вәсим улы сығышы менән Әлшәй районының Торонтайыш ауылынан. Башҡортостан ауыл хужалығы институтын инженер-гидротөҙөүсе һөнәре буйынса тамамлаған, хеҙмәт юлын Өфөлә башлай. Проектлау институттарында, төрлө төҙөлөш ойошмаларында эшләй. Ул "Сағыу" ("Яркий"), Минһажев, Күперле торлаҡ комплекстары кеүек ҙур проекттарҙы ғәмәлләштереүҙә ҡатнаша. Бөгөнгө көндә Өфө ҡала хакимиәтенең капитал төҙөлөш идаралығы начальнигы урынбаҫары вазифаһын биләй. Әйткәндәй, МХО-ға ла ул ошо кабинеттан китә.

"Башҡортостан Геройҙары" программаһына ингән Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм ветерандар бер йыллыҡ әҙерлек үтә. "Уҡыу, яңы белем үҙләштереү бер ваҡытта ла һуң түгел. Яңы белем бер ваҡытта ла артыҡ булмай. Ошо күҙлектән сығып, документтарымды комиссия ҡарамағына тапшырырға булдым. Әгәр мөмкинлектәремде тейешенсә баһалап, артабан мине ҡыҙыҡтырған эш, вазифа тәҡдим итәләр икән, республика, илебеҙ өсөн яңы урында хеҙмәт итергә әҙермен", - тип һөйләне Илдус Ғәббәсов.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ШӘП МӘСЕТ БУЛАСАҠ!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә "Әр-Рәхим" мәсете төҙөлөшө майҙансығында булды. Республика етәксеһе мәсет комплексын ҡарап сыҡты, монтажлау һәм биҙәү эштәре барышын баһаланы.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, мәсет төҙөлөшө 2006 йылда башланды, төҙөлөштө төрлө инвесторҙар үҙләкһеҙ финанслаған. 2016 йылдың йәйендә эш туҡтатыла. Дөйөм алғанда, 2021 йылдың аҙағына ғибәҙәтхананы төҙөүгә 1,9 миллиард һум аҡса бүленгән.

2023 йылдың сентябрендә Башҡортостан Башлығы "Әр-Рәхим" мәсетен төҙөүҙе тергеҙеү буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Бынан һуң белгестәр, майҙансыҡты комплекслы тикшереп, уның торошон баһаланы.

2024 йылдың 10 апрелендә Республика Башлығы ҡатнашлығында мәсет төҙөлөшө тергеҙелде.

Өфөнөң Инвестиция-төҙөлөш комитетының генераль директоры Марат Вәсимов төҙөүселәрҙең хәҙер мәсеттең дүрт манараһында ла эште тамамлауы, Грецияның килтерелгән мәрмәр менән биҙәүе хаҡында һөйләне. Шулай уҡ мәсеттең ҡыйығын һәм көмбәҙен эшләү тамамланып килә. Быйыл объект тышына витраждар ҡуйыу, мәсеттең аҫҡы өлөшөн төҙәү тамамланырға тейеш.

Төбәк Башлығына мәсеттә баҫҡыстарҙы эшләгәндә һәм төҙөлөштә ниндәй материалдар ҡулланылғанын күрһәттеләр. Радий Хәбиров бөтә төҙөлөш эштәре этаплап башҡарылырға тейеш, тип билдәләне.

"Әле беҙ август аҙағына тиклем атҡарыласаҡ пландар тураһында һөйләшәбеҙ. Төп фасадты ҙур плита менән ҡаплай башланыҡ та инде - Өфө халҡы күреп-белеп торалыр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәҙрәләрҙең күбеһе серегән, уларҙы ла алмаштырабыҙ. Мәсетте йылыта башлауҙы планлаштырабыҙ. Ә киләһе йылда мәсет биләмәһен йәшелләндереү менән шөғөлләнәсәкбеҙ. Ысынында, беҙ төҙөлөштө янынан башланыҡ бит, ә төп бурыс - уны аҙағына тиклем тамамлап ҡуйыу. Һәм ул шәп мәсет буласаҡ", - тине Радий Хәбиров "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәрсеһе менән әңгәмәләшкәндә.

# ГӘЗИТТӘР ЫШАНЫСЛЫ

**Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа баҫма киң мәғлүмәт сараларын таратыуҙағы проблемаларға арналған түңәрәк өҫтәл үткәрелде.**

Парламенттың граждандыҡ йәмғиәтен үҫтереү, мәғлүмәт сәйәсәте һәм дин эштәре буйынса комитет рәйесе Рөстәм Ишмөхәмәтов, һөйләшеүҙе башлап ебәреп, беҙ баҫма киң мәғлүмәт сараларына ярҙам итергә бурыслыбыҙ, тип билдәләне һәм: "Сөнки беҙҙең күпселек һайлаусыларыбыҙ оло йәштә һәм матбуғатты даими уҡып барыусыларҙың да күбеһе - улар. Әлбиттә, һатыу нөктәләре, гәзит-журналдар һатҡан киосктар кәмей бара. Ә бит интернеттағы мәғлүмәттәргә ышанып булмай икәнен, матбуғат баҫмаларыбыҙ йөҙ проценты менән ышаныслы икәнен аңланыҡ инде хәҙер", - тине.

Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Максим Ульчев та Рөстәм Рифат улының был фекерен хуплап: "Беҙгә гәзит һәм журналдар һатҡан нөктәләр һанын кәметмәскә кәрәк. Уларҙы аҙыҡ-түлек кибеттәрендә һәм сауҙа үҙәктәрендә лә арттырырға кәрәк. Тағы шул борсоуға һала: почта хеҙмәте тармағында деградация көсәйә бара, хәҙер почтальоны булмаған тотош ауыл биләмәләре барлыҡҡа килде - был матбуғат таратыуҙы айырыуса ныҡ ҡатмарлаштыра", - тине. Шулай уҡ киосктар урынына гәзит павильондары булдырыуҙы әүҙемерәк ойоштророрға кәрәк, тигән тәҡдим дә яңғыраны. Эйе, кешеләр киоск тәҙрәһенә ҡуйылған бер нисә генә гәзит һәм журналды шәйләмәскә лә мөмкин. Ә павильондарҙа продукцияны һайлау, төрлө канцелярия һәм башҡа тауарҙар һатып алыу мөмкинлеге тыуа.

Түңәрәк өҫтәлдә сығыш яһаусылар бар донъяла беҙҙең аңдарҙы бутауҙы маҡсат иткән мәғлүмәт һуғышы алып барылған шарттарҙа баҫма матбуғаттың халыҡҡа рухи аҙыҡ биреү, илһөйәрлек тәрбиәләү буйынса ролен әүҙемләштерергә кәрәк, тигән һығымта яһаны. Был тәҡдим ул бурыстарҙы тормошҡа ашырыусылар ҡолағына ишетелһен ине, әлбиттә

# ТАЛҠАҪ КҮЛЕН ҺАҠЛАЙЫҠ!

**Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров Талҡаҫ күлен һауыҡтырыу һәм "Экология"милли проектын тормошҡа ашырыу мәсьәләләренә арналған кәңәшмә үткәрҙе.**

Фекер алышыуҙа Башҡортостан Хөкүмәте аппараты департаменты, Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология, Урман хужалығы министрлыҡтары, Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү идаралығы, Балыҡсылыҡ буйынса федераль агентлыҡ, Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын һәм кеше именлеген яҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы, Баймаҡ районы хакимиәте етәкселәре һәм ғалим-экологтар ҡатнашты.

Һуңғы егерме йылда Талҡаҫ күле етди экологик проблемаларға юлыҡты: ылымыҡтар үҫә, һайыға, аҡрынлап һаҙлыҡҡа әүерелә бара. Эйе, 2020 йылдан экологик өмәләр үткәрелә, улар барышында сүп-сар йыйыла, ҡарағай ултыртыла, күлдә тукландырыусы шишмәләр таҙартыла. Әммә күлдә машина йыуалар, мал-тыуар төшә, туристарҙан һуң сүп өйөмдәре ҡала, яҡындағы ял йорттарынан бысраҡ һыуҙар ағып төшә.

Кәңәшмәлә Ирәндек һырттарын һәм күлдең тирә-яғын үҙ эсенә алған тәбиғәт паркы - айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәһе (ООПТ) булдырыу тәҡдим ителде. Тағы ла таҙалыҡ һәм тәртипте күҙәтеүсе хакимиәт булдырыу планлаштырыла. "Тәбиғәт паркы ерҙәрендә геологик разведка үткәреү, ағас ҡырҡыу эштәре закон менән тыйыласаҡ", - тине Зариф Байғусҡаров. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар был башланғысты хупланы. Яҡын арала тәжрибәле ғалим-эколог ҡатнашлығында комплекслы экологик экспертиза үткәреләсәк, шулай уҡ Рәсәй Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығына документтар әҙерләнәсәк. Балыҡсылыҡ буйынса федераль агентлыҡ етәкселеге, күл ылымыҡтарҙан таҙартылғас һәм кәрәкле документтар теүәлләнгәс, Талҡаҫҡа балыҡ ебәрергә әҙер булыуын белдерҙе.

"Алда беҙҙе күп эш көтә, Талҡаҫ күлен, йәмле Ирәндек буйҙарын һаҡлап ҡалыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләргә бурыслыбыҙ. Уны киләсәк быуындар өсөн таҙа һәм тәрбиәле хәлдә ҡалдырырға тейешбеҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды депутат. - Талҡаҫ күлен һәм уны туҡландырыусы шишмәләрҙе таҙартыу буйынса киләһе өмә 9 августа үтәсәк. Тыуған яҡтың яҙмышына битараф булмағандарҙы көтәбеҙ!"

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда журналистарҙың Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына конкурс иғлан ителде. 2024 йылдың сентябренән 2025 йылдың августына тиклем баҫылған материалдар баһаланасаҡ. Материалдарҙа замандаштар образы, милли мәҙәниәттәр байлығы һәм халыҡтар дуҫлығы, Башҡортостандың социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләре асылырға тейеш. Ғаризаны 1 сентябргә тиклем Башҡортостандың Журналистар союзына йәки Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығына бирергә кәрәк. Конкурста еңеүселәргә 500-шәр мең һумлыҡ өс премия ҡаралған.

✓Һамар өлкәһендә үткән традицион яндан уҡ атыу буйынса Рәсәй чемпионатында Башҡортостан уҡсылары 9 миҙал яулап алған. Унда 31 төбәктән 210 уҡсы ҡатнашҡан. "Тиҙ атыу"ҙа Динә Вәлиева менән ярыштарҙа иң йәш ҡатнашыусы Батырхан Ғәйсин беренсе урынға сыға, ә Илмир Әхмәтйәнов икенсе була. Команда ярыштарында Илфат Мырҙағәлин һәм Динә Вәлиева - беренсе, Ғәфүр Рахманғолов һәм Әлиә Ишморатова өсөнсө урын ала. Традицион яндан 3D фигураларға атыуҙа Тимур Өмөтбаев - 1-се, Илмир Әхмәтйәнов - 2-се, Динә Вәлиева - 3-сө, Гүзәл Буранғолова 4-се урын биләй. Олимпик яндан атыуҙа Илгиз Йәнгуҙҙын 3-сө урында.

✓Украина Ҡоралды көстәренең пилотһыҙ аппараттары күрше Татарстанға һөжүм иткән. Был турала Алабуға һәм Түбәнге Кама халҡы хәбәр итә. Түбәнге Кама мэры Радмир Беляев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә дошман дронын юҡ итеүҙәре тураһында яҙып сыҡты. Шул уҡ ваҡытта Росавиация Ижевск, Түбәнге Кама һәм Ҡазан аэропорттарында сикләү индерелеүе тураһында хәбәр итте. Бынан тыш, Киров һәм Санкт-Петербург һауа ҡапҡалары ябылды.

✓Мәскәү өлкәһендә Өфө спортсылары ат спорты ярышында оҫталығын күрһәтте. Ошо көндәрҙә Мәскәү өлкәһендә һыбай уҡ атыу буйынса Рәсәй кубогы уҙҙы. Ярыш халыҡ-ара аттан уҡ атыу альянсының (IHAA) Табла, Рейд һәм Башня маршруттары буйынса үтте. "Акбузат" ипподромының ат спорты буйынса инструкторы Рушан Хәсәнов Tabla маршрутында беренсе урынды яуланы. Абсолют зачетта яҡташыбыҙ, еңеүсенән аҙ ғына ҡалышып, икенсе урынды алды.

✓"Роспотребнадзор" машина һатып алыусыға 470 мең һум аҡсаһын кире ҡайтарып алырға ярҙам итә. Машина һатып алыу тураһында килешеүҙе рәсмиләштергәндә гарантиялар күрһәтеү буйынса тағы ла ике өҫтәмә килешеү һәм абонентлыҡ килешеүе төҙөлә. Һуңынан һатып алыусы уларҙан баш тарта, ләкин салонда уға аҡсаһын ҡайтармайҙар. "Роспотребнадзор" белгестәре материалдарҙы тикшерә һәм ҡулланыусы хоҡуҡтарының боҙоуын асыҡлай. Суд штраф һәм мораль зыянды компенсациялау менән бергә ҡулланыусы файҙаһына 470 мең һум аҡса түләтергә ҡарар сығара.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# МАТЕМАТИКА ЛИЦЕЙЫ ТӨҘӨЛӘ



**Өфөлә математика лицей-интернаты төҙөлөшө башланды. Проект "Йәштәр һәм балалар" федераль милли проекты сиктәрендә республика Башлығы Радий Хәбиров инициативаһы менән тормошҡа ашырыла.**

Мәктәп Менделеев урамында, "Өфө Экспо" күргәҙмә комплексынан алыҫ түгел ерҙә күтәрелә. Лицей 360 уҡыусыға иҫәпләнгән. Заманса уҡыу корпустарынан тыш, тулыһынса йыһазландырылған һәм бөтә уңайлыҡтары булған 250 урынлыҡ торлаҡ блоктары, спорт зонаһы, ашхана, китапхана ҡаралған. Проектың хаҡы - 2,8 миллиард һум. 465 миллион һумды республика бүлһә, ҡалған сумманы федераль үҙәк бирә. Лицей 2027 йылдың 6 декабренә тиклем файҙаланыуға тапшырылырға тейеш. Башҡортостандың төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы министры Артем Ковшов һөйләүенсә, бөгөнгө көнгә дөйөм әҙерлек эштәре башҡарылған, интернаттың торлаҡ өлөшөнөң нигеҙен ҡаҙа башлағандар.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров осрашыу ваҡытында Президент Владимир Путинды математика лицейы төҙөлөшө проекты менән таныштырҙы. "Беҙ Өфөлә федераль бюджет иҫәбенә математика лицей-интернатын төҙөй башлаясаҡбыҙ. Был мәсьәлә буйынса мин ил Президентына мөрәжәғәт иттем, һәм унан хуплау таптыҡ. Республиканың һәләтле балалары өсөн заманса үҙәк булдыраcаҡбыҙ. Ул сығарылыш уҡыусылары менән тотош илебеҙ ғорурланған уникаль мәктәп буласаҡ", - тип белдергәйне республика Башлығы 2024 йылдың декабрендә үҙенең Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамәһендә.

# БИШ ЙОНДОҘЛО

**Өфөлә урынлашҡан "Башҡортостан" ҡунаҡхана комплексы рәсми рәүештә биш йондоҙло тип классификациялана.**

Быға инфраструктураны яңыртыу һәм сервис кимәлен күтәреү буйынса күләмле программаны тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә өлгәшелде, тип хәбәр иттеләр республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығынан. Сертификацияға әҙерлек ҡунаҡханаға техник аспекттарҙы яҡшыртыуҙан тыш, ҡунаҡсыллыҡҡа ҡараштыла ла үҙгәртергә мөмкинлек бирҙе. Сервистың стандарттары күтәрелде, профессионалдар командаһы тупланды, хеҙмәттәр даирәһе киңәйҙе, шул иҫәптән яңы номерҙар категорияһы, тәүлек әйләнәһенә хеҙмәтләндереү, заманса спа-комплекс, трансфер һәм гастрономик тәҡдимдәр. Шул рәүешле "Башҡортостан" ҡунаҡханаһы үҙенең тарихи ҡиммәтен һаҡлап ҡалды һәм премиаль уңайлылыҡ кимәлен тәҡдим иткән биш йондоҙло комплексҡа әүерелде.

# ҠАЛАЙ ШӘПТӘР!

**Берҙәм дәүләт имтиханын ҡабаттан тапшырыуҙың өҫтәмә көндәре һөҙөмтәләре буйынса тағы 5 сығарылыш уҡыусыһы иң юғары балл алған.**

Берҙәм дәүләт имтиханы буйынса алынған һөҙөмтәләр менән ҡәнәғәт булмайынса, уны ҡайтанан тапшырған уҡыусыларҙың тырышлыҡтары бушҡа булмаған. 94-се лицейҙан Данил Панченко, 18-се мәктәптән Камил Ғиләжев һәм 83-сө инженер лицейынан Азалия Имаева математиканан 100 балл йыйған. Л.М. Павличенко исемендәге 106-сы "Берҙәмлек" лицейынан Арсен Ғәлиев химия буйынса үҙенең балын 100-гә тиклем күтәргән. 26-сы Белем биреү үҙәгенән Данил Ефремов физика буйынса һөҙөмтәне яҡшыртҡан. Шулай итеп, быйыл Өфөлә 6 предмет буйынса 52 эш максималь 100 балл менән баһаланды, тип хәбәр итәләр баш ҡаланың мәғариф идаралығынан.

# ТАҒЫ БЕР БАЙРАМ

**26-27 июлдә Өфөлә "Рәхәттә" халыҡ-ара сәләмәтлек һәм туризм фестивале үтә. Ул мунса ялы мәҙәниәтенә арналған.**

Ике көн дауам итәсәк сараның бай программаһы мәҙәни, спорт һәм эшлекле осрашыуҙарҙы һәм дискуссияларҙы үҙ эсенә ала. "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигән фитнес программа, оҫталыҡ дәрестәре, илдең иң яҡшы быу оҫталарынан сабыныу, массаж зонаһы, һыу аттракциондары, күбекле кис, гастрофестиваль - былар барыһы ла килгән ҡунаҡтар өсөн эшләнә.

Мунса ҡаласығында һәр кем етештереүселәр менән аралаша, төрлө мунсаларҙың уникаль мөмкинлектәреге тураһында белешә, Рәсәйҙең рекордтар китабына индерелгән, 400 литрҙан ашыу һыу ҡойоуға һәләтле уникаль ҡойоноу ҡоролмаһын күрә ала.

Байрамдың спорт өлөшөндә "Ҡашҡаҙан кубогы" мини-футбол буйынса ярыш, "Башҡортостан лигаһы" пляж волейболы, "Рәхәттә баскет" баскетбол турниры һәм башҡа саралар көтә.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ӘХМӘРОВ ҒӘБИТ АБДУЛЛА УЛЫ

Ул - Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, 112-се Башҡорт (16-сы гвардия Чернигов) кавалерия дивизияһының взвод командиры ярҙамсыһы. Советтар Союзы Геройы. Ғәбит Абдулла улы Әхмәров 1921 йылдың 24 февралендә Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының Юрматы кантоны Иҫке Сытырман ауылында тыуған. Ата-бабалары - юрматы ырыуының Тәтегәс түбәһе башҡорттары. Тыуған ауылы мәктәбендә уҡый, тулы булмаған урта белемле. 1936 - 1941 йылдарҙа "Салауат" колхозында эшләй, һуңынан Федоровка районының Юлдаш башланғыс мәктәбендә уҡытыусы була.

1941 йылда үҙ ирке менән Башҡорт АССР-ның Федоровка военкоматы аша һуғышҡа китә. 1942 йылдан - ғәмәлдәге армияла. 62-се гвардия кавалерия полкының 45 миллиметрлы орудиелар батареяһының ут взводы командиры ярҙамсыһы (Үҙәк фронт, 61-се армия, 7-се гвардия кавалерия корпусы, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы), гвардия өлкән сержанты Ғәбит Әхмәров Чернигов өлкәһендәге (Украина) алыштарҙа айырыуса ҡаһарманлыҡ күрһәтә, ошо хаҡта наградлау документтарында ошолай яҙылған: "Клочково тораҡ пункты (Чернигов өлкәһенең Городнянск районы) тирәһендәге алышта һөжүм итеүсе подразделениелар дошмандың көслө пулемёт-миномёт уты аҫтына эләгә, бер үк ваҡытта яҡшы йәшерелгән дошман бронемашинаһынан да бик көслө ут асыла. Алға китеш ауырлаша. Гвардия өлкән сержанты Әхмәров, 45-миллиметрлы пушканы асыҡ позицияға сығарып, беренсе атыуҙан уҡ бронемашинаны юҡ итә, пулемёт расчетын ҡыйрата һәм шуның менән полктың хәрби частарының алға китешен тәьмин итә. 1943 йылдың 21 сентябрендә "1 Май" совхозы өсөн алыштарҙа дошман танкылары һәм үҙйөрөшлө орудиеларының, артминомёттарҙың көслө уты ярҙамында контратакаға күсергә һәм беҙҙең частарҙың һөжүм итеүен һәм алға китешен тоtҡарларға тырыша. Әхмәров, 45 миллиметрлы пушкаһын уңайлы урынға ҡуйып алып, дошмандың дауыллы утына ҡарамаҫтан, бер нисә атыу менән немецтарҙың бер үҙйөрөшлө "Фердинанд" орудиеһын һәм бер урта танкын ҡыйрата. 1943 йылдың 22 сентябренә ҡараған төндә, Ивашково ауылы өсөн алышта, дошман "Тигр" тибындағы 3 танкыһы, 2 урта танк һәм үҙйөрөшлө орудие ярҙамында беҙҙең подразделениеларҙың алға китешен тоtҡарларға маташа. Әхмәров, сыҙамлылыҡ һәм батырлыҡ күрһәтеп, танкылар һәм үҙйөрөшлө орудие яҡын килеп еткәс, уларҙы утҡа тота. Һөҙөмтәлә 1 үҙйөрөшлө орудие һәм 1 урта танк яндырыла, ә ҡалғандары кире борола..."

СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 9 февралендәге Указына ярашлы, гвардия өлкән сержанты Әхмәров Ғәбит Абдулла улына "Советтар Союзы Геройы" тигән маҡтаулы исем бирелә, уға "Алтын Йондоҙ" миҙалы һәм Ленин ордены тапшырыла. Ул ике I дәрәжә Ватан һуғышы ордендары кавалеры (1943;1985), шулай уҡ "Батырлыҡ өсөн" (1943) һәм башҡа хәрби миҙалдарға лайыҡ була.

1945 йылда ул Тамбов кавалерия училищеһын тамамлай. 1945 йылдың ноябрендә лейтенант Ғ.А. Әхмәров запасҡа сығарыла. Һуғыштан һуң ул Фёдоровка районында Эске эштәр министрлығының район бүлегендә участка инспекторы булып эшләй, артабан - "Салауат", Пушкин исемендәге колхоздарҙың рәйесе, Бала-Сытырман ауыл Советы рәйесе вазифаларын башҡара, шулай уҡ "Пугачев" совхозында эшләй. 1996 йылдың 11 сентябрендә вафат була. Башҡортостандың Фёдоровка районы Иҫке Сытырман ауылында ерләнгән. Ғ. А. Әхмәровтың исеме 112-се Башҡорт кавалерия (16-сы гвардия Чернигов) дивизияһының башҡа 78 Советтар Союзы Геройы исемдәре менән бер рәттән, Башҡортостан Республикаһының Милли музейы бинаһында алтын хәрефтәр менән мәңгеләштерелгән, шулай уҡ 112-се кавалерия дивизияһы музейы бинаһында уйылып яҙылған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2 июлдән 4-енә тиклем Өфөлә терәк-хәрәкәт аппараты зарарланған спортсылар араһында еңел атлетика буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары үтте. Ярыштарҙа Рәсәйҙең 24 төбәгенән 8-17 йәшлек 60-тан ашыу спортсы ҡатнашты. Туймазы районынан Илназ Дәүләтов алтын миҙал яуланы. "Илназ Дәүләтов Бөтә Рәсәйҙе хайран ҡалдырҙы. Ул 400 метрға йүгереүҙә еңеүсе булды", - тип ҡыуаныслы яңылыҡ менән уртаҡлашты Адаптив спорт үҙәге директоры Айрат Дауытов. Бынан алдараҡ "Башинформ" токка һуғылып ике ҡулһыҙ ҡалған Илназ Дәүләтовтың тормошо нисек үҙгәреүе хаҡында яҙғайны.

✓Быйыл республиканың төрлө төбәгендә парктарҙы төҙөкләндереү эштәре дауам итә. Ғөмүмән алғанда, Башҡортостанда 24 паркты яңыртыу ҡаралған. Өфөлә иң күләмле эштәр Ленин исемендәге паркта бара. Унда, биләмәнең тарихи әһәмиәтен иҫәпкә алып, заманса ял урыны булдырыла, архитектура элементтары яңыртыла, ағастар ултыртыла. Парктарҙы төҙөкләндереү "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә башҡарыла.

✓Баш ҡала хакимиәтенән, фонтандарҙа һыу ингән өсөн штраф ҡаралған, тип белдерәләр. Ҡағиҙәне боҙоусы балаларға - 500-1000 һум, ата-әсәләргә - 2000-3000 һум. Фонтандарҙа һыу инеү хәүефле. Унда эсәк инфекцияһы йәки конъюнктивит йоҡтороу бик еңел. Һыу химикаттар менән эшкәртелә, улар көслө аллергия һәм тире ауырыуҙары тыуҙырыуы мөмкин. Икенсе яҡтан, фонтандарҙа һыу төшөү ҡиммәтле ҡорамалдарҙы - насостарҙы, яҡтыртыу һәм декоратив элементтарҙы сафтан сығарыуы ихтимал. Шулай уҡ фонтандар - юғары травматизм зонаһы. Һыулы ерҙә ҡолау хәүефе арта, гранит яҡтарға бәрелеү, хатта токтан һуғылыу ҡурҡынысы янай.

✓"Фобос" үҙәге фаразлауҙары буйынса, июлдең икенсе яртыһында эҫе һәм ҡояшлы һауа торошон йәнә ямғырҙар алмаштырасаҡ. Айҙың һуңғы декадаһында һауа температураһының тирбәлеүе көтөлә. Бер нисә көн эсендә термометр бағанаһы +20 градустан +29 градусҡа тиклем күтәреләсәк. 27 июлдән 31 июлгә тиклем ямғыр яуыуы көтөлә. Температура тибрәлеүе июль аҙағында ла, августа ла күҙәтеләсәк.

✓Башҡортостан йөҙөүсеһе Эмиль Сәлимгәрәев Мексикала йөҙөү буйынса Халыҡ-ара паралимпия комитетының донъя серияһы этабында мультимиҙалсы исеменә лайыҡ булды. Республика Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, Эмиль бер юлы 5 миҙал яуланы. Башҡортостан спортсыһының бер алтын, өс көмөш һәм бер бронза миҙалы бар. Абруйлы турнирҙа еңеү өсөн донъяның 26 иленән 282 паралимпиясы көс һынашты. Эмиль Өфөлә Адаптив спорт төрҙәре үҙәгендә Сергей Трухачев етәкселегендә шөғөлләнә, тип билдәләне Руслан Хәбибов.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Тәғәмгә табу

Боронғо дәүерҙәрҙә үк бөгөнгө... Боронғо дәүерҙәрҙә үк бәғзе тәғәмгә, үҫемлектәргә, аш-һыуға табу һалынған. Күп төрлө ҡыр үҫемлектәренең, емешләктең, ҡайһы бер бәшмәктәрҙең нығ ағыулы булыуын ҡанбабалар тәүтормош мәлендә үк танып белгән. Әйтәйек, күкшел һарғылт сәскәле, ваҡ ҡына орлоҡло үләнде, йәғни тилебәрәнде ашау ҡәтғи тыйылған, сөнки ул тилертә. Ваҡ япраҡлы ҡыуаҡта ҡыҙарып бешкән, ымһындырып торған емеште, йәғни бүре еләген тәғәм итеү ярамай.

Әҙәмгә хайуандар менән хакимлыҡ итеү хоҡуғы бирелә, уларҙың фәҡәт ҡанһыҙландырылған итен генә ашарға рөхсәт ителә. Мәгәр үлем язаһы менән кешене ҡорбан итеү, үлтереү тыйыла: "Кем кеше ҡанын ҡоя, уның үҙенең ҡанһы ҡойоласаҡ, сөнки кеше Аллаһы Тәғәлә өлгөһө һәм рәүеше буйынса бар ҡылынған". Әҙәм балаларын тура юлға өндәгән Ҡөрьәндә әйтелеүенсә, Аллаһ биргән ризыҡты ашағыҙ, әсегеҙ, ләкин һаҡ булығыҙ, аҙғынлыҡ, боҙоҡлоҡ таратмағыҙ. Һеҙгә шулар тыйыла: үләкһә, ҡан, сусҡа ите, Алланың исеме түгел, башҡаның исеме әйтеп салынған, быуып һәм бәреп үлтерелгән, бейеклектән йығылып төшөп үлгән һәм мал һөҙөп үлтергән хайуан ите, йола буйынса боғаҙланғандан башҡа - емтек ашаусы йыртҡыс ите һәм шулай уҡ һын алдында салынған ҡорбан ите, фал уҡтары менән бүлгеләнгәне. Былар - харам. Ғөмүмән, рөхсәт ителгән аҙыҡ менән ризыҡланғанда ла сама саманһын үтмәҫкә тейеш, күп ашау - яҙыҡ, саманан тыш күп ашау - гонаһ. Илаһ ҡушҡанса, эй, инсандар, ер йөҙөндәге ризыҡтарҙың хәләл һәм саф, таҙаларын ғына ашағыҙ.

Шумер мифологияһында ер аҫты донъяһы тәғәменә табу һалына. Эвен, эвенк мифтарында ҡатындарға айыу түшкәһенең ҡайһы бер өлөштәрен тәғәм эйеү тыйыла. Башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосында сағылғанса, Йәнбирҙе менән Йәнбикә "бала үҫеп еткәнсе, үҙе йөнлек тотҡансы, баш-йөрәкте ашауҙан, һыуһынға ҡан эсеүҙән балаларын тыйғандар, һис ярамай, тигәндәр".

Балалары иҫ белеп, Шүлгәнгә ун ике, Уралға ун тулғас, берәһе арыҫлан менәм, берәһе шоңҡар сөйәм, тип маҙаһына тейгәс, Йәнбирҙе уларына былай тигән:

Икегеҙ ҙә - баламһыҙ, Күҙемдәге ҡарамһыҙ, Тешәр сағығыҙ уҙмаған, Быуынығыҙ ҡатмаған, Ҡулға сукмар тоторға, Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә, Әле арыҫлан менәргә Миҙгелегеҙ етмәгән. Мин ни бирһәм - ашағыҙ, Мин ҡушҡанды эшләгеҙ.

Йәнбирҙе уларын тыйыу менән генә сикләнмәй, ә утыҡҡансы, йәғни үҫеп нығынғансы, миҙгел еткәнсе, тамам көскә ултырғансы, йола буйынса нимә мөмкин икәнен әйрәтә: "Күнегергә һыбайға, ана, болан менегеҙ, сыйырсыҡтың тыуына яғылбайҙы сөйөгөҙ, һыуһағыҙ уйында, ана, аҡ һыу эсегеҙ, ҡабырсаҡҡа тултырған ҡандан ауыҙ тартығыҙ".

**Сәлимйән БӘЗРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ



# ИПОТЕКА ЮЛЛАР АЛДЫНАН...

## ете ҡат үлсәп ал!

**Ипотека проценты бөгөнгө көндә көс еткеһеҙ юғары һәм шул уҡ ваҡытта фатирҙың үҙенә лә хаҡтар артҡандан-арта ғына бара. Бындай мәлдә торлаҡ һатып алырға кәрәкме һуң? Журналист, финанс блогеры, "Аҡсанан да ҡыйбат" подкаст авторы, Рәсәй Финанс министрлығының "Финкор-2024" премияһы лауреаты Ксения Падерина "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына биргән интервьюһында ошо һорауға ентекле яуап бирә.**

**➔ Ҡулланылыштағы торлаҡ баҙарында күҙәтелгән әлеге хәлде көрсөк тип атарға мөмкинме?**

- Юҡ, улай атамаҫ инем. Хәҙер беҙ, һатып алыусы баҙары, тип атарға мөмкин булған хәлде күҙәтәбеҙ. Банк ставкалары түбән саҡта, һатыусы баҙары була, ул үҙ шарттарын ҡуя, ә һатып алыусыға ризалашыуҙан башҡа сара ҡалмай. Хәҙер ҡулланылыштағы фатирҙы һатып алғанда, бигерәк тә ҡулаҡсаға, сауҙалашырға, хаҡын күпкә төшөрөргә мөмкин.

2008 йылда Мәскәүҙә беренсе фатирыбыҙҙы һатып алғанда һатыусы баҙары шарттары күҙәтелә ине. Иртән ҡарарға киләһең, кискә табан аҡса менән кире бараһың, ә торлаҡты һатып та ебәргәндәр. Йәки иртән ул 4,7 миллион торһа, кискә хаҡы 200 меңгә артҡан була. Хәҙер хәл киреһенсә - беренсе осраған фатирҙы әләктереп ҡалам тип ашығырға кәрәкмәй.

**➔ Банк процентының юғары булыуын иҫәпкә алып, ҡулланылыштағы торлаҡҡа ипотека юлларға кәрәкме икән?**

- Әгәр ҙур булмаған сумма талап ителә икән, минеңсә, мөмкин. Әйтәйек, әле 5 миллион һумға баһаланған фатирҙа йәшәйһегеҙ, ә ҙурырағы, яңыһы 6 миллион һум тора. Эйе, был осраҡта, кредитҡа бер-ике миллион ғына алырға кәрәк булғанда, банкҡа мөрәжәғәт итергә ярай.

Әгәр элекке кеүек, тәүге игәнә өсөн түләүҙең 20 процентын туплап, ҡалғанына ипотека алыу тураһында һүҙ бара икән, юҡ, ынтылмағыҙ. Был күрә-бага башыңды элмәккә тығыуға бәрәбәр. Иненә көс етмәҫ айлыҡ түләүҙәр ятасаҡ бит. Үкенескә, 2021 йылдағы кеүек, 8 процент менән ипотека алыу мөмкинлеге беҙ теләгәнсә тиҙ арала яныңан әйләнеп ҡайтмаясаҡ. Шуға мин яңы төҙөлөштәрҙә төрлө варианттар эҙләргә, льготалы ипотека алырға тырышырға, төҙөүселәр биргән ташламаларға, процентһыҙ кисектереп түләтеү шарттарына иғтибар итергә кәңәш бирәм.

**➔ Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, яҡын арала ҡулланылыштағы торлаҡ баҙарында "квадрат метр" арзанайыр, тип өмөтләнергә урын бармы?**

- Әгәр ваҡыт үтеү менән, ипотека ставкалары түбәнәйһә, халыҡ күберәк торлаҡ һатып ала башлаясаҡ, шуға күрә хаҡтар, моғайын, артыр ғына. Ниндәйҙер сәбәп менән яңы төҙөлгән йорттарҙағы фатирҙар арзанайһа, ҡулланылыштағы торлаҡҡа ла хаҡтарҙың төшөүе ихтимал. Сөнки был баҙарҙа барыһы ла бер-береһенә бәйле. Яңы төҙөлөштәр арзанаймай һәм бынан ары арзанаймаҫ та инде. Сөнки төҙөлөш материалдары ҡыйбатлана, эшсе ҡулдар етешмәй, дөйөм алғанда, торлаҡ хәҙер әҙерәк төҙөлә һәм файҙаланыуға тапшырыла. Әлегә төҙөүселәр сабыр ғына көтә, әммә яҡын киләсәктә юғалтҡан килемдәрен хаҡтарҙы арттырыу иҫәбенә ҡапларға ынтыласаҡтар.

Шул уҡ ваҡытта ғаилә ипотекаһы программаһы шарттары яйлап киңәйә бара, ул ошо йүнәлештә дауам итер, тип уйлайым. Тимәк, ипотека буйынса льготалы шарттарҙан файҙаланған кешеләр күберәк буласаҡ. Улар иң элек ҡайҙа күҙ ата? Әлбиттә, яңы йорттарға. Тимәк, ихтыяж арта, ә был иһә мотлаҡ хаҡтарҙың күтәрелеүендә сағыласаҡ.

**➔ Ҡулай процент ставкалары буйынса ҡулланылған торлаҡҡа ипотека юллап өлгөргән кешеләр хәҙер кеҫәгә һуҡтырмай ғына айлыҡ түләүҙәрен индереп бара. Уларға ниндәй кәңәш бирерһегеҙ: кредитты ваҡытынан алда түләргәме, әллә проценттарҙы "инфляция ашай" тип, хәлде үҙ ағышына ҡуйырғамы?**

- Минән дә ябай ғына һорау: килемең инфляцияға ярашлы үҫәме һуң? Әгәр, мәҫәлән, ипотека өсөн 50 мең түләйһегеҙ, 100 мең һум эш хаҡы алаһығыҙ, ә эш урынығыҙ уны һаман күтәрмәйҙәр, ти. Ошо шарттарҙа инфляция һеҙгә нисек ярҙам итер? Килемегеҙ артҡандан-арта, эш хаҡығыҙ 200 меңгә етте, ти. Айлыҡ түләү хәҙер алған аҡсағыҙҙың яртыһын түгел, ә дүрттән бер өлөшөн тәшкил итә, ул сакта, эйе, инфляция тик һеҙҙең файҙаға. Әммә ысынбарлыҡта бик һирәктәрҙең эш хаҡы был темпта арта бит.

Йыйған һаҡлыҡ аҡсағыҙ булып, уны ипотеканы ваҡытынан алда ябыу өсөн тотонорға ниәтләнһәгеҙ, мин һеҙгә был тупланманы йылына 18-20 процент табыш килтергән банк иҫәбенә һалырға тәҡдим итер инем. Әйтәйек, һеҙ кредитты 8 процент менән алғанһығыҙ, ә банкҡа һалған суммағыҙҙан ике-өс тапҡырға күберәк аҡса йыйыла, тимәк, аҡса эшләй. Аҙаҡ, ставкалар түбәнәйгәс, тупланған сумманы ипотекаға ебәрергә мөмкин. Был осраҡта һеҙ отаһығыҙ һәм бындай план минә нығ оҡшай.

**Әйткәндәй, Өфөлә төҙөлөп яткан торлаҡтың бер квадрат метры тағы 0,7 процентҡа артҡан һәм бөгөн ул 172,8 мең һум тәшкил итә. Иң арзанлы һаналған эконом һәм бизнес класындағы фатир уртаса 7,67 миллион һум самаһы тора. Март айында иһә хаҡтар 168 мең һәм 7,45 миллион һум булған.**

**Ҡулланылыштағы фатирҙың уртаса хаҡы иһә 6,35 миллионға тиклем төшкән, бер квадрат метры 122 мең һум тора.**

ҺИНЕҢ ХОҠУҒЫҢ

# АУЫЛДА ЭШЛӘГӘН ӨСӨН...

## пенсияға 25 процент өҫтәмә

**Ҡартлыҡ һәм инвалидлыҡ буйынса страховкалы пенсияға 25 процент өҫтәмә ауыл хужалығы эштәрендә 30 йылдан да кәм булмаған эш стажына эйә һәм РФ Хөкүмәте тарафынан билдәләнгән исемлектәге вазифалар башҡарған граждандарға түләнә.**

***Был исемлеккә малсылыҡ өлкәһендә (йылҡысылыҡ, һарыҡсылыҡ, ҡошсолоҡ, һөт-ит малсылығы, умартасылыҡ һ.б.):*** ветеринар табиб, фельдшер, санитар; техник, малсылыҡ техниғы, технолог; тракторсы-механизатор, машинист; малсылыҡ мастеры, машина менән һыйыр һауыу оҫтаһы; үҫтереү цехы эшсеһе, мал һуйыу һәм уны эшкәртеү буйынса технолог; коллектив ферма хужалығы етәксеһе (директор), совхоз, колхоз рәйесе һ.б.;

***үҫемлекселек өлкәһендә (йәшелсәселек, емешселек, сәскәселек һ.б.):*** агрохимик, агроном, агротехник; тракторсы, машинист, механизатор, комбайнер; баш механик, механик, ауыл хужалығы техникаһы, машиналар, ҡоралмалар йүнәтеү буйынса слесарь, слесарь-наладчик, ремонтсы; коллектив-фермер хужалығы башлығы (директоры), совхоз, колхоз рәйесе һ.б.;

***совхоздарҙа, колхоздарҙа, ауыл хужалығы кооперативтарында, крәстиән-фермер хужалыҡтарында балыҡсылыҡ өлкәһендә:*** балыҡсылыҡ белгесе-зоотехник, баш ихтиолог, ихтиолог, ихтиопатолог, ауыл хужалығы артелендә һыу хайуандары һунарсыһы, балыҡсылыҡ йүнәлеше инженеры, механик, энергетик, хәүефһеҙлек техникаһы һәм хеҙмәт һағы инженеры һ.б.

***Быларҙан тыш, өҫтәмә пенсия исемлегенә тағы ла түбәндәге һөнәрҙәр инә:*** ветеринар табиб (табиб-бактериолог, фельдшер, техник, автомобиль шоферы, малсылыҡ йүнәлеше буйынса баш инженер, малсылыҡ буйынса баш консультант, баш механик, баш энергетик, баш гидротехник, гидрогеолог, ветеринария клиникаһы, лабораторияһы мөдире, ветстанция, йылҡысылыҡ ихатаһы, сусҡасылыҡ фермаһы, һөт комплексы, һарыҡсылыҡ фермаһы, мал һуйыу пункты, аҙыҡ цехы, инкубатор, һөт-тауар цехы, машина ихатаһы, запас частар склады мөдирҙәре; үҫемлекселек инженеры, мелиоратор, мелиорация бригадаһы тракторсыһы, иген ырҙыны, иген тейәү, тирмән машинистары, үҫемлекселек, йәшелсәселек, ауыл хужалығы культуралары һуғарыу, картуф һәм йәшелсә эшкәртеү, үҫемлектәрҙе һаҡлаусы биологик саралар ҡулланыу буйынса мастер; ауыл хужалығы культураларын зарарлаусы бөжәктәр һәм сирҙәр менән көрәш буйынса техник, селекционер, нормировщик, слесарь, токарь, моторист, радиооператор, колхоз һәм крәстиән-фермер хужалығы ағзаһы һәм башҡалар.

Ауыл хужалығында эшләгән өсөн 25 процент өҫтәмә алырға хоҡуҡ биреүсе стаж фәҡәт раҫланған һөнәрҙәр, вазифалар һәм эштәр исемлегенә ярашлы иҫәпкә алына. Әгәр пенсионер был исемлеккә инмәгән вазифала эшләгән булһа, уның хеҙмәт эшмәкәрлеге өҫтәмә пенсия алырға хоҡуҡ бирмәйәсәк. Хөкүмәт был исемлеккә өҫтәмә индереүҙәр хоҡуҡлы. Ләкин былдай өҫтәмә әлегә ни бары бер тапҡыр ғына - 2019 йылда үткәрелде.

***Шуныһы ла бар:*** ауыл стажын иҫәпләү ҡағиҙәләре страховкалы стажды иҫәпләү ысулынан айырыла. Мәҫәлән, страховкалы стажға рәсми эш осоронан тыш, хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ ваҡыты, 1,5 йәшкәсә бала ҡарау, армияла хеҙмәт итеү, эшһеҙлек буйынса пособие алыу осоро ауыл стажы иҫәбенә индерелмәй. 1992 йылдың 1 ғинуарына тиклем колхоз-совхоздарҙа, машина-трактор станцияларында, коллектив фермер хужалыҡтарында эшләгән кешеләр һөнәренә, вазифаһына, эш төрөнә ҡарамаҫтан, өҫтәмә пенсия исемлегенә индерелә.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

43

# Шифа

18 - 24 июль (майай)
2025 йыл
№28 (1172)

ТАБИП ӘҘӘБЕ



# АУЫРЫУ ЫШАНЫРҒА ТЕЙЕШ!

**Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Кем дә кем дауалау эшенә тотона һәм ул кешенең дауалау оҫталығы тураһында бер нәмә лә билдәле түгел, ул үҙенә бик ҙур яуаплылыҡ ала".**

Табиплыҡ эше башҡа эшмәкәрлектән ҡырҡа айырыла. Ни өсөн тигәндә, ул ауырыу кеше менән эш итә һәм һау кешенән айырмалы рәүештә, сирле кеше ауырыу һөҙөмтәһендә бер аҙ үҙгәреп тә ҡуя. Шуға күрә табип үҙе белем алған өлкәнең белгесе генә түгел, гражданин, йәмәғәт эшмәкәре лә булырға тейеш. Табип даими рәүештә үҙен-үҙе тәрбиәләргә бурыслы. Үҙ-үҙенде тәрбиәләү - бик ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Ысын табип үҙе шөғөлләнгән эшмәкәрлеге, ауырыу һәм йәмғиәт алдындағы бурысы хаҡына эш итә. Медицина классиктары табипҡа хас ошондай үҙенсәлектәрҙе атай: үҙ өлкәһен бик яҡшы белеү, кешенең сирен тиҙ арала аңлап, кәрәкле саралар күреү, үҙ-үҙен тыныс һәм ышанyслы тота белеү һ.б.

Ауырыу табипҡа ышанырға тейеш. Шунһыҙ һауығыу процесы оҙаҡҡа һуҙылыуы мөмкин. Бер-береһен тулыһынса аңлау, тығыҙ мөнәсәбәттәр, табиптың һәр әйткәнен үтәү - һауығыуға илткән юлдар. Сирләгән кеше шул хаҡта онотмаһын ине: бары тик үҙенең һауығыуына сикһеҙ ышанған кеше генә ауырыуын еңә ала.

Табип өсөн баҫалҡылыҡ - иң кәрәкле холоҡ үҙенсәлеге. Билдәле ғалим, бөтә тормошон медицина өлкәһенә бағышлаған Әбүғалисина, үлер мәле еткәс, былай тип әйтеп ҡалдырған: "Кешеләр үҙҙәренең бер нәмә лә белмәйенсә үлеп китеүен тойоп, теге донъяға күсә". Әйткәндәй, Әбүғалисинаның һаулыҡ һаҡлауға бағышланған күп томлыҡ хеҙмәттәрен бөгөнгө медицина ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнә.

Әлбиттә, оптимизм хисе һәр табипта ла булырға тейеш, әммә үҙ көсөңә уғата ышаныу ҙа килешмәгән хәл. Табип тере кеше менән эш иткәнен бер минутҡа ла онотмаҫҡа тейеш.

Табип өсөн дөрөҫлөк - эшмәкәрлегенең төп шарты. Ҡайһы саҡ уға ауырыу һәм уның туғандары өсөн бик үк күңелле булмаған нәмәләрҙе хәбәр итеү бурыс итеп йөкмәтелә. Бәғзе бер тәжрибәһеҙ һәм үҙенә артыҡ нығ ышанған табиптар сирлеләргә дөрөҫөн әйтмәүсән. Дөрөҫөн әйтеү, әлбиттә, һәр ваҡыт ҡыйын, әммә был табип өсөн мөмкин булмаған хәл. Бындай ваҡытта табип, хәҡиҡәтте йәшермәйенсә генә, шулай ҙа ауырыуҙың психикаһын һаҡларға тырышып, диагнозды хәбәр итергә бурыслы.

Табиптың әйткән һәр бер һүҙе оло мәғәнәгә эйә. Ул бер үк ваҡытта сирле кешене мөғжизәле рәүештә һауыҡтыра ла, үлемгә этәрә лә ала

**"Медицина Пророка" китабынан.**

МЕДИЦИНА ХӘБӘРҘӘРЕ

## АРТЫРҒА!



**2025 йылдың тәүге кварталында Башҡортостанда диспансеризация үткән 124 меңдән ашыу кешенең 293-ендә түлһеҙлек, ә 22 меңгә яҡын кешелә репродуктив функция боҙолоуы табылған. Был һандарҙы республика һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Хөкүмәт кәңәшмәһендә әйтте.**

Халыҡ һанын тотороҡло арттырыу - социаль сәйәсәттең төп йүнәлештәренең береһе. Репродуктив һаулығы менән проблемаһы булғандар махсус иҫәпкә ҡуйылған һәм уларға функцияны тергеҙеү өсөн махсус ярҙам күрһәтелә. Һуңғы йылдарҙа республикала түлһеҙлекте дауалау өсөн ярҙамсы репродуктив технологиялар (ЭКО һ.б.) буйынса квоталар һаны йылдан-йыл арта, 2025 йылда уларҙың һаны 2489-ға еткән. Шулай уҡ тыуым күрһәткесен күтәреү өсөн аборт яһарға уйлаған ҡатын-ҡыҙҙар менән аңлатыу эштәре алып барыла, ауылдағы ғаиләләр медицина ярҙамына йәлеп ителә, тип билдәләне Айрат Рәхмәтуллин.

## ҠАН ТАПШЫРЫП...



**Башҡортостанда 2024 йылда 31 меңдән ашыу кеше ҡан доноры булған.**

Бер йылда төбәк халҡы 73 меңгә яҡын донация яһаған, 12 меңгә яҡын кеше Почетлы донор исеменә эйә. Рәсәйҙә 18 йәше тулған һәр граждан ҡан доноры була ала. Донор булыу - ирекле ҡарар. Уның өсөн тәүҙә бушлай медицина тикшереүе үтергә кәрәк. Өфөләге Республика ҡан тапшырыу станцияһында, шулай уҡ уның Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Нефтекама, Белорет, Бөрө һәм Күмертау филиалдарында ҡан тапшырырға мөмкин.

## ЙОД ҠЫТЛЫҒЫ



**Башҡортостан халҡының 70 процентында йод дифициты күҙәтелә. Был элемент етешмәһә, ҡалҡан биҙе сирҙәре башланыуы ихтимал, тип белдерә Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы эндокринологы Ләйсән Ғарипова.**

Ҡалҡан биҙе Т3 (трийодтиронин) һәм Т4 (тироксин) гормондары бүленеп сығыуы өсөн яуаплы, ә уларҙың синтезы өсөн йод кәрәк. Матдәләр алышыныуы, энергия балансын нормала тотоу өсөн генә түгел, хатта кешенең ниндәй хис-тойғолар кисереүе лә ошо гормондар менән бәйле.

Организмда йод етешмәүҙең аҙаҡҡы сиге - гипотириоз сире. Әгәр уны дауаламаһаң, йөрәк эшмәкәрлегенә зыян киләсәк. Сир башланып ҡына торғанда һиҙелмәй ҙә тиерлек. Ләкин тора-бара тамаҡта нимәлер торған кеүек, аҙыҡ йотҡанда ла нимәлер ҡамасаулай, көн һайын йоҡо туймай, баш ауырта, тире кибә, тырнаҡтар йәмһеҙләнә. Бигерәк тә ауырлы һәм бала имеҙгән ҡатындар, балалар был сиргә дусар була. Профилактика өсөн йодланған тоҙ тотонорға, әммә уны әҙер, бешеп сыҡҡан ризыҡҡа һәм салаттарға өҫтәргә кәрәк, сөнки йылытҡан саҡта йод осоу сифатына эйә. Рационда диңгеҙ ризыҡтары, диңгеҙ кәбеҫтәһе, балыҡ булһын. Емеш-еләктән хөрмә һәм фейхоа йодҡа бай.

## ҺӨҘӨМТӘЛЕ



**Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы йыл башынан үткән "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы һөҙөмтәләрен иғлан итте.**

Уға ярашлы, табиптар райондарҙа йәшәүселәрҙә дүрт меңдән ашыу сирҙе тәүге тапҡыр асыҡлаған. "1582 пациент социаль әһәмиәтле ауырыуҙарға дусар. 1 307 пациентҡа ҡан баҫымы күтәрелеүе менән бәйле ауырыуҙар буйынса диагноз ҡуйылды, 70 кешелә - яман шеш, 199 кешелә шәкәр диабеты булыуы асыҡланды. Был ауырыуҙарға ентекле тикшерелеү өсөн йүнәлтмә бирелде", - тип аныҡлыҡ индерәләр ведомствола. Акция сиктәрендә, республика табиптары бөтәһе 63 меңдән ашыу ауырыуҙы ҡабул иткән, 14133 тикшереү үткәргән, шул иҫәптән: 9 069 - флюорография, 5 056 маммография яһаған.

## САБЫЙЫҢ СӘЛӘМӘТМЕ?



**Республика Медицина-генетика үҙәге Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм Беренсе канал тарафынан булдырылған "Призвание" премияһына лайыҡ булды.**

Премияны йыл һайын илдең иң яҡшы табиптарына тапшыралар. Медицина-генетика үҙәге киңәйтелгән неонаталь скринингтың инновацион ысулын индергән өсөн "Иң яҡшы диагностика ысулы - 2025" номинацияһында билдәләнде. Уны Башҡортостанда 2023 йылдан уҙғаралар. Яңы тыуған сабыйҙарҙы 40-тан ашыу генетик ауырыу буйынса тикшерәләр.

Биоматериал өлгөләре Башҡортостандың бала табыу йорттарынан ғына түгел, шулай уҡ Өфөгә Ырымбур, Ульяновск, Һамар, Һарытау өлкәләренең, Пермь крайының һәм Марий Эл Республикаһының 151 медицина учреждениеһынан килтерелә.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ТАБИПТАР АҘЫРАҠ ЙӘШӘЙМЕ?



Мәшһүр медицина докторы, ғалим Владимир Бехтерев (1857-1927), үҙенең "Рәсәйҙә табибтарҙың хәле һәм уларҙың эшмәкәрлеген өйрәнеү" тигән хеҙмәтендә Баш мейеһе институты лабораторияһында үткәргән тикшереүҙәренә таянып, табибтарҙың башҡа һөнәр кешеләренә ҡарағанда 10-20 йылға аҙыраҡ йәшәүе хаҡында яҙып үтә. Интернетта был йәһәттән бик күп мәғлүмәт килтерелә.

Бөрйән районында тыуып үҫеүсе халыҡ табибы Марат Ишмөхәмәтов та (мәрхүм, ауыр тупрағы еңел булһын!) ошо турала китаптарында яҙғайны. Был хәлдең сәбәптәрен ул табиб һөнәренең йоғошло ауырыуҙар йоҡтороу йәһәтенән хәүефле булыуын һәм уларҙың кеше физиологияһын яҡшы белеүенә бәйләп аңлатҡайны. Уның фаразы: табиптар башҡаларҙан 17 йылға аҙыраҡ йәшәй.

Тәүге сәбәп бер ниндәй ҙә шик тыуҙырмай, ә бына икенсеһенә килгәндә, Марат ағайға һорауҙар биреп, бәхәсләшеп алғаныбыҙ ҙа хәтерҙә. "Табиптар ошо һөнәргә уҡыған саҡта теге йәки был ауырыуҙың, сирҙең нисек барлыҡҡа килеүен, үҫешен мәйеттәрҙе ярып өйрәнгәс, үҙҙәрендә лә шундай уҡ сирҙәрҙең тәүге билдәләре барлыҡҡа килгәндә, уйҙары менән шуларҙы күҙ алдына килтереп, киреһенсә, тиҙ генә үҙҙәрен ҡырҡыу хәлгә еткерә. Был хәл уйҙың, фекерҙең матдиләшеүе тип атала", - тигәйне халыҡ табибы.

Марат ағай шулай уҡ ябай кешеләргә үҙҙәренең сире хаҡында артыҡ белергә ынтылыуын да, серәкәй тешләһә лә, юҡ сәбәпте бар итеп, табибҡа йүгереп барып анализдар тапшырыуҙы ла өнәп еткермәне.

Әлбиттә, был фекерҙәр бәхәсле, ҡапма-ҡаршылыҡлы, шулай ҙа, диагностикалау үҙәгенә барғандан һуң табибтарҙың ҡиммәтле-ҡиммәтле дарыуҙарға бит-бит рецептар яҙған сағында Марат ағайҙың һүҙҙәре иҫкә төшә барыбер ҙә...

**Һөйөндөк АСЫЛОВ.**

✓ *Ул саҡта ауылда тик ҡара мунса яҡтылар, башыбыҙға еҫ тейеп, ҡоҫа башлаһаҡ, Кәтибә инәй менән өләсәйем беҙҙе дауалай торғайны. Кәрәсин лампаһы ҡыуығына һуғанды ваҡ ҡына итеп турап һалалар ҙа ҡолаҡҡа ҡуялар.*



**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - ғалим-анестезиолог, реаниматолог, һаулыҡ һаҡлау һәм йәмәғәт эшмәкәре, 2003 - 2017 йылдарҙа Республика клиник перинаталь үҙәгенең баш табибы, медицина фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы Фирғәт Миҙхәт улы БАЙРАМҒОЛОВ.**

**Һәр бер кешенең үҙенә генә хас тормош юлы була, бала сағынан алып ололғайғансы уға төрлө шарттарҙа, төрлө мөхиттә, төрлө кешеләр менән аралашып көн итергә, шатлыҡ-ҡыуаныслы, бәхетле мәлдәр менән бер рәттән, бәғзе бер көндәрҙә ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы, йөрәгенә ауыр бер таштай булып ятҡан хис-тойғоларҙы ла кисерергә тура килә. Иҫән-һау, имен-аман ғына йәшәп ятҡанында йә ҡыйырһытыуҙарға, кәмһетеүҙәргә дусар ителә, күңелен биреп эшләгән эшенән бушатыла, йә иһә уға йәнен-тәнен бимазалаған сирҙәргә ҡаршы көрәшергә тура килә. Шул саҡта: "Донъя бит был..." - тибеҙ...**

рҙың аттары шәп инде ул!" - тип маҡтай торған булған. Шунан киткән инде "айһайҙар" араһы. Әсәйем яғынан арабыҙҙың да атамаһы бик ҡыҙыҡ: уның ата-бабалары бай йәшәгән, аттары иҫәпһеҙ күп булған, өйөрҙәрен ҡыуып алып килгәндә уларҙың тояҡ тауыштары әллә ҡайҙан тубырҙап ишетелеп торған, имеш. Әсәй яғынан уҡымышлы муллалар күп булған, мәҫәлән, XIX быуат баштарында уның 5-се быуын ҡартатаһы Әүәлбаев Ғәбделғафарҙың Темәс ауылының указной муллаһы булыуы билдәле. Атайым яғынан олатайҙарыбыҙ хәрбиҙәр булған: сотниктар, есаулдар, хорунжийҙар. Әйткәндәй, атайымдың һөйләүе буйынса, Күсей ауылында тыуып үҫкән

- Мин уҡытыусылар ғаиләһендә үҫтем, атайым-әсәйем мине лә уҡытыусы булыр, тип өмөтләнде. Ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, беҙҙең күршеләребеҙ һөнәре буйынса табибтар ине. Бәлки, шуғалыр ҙа, бала сағымдан табибтарҙы ныҡлыраҡ күргәнмендер. Унан һуң, ауылыбыҙҙағы төп күршебеҙ Шәрифйән ағайҙың әсәһе Кәтибә инәй халыҡ медицинаһы алымдарын бик оҫта ҡуллана ине. Был йәһәттән өләсәйем дә күп нәмәне белде. Ҡул быуыны сыҡтымы, кемдеңдер аяғы ҡаймыҡтымы - тиҙ генә урынына ултырта инеләр. Ул саҡта ауылда тик ҡара мунса яҡтылар, башыбыҙға еҫ тейеп, ҡоҫа башлаһаҡ, Кәтибә инәй менән өләсәйем беҙҙе дауалай торғайны. Нисек тиһегеҙме? Кәрәсин лампаһы ҡыуығына һуғанды ваҡ ҡына итеп турап һалалар ҙа ҡолаҡҡа ҡуялар. Ысынлап та, был дауа еҫ тейгәнде бөтөрә торғайны. Әле бөгөн дә, кеше физиологияһын, патофизиологияны белә тороп,

тора ине, халыҡ күп, ауыл эшсәндәре өсөн ҙур ғына участка дауаханаһы эшләне, уның стационарында 20-нән ашыу койка булды. Әммә унда оҙаҡ эшләргә яҙманы, сөнки әрме хеҙмәтенә саҡырылдым. Ике йыл ярым СССР менән Ҡытай сигендәге заставала хеҙмәт иттем, отделение командиры, заставаның комсомол ойошмаһы секретары булдым.

Армиянан ҡайтыу менән, 1981 йылда, Башҡорт дәүләт медицина институтының киске бүлегенә уҡырға индем, эшләп уҡыным. Баш ҡалабыҙҙың 21-се дауаханаһында эшкә урынлаштҡайным, интернатураны ла шунда үттем, анестезиология-реаниматология йүнәлешен һайланым. Дауахананың баш табибы эшләгән еремдә ҡалырға тәҡдим итте, ризалаштым. Ошо дауаханала 18 йыл хеҙмәт итергә насип булды.

1991 йылда беҙҙең дауахана базаһында Киҫкен ағыуланыуҙар үҙәге асылды. Ошондай пациенттар, башлыса, дауаханаға

фүр Шәкүр улы ҡабул итте, ҙур белемле, ихлас кеше ине ул. Реанимация бүлегендә эшләрмен тип уйлаһам, улай булмай сыҡты. Бактиһәң, 2-се РКД-ла эшләү менән бер рәттән, мине Башҡортостан Президенты М.Ғ. Рәхимовтың шәхси табибы вазифаһына ла тәғәйенләгәндәр икән. Аҙна-ун көн үтеүгә мине Мортаза Ғәбәйҙулла улы менән таныштырырға алып барҙылар. Был минең Президентты яҡындан тәүге тапҡыр күреүем ине. Ул минең менән ихлас һөйләште, атаәсәләремде, минең ҡайҙа һәм нисек эшләгәнемде лә яҡшы белә булып сыҡты. Үҙенең шәхси табибы булып эш башлауыма ризалыҡ белдерҙе. Республика етәксеһе булғас, уның сәләмәтлек торошон даими тикшереп, контролдә тотоҡ, мохтажлыҡ булғанда тейешле медицина ярҙамы күрһәттек.

Көҙ етеүгә мине дауахананың баш табибы саҡырып алып, былай тине: "Фирғәт Миҙхәт улы, мине 22-се дауаханаға баш

# КЕШЕ ҒҮМЕРҘӘРЕН

## иң сауаплы

- Эйе, шулай. Быны әле Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тормошо хаҡында яҙылған китапты уҡып ултырам. Ниндәй иҫ киткес шәхес булған был бөйөк кеше. "Инанған динебеҙ кеүек үк, халҡыбыҙҙың түҙемлеге иҡһеҙсикһеҙ. Әммә Аллаһ Тәғәлә - ғәҙелдәрҙен-ғәҙеле, һәм ул беҙ күргән яфалар өсөн үҙенең сауабын ҡайтарырға теләр. Мин ул көндәргә тиклем йәшәй алмам, әммә һин, Шакир (Шакир Хыялетдинов - Зәйнулла ишандың мөрите. - **Ред. иҫк**), хәҡикәт нурын һис бер кем дә ҡаплай алмаҫ ваҡытты күрәсәкһең".

Быны ошо юлдарҙы уҡығас, тамағыма төйөр тығылғандай булды: үҙе лә дин үә хәҡикәт юлында сикһеҙ ыҙа-яфалар күргән шәхестең киләсәккә өмөтө ниндәй ныҡ, ҡаҡшамаҫ булған. Беҙ, әҙәм балалары, яҙмышыбыҙға яҙғанды ҙур түҙемлек менән кисерергә бурыслыбыҙ, сөнки кешенең тәне лә, йәне лә Аллаһ ҡарамағында, шуға ла ауырлыҡтарҙы ла, сирсырхауҙарҙы ла беҙгә бирелгән һынау итеп ҡарау кәрәктер.

**Кеше ғүмере, уның яҙмышы хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡас, уҡыусыларыбыҙҙы һеҙҙең менән яҡынданыраҡ таныштырып китеү урынлы булыр, тим...**

- Атайым Баймаҡ районының Күсей ауылынан, ата-бабаларыбыҙ бөрйән ырыуына ҡарай, айһайҙар араһынан. Әсәйем Темәс ауылы ҡыҙы, шулай уҡ бөрйән ырыуынан, тубырҙаҡтар араһы. Атайымдан арабыҙҙы ни эшләп айһайҙар тип атағандары тураһында һорағайным. Атайым шулай тине: "Беҙҙең нәҫелебеҙҙең аттары һабантуйҙарҙа, бәйгеләрҙә гел беренсе урын ала икән, ә халыҡ һәр саҡ: "Ай-һай, была-

Советтар Союзы Геройы Тәфтизән Миндеғолов та беҙҙең нәҫелдәшебеҙ. Атайымдың атаһы Әсфәндиәр олатайым да заманында бик алдынғы кешеләрҙең береһе булған, үҙенең оҫталығы менән тирә-яҡта дан тотҡан. Ул төрлө кәрәк-яраҡ эшләү өсөн дүрт станок менән файҙаланған, бер һандыҡ инструменты булған. Һауыт-һабаларҙы, сана, дуға, ҡамыт, эйәрҙәрҙе лә бик шәп итеп яһап ҡуйған. Ауылыбыҙ муллаһы үлер алдынан олатайыбыҙҙан үҙенә ҡәбер ташын алдан эшләтеп ала, яҙыуы ғәрәп хәрефтәре менән яҙыла, ул таш әле лә зыяратта тора. Кулактарға репрессия башланғас, әйберҙәрен йыйып алып, фамилияһын үҙгәртеп, приискыға эшсе булып китә.

Атайым уҡытыусы булды, химик-биолог, Силәбе дәүләт университетын тамамлаған. Уны Әхмәр ауылы мәктәбенә директор итеп тәғәйенләйҙәр, ә әсәйем педучилище тамамлағандан һуң Атанғол ауылы мәктәбендә башланғыс кластарҙа уҡыта. Улар шул саҡта танышып китеп өйләнешәләр.

Олатайымдың гендарынандыр, атайым һүрәт төшөрөүгә оҫта булды, бер һауынсының портретын эшләп, республика конкурсында беренсе урын ала. Шунан һуң халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллин атайымды Суриков исемендәге сәнғәт училищеһына уҡырға ебәрә. Шулай итеп, атайым рәссам һөнәренә лә эйә була. Һуңынан ғаиләбеҙ Йүкә (Ишмырҙа) ауылында, бер аҙ Баймаҡта йәшәп ала. Сиҙәм күтәреү кампанияһы башланғас, атайымдарҙы "Ирәндек" совхозына, Төркмән ауылы мәктәбенә күсерәләр. Мин урта мәктәпте ошонда тамамланым.

**Ни сәбәпле табип һөнәрен һайларға булдығыҙ?**

ошондай дауалау ысулының ыңғай тәьҫирен бер нисек тә аңлата алмайым. Ошондай маһир халыҡ дауалаусыларын хәҙерге ваҡытта осратһам, улар белгәнде ихласлап өйрәнер инем. Күрәһең, бик боронғонан килгән тәбиғи дауалау ысулдарын быуындан-быуынға тапшырып килеүселәр булғандыр, улар дарыу үләндәрен ниндәй осраҡтарҙа һәм нисек итеп ҡулланып булыуын, бүтән төрлө дауалау алымдарын яҡшы белгән бит.

Бала сағымда тағы ла бер ваҡиға хәтеремә уйылып ҡалған: атайым һарыҡ бәрәсенә операция эшләгәйне. Былай булды был хәл. Һарығыбыҙ бәрәсләгәс, уның бәрәсе көндәр буйына баҡырып ята башланы. Атайым, биолог булғас, уның сәбәбен асыҡлаған: бактиһәң, бәрәстең анал тишеген япҡан мускулдары бер-береһенә йәбешкән икән, шуға эсе күбеүенән ыҙаланған. Атайым: "Бәрәсте дауаларға кәрәк, һин минә ярҙам итеп торорһоң",- ти. Атайым эшләгән операцияны ҡарап торҙом, бәрәсебеҙ һин дә мин һауығып китте. Был хәл минә ныҡ тәьҫир иткәндер, тим.

**Табиблыҡҡа юлығыҙ нисек башланды?**

- 8-се класты тамамлағас, Сибай медицина училищеһына юлландым. Атайым, әсәйем өсөн был көтөлмәгәнерәк хәл булды, улар мине лә педагог һөнәрен һайлар тиген уйҙарынан арынмағайны. Әммә, бер хәл иткәс, мин уҙ һүҙемдә торҙом. Ошо урта һөнәри уҡыу йортонда фельдшер-акушерлыҡҡа уҡып сыҡтым. Шулай итеп, медицинаға юлым 1975 йылда башланды, ә 1979 йылда "Ирәндек" совхозының Төркмән ауылында фельдшер-акушер вазифаһында эш башланым. Әйтергә кәрәк, ул саҡта элекке сиҙәм совхозы гөрләп

ауыр хәлдә килтерелә, уларға һис кисекмәҫтән ашығыс медицина ярҙамы талап ителә. Быйдай осраҡтарҙа анестезиолог-реаниматологтың бәләгә тарыған кешеләрҙе ҡотҡарыуҙа тотҡан урыны баһалап бөткөһөҙ - беҙ бит йыш ҡына үлем сигенә етеп барған кешеләрҙең ғүмерен ҡотҡарыу өсөн көрәшәбеҙ. Йәш саҡ - дәртле саҡ, үтә тынғыһыҙ һәм яуаплы эшебеҙҙән ҙур ҡәнәғәтләнеү ала инек. Был донъяла кеше ғүмерен ҡотҡарыуҙан да сауаплыраҡ башҡа бер һөнәр юҡтыр ул.

1998 йылда минең менән йыш ҡына, һаулыҡ һаҡлау министрлығына саҡырып алып, әңгәмә уҙғаралар ине. Сәбәбен һорaһам, резервҡа ҡуйбыҙ, тиҙәр. Ә минең эшләгән урынымдан башҡа бер дауаханаға ла китергә һис бер теләгем юҡ ине. Яңы йыл байрамдары уҙғас, мине һаулыҡ һаҡлау министры Зәфәр Йәдкәр улы Мортазин саҡырып алды. "Кустым, һине 2-се Республика клиник дауаханаһына эшкә ебәрергә булдыҡ. Конкурс уҙғарғайныҡ, һинең кандидатураң алға сыҡты", - ти министр. Аптырап киттем. "Мин шәхсән бер ниндәй ҙә конкурста ҡатнашырға ғариза биргәнем юҡ бит", - тимен. Ул көләмһерәне лә, конкурсты министрлыҡтың махсус комиссияһы уҙғарыуы тураһында әйтте. Бөтәнөһө 25 кеше кандидатураһын ҡараған, ике кандидатура тороп ҡалған, береһе мин булып сыҡҡанмын. "Икенсе табибты үткәрмәнелар, сөнки ул тәмәке тарта", - ти министр.

Шулай итеп, 1999 йылдың 12 ғинуарында, министрҙың приказына ярашлы, мине 2-се РКД-ға эшкә алдылар. Мине дауахананың баш табибы Ғә-

табиб итеп күсерәләр, минең урыныма дәғүә иткән кешегә ышанмайым, уның ҡулынан килмәйәсәк ошондай ҙур коллективты етәкләргә. Һине баш табиб вазифаһына тәҡдим итәсәкмен", - ти. "Минең етәксе вазифалар билгәнем юҡ, былдай яуаплы эште тейешле кимәлдә алып бара алырмынмы икән?" - тип шөбһәләндем. "Коллектив һине белә, хөрмәт итә, коллегаларың менән аралаша беләһең, ҡалғанына эш барышында өйрәнерһең", - тине етәксебеҙ. Шулай итеп, 4 йыл буйына ошо ҡатмарлы һәм яуаплы вазифаны башҡарҙым, коллектив менән етәкселек итеү тәжрибәһен тупланым.

2003 йылда һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә бер сетерекле хәл килеп тыуҙы. Өфөлә "Ғаиләне планлаштырыу үҙәге" тип аталған яңы учреждение асырға булғандар, әммә уның өсөн тәғәйенләнгән бинаны 5 йыл буйына төҙөп бөтөрә алмағандар. Ошо "долгострой"ҙы төҙөп бөтөрөп, "Республика клиник перинаталь үҙәге" исемендә асырға ҡарар иткәндәр. Мине ул саҡтағы Президент Хакимиәте етәксеһе Илдар Рәйес улы Ғимаевҡа саҡыртып алдылар, уның кабинетында вице-премьер Фидус Ямалетдинов та бар ине. Мине шул төҙәлеп тә бөтмәгән ойошмаға баш табиб булып барырға өгөтләйҙәр. Төҙәлеш эштәре буйынса тәжрибәм юҡ, тип ҡаршылашам. Шул саҡта Ғимаев эске бәйләнеш телефонынан Мортаза Ғәбәйҙулла улына шылтыратты. Телефон трубкаһын минә бирҙеләр. "Давай, Фирғәт, һин шунда эшкә бар, һин булдыраһың ул", - тине ул ҡәтғи итеп. Президент һынлы Президенттың нисек итеп һүҙен йыйҡмаҡ

✔ ***Йөклө ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡарынындағы балаһы менән ҡан резустары тап килмәһә, ҡандар ярашмаусанлығы хасил була һәм баланың үлеүе мөмкин. Бындай хәл булмаһын өсөн ҡарындағы балаға уның резусына ярашлы ҡан бирелә.***

# ҠОТҠАРЫУ - ҒӘМӘЛ УЛ

кәрәк? Ризалаштым. Минең урынға урынбаҫарым Хәлил Мостафин тәғәйенләнде.

Бер аҙна эсендә төҙөлөштә тамамлар өсөн кәрәк булған барса документтарҙы юристарҙан тикшертеп, министрлыҡтарҙа раҫлаттым. Перинаталь үҙәк 2003 йылдың 13 майында рәсми рәүештә теркәлде, әммә бер генә документ та, коллектив та юҡ - бер үҙем генә. Ойошманың уставын эшләттем, бухгалтерия ла, кадрҙар бүлеге лә юҡ. Учреждениеның счеты ла юҡ, 4 ай буйына эш хаҡы түләнмәне. Минә нулдән башларға тура килде - бинаны киләсәктә медицина учреждениеһы функцияһын үтәрлек кимәлгә еткерергә, коллектив формалаштырырға кәрәк ине. Яңы медицина үҙәгендә тәүге хеҙмәткәрҙәр - улар баш бухгалтер һәм кадрҙар бүлеге начальнигы булды. 4 ай дауамында беҙ коллектив туплау, кәрәкле ҡоралдарҙы урынлаштырыу буйынса үтәнек. Үҙәкте тантанаһы асыу 2003 йылдың декабрендә үтте, унда РФ Хөкүмәтенең вице-премьеры Галина Карелова, БР Хөкүмәтенең Премьер-министры Р.И. Байдәүләтов, вице-премьер Ф.Ә. Ямалетдинов, һаулыҡ һаҡлау министры Ф.Б. Шәмиғолов ҡатнашты.

**Республикала ошоға тиклем бындай медицина үҙәге булманы. Һаулыҡ торошонда билдәле бер проблемалары булған ҡатын-ҡыҙҙарҙы ауырлы саҡтарында медицина контролендә тотоу, бала тапҡан саҡта уларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү, ихтыяж тыуғанда тейешле медицина ярҙамын күрһәтеү - ошо үҙәктең төп маҡсаты итеп ҡаралғандыр?**

- Үҙегеҙ беләһегеҙ, әүәл һаулыҡтары ҡаҡшаған бик күп ҡатын-ҡыҙҙар бала табыуҙан мәхрүм ҡала, әсә булыу шатлығын кисерә алмай ине, сөнки гинекологтар, табибтар уларҙың ғүмерен һаҡлау маҡсатын күҙҙә тотоп, уларға бала табыуҙы ҡәтғи тыйҙы. Үҙәк табибтары проблемалы ҡатын-ҡыҙҙарға иртә диагностика үткәреү, йөклө саҡтарында булаҡаҡ әсәләрҙең һәм ҡарындағы балаларҙың һаулығын контролдә тотоу кеүек эштәрҙе башлап ебәрҙе. Беҙҙең белгестәребеҙҙең күҙәтеүе, даими контроле һәм ярҙам күрһәтеүе арҡаһында йөҙәрләгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ бер ниндәй хәүефһеҙ бала табып, әсә булыу шатлығын кисерҙе.

**Шулай итеп, түлһеҙлек проблемаһын хәл итеүгә тәүге аҙымдар эшләнгән?**

- Эйе, ул саҡта әле ҡатын-ҡыҙҙарҙың түлһеҙлек проблемаһы бар ине, әммә заманса технологиялар ҡулланып, хәҙер уны хәл итеп була. Мин 2005 йылда республикала беренсе булып экстракорпораль аталандырыу (ЭКО) бүлегеген асҡтым. Уны хәтерләй башлаһаң, ҡыҙыҡ сюжетлы романға торорлоҡ. Бының өсөн махсус лаборатория асырға кәрәк, байтаҡ ҡына ҡиммәтле йыһаздар алырға, әҙерлекле белгестәр табырға кәрәк. Иң элек бағыусы таптыҡ, ул беҙгә 50 миллион аҡса күсерҙе. Барыһын да һатып алдыҡ, әммә эшләргә кадрҙар юҡ. Һамарҙағы йәһүдтәрҙең "Карнаухтың инкубация йорто" тигән шәхси коммерция учреждениеһы ошондай эштәрҙе башҡарыуы тураһында ишетеп, бер конгреста уның етәкселәре менән таныштым. "Беҙҙең бер нисә табибты һеҙгә ебәрәм, өйрәтегеҙ, ярҙам итегеҙ", - тимен. Ҙур ғына сумма аҡса түләһәң генә ҡабул итәләр. Ә беҙҙең ул ҡәҙәр аҡсабыҙ юҡ. 1999 йылда Баймаҡтағы һабантуйҙа ул саҡта Һамар башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе булған Минзиә апай Хатыпова менән таныштыҡ. Мин уға ошо проблема хаҡында һөйләнем. Ул Һамар губернаторы аша беҙгә ярҙам итергә вәғәҙә бирҙе. Күп тә ваҡыт үтмәне, Һамарҙан әлеге ойошма етәкселәре шылтырата: "Килегеҙ, ҡабул итербеҙ", - тиҙәр. 5 табибымды алып, уларҙың тәжрибәһен өйрәнеп ҡайттыҡ. Шунан үҙебеҙҙә лә эште яйға һалдыҡ.

Йәнә бер миҫал. Йөклө ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡарынындағы балаһы менән ҡан резустары тап килмәһә, ҡандар ярашмаусанлығы хасил була һәм баланың үлеүе мөмкин. Бындай хәл булмаһын өсөн ҡарындағы балаға уның резусына ярашлы ҡан бирелә. Әммә бындай процедураны Швейцарияның Лозанна ҡалаһында профессор, доктор Холифелдең генә эшләүе хаҡында белдек. Тышҡы бәйләнештәр министрлығы ашаюллап, ике табибты шунда уҡырға ебәрҙем. Улар уҡып ҡайтҡас, ошондай уникаль процедураны беҙҙең үҙәктә лә эшләй башланыҡ.

2007 йылда Мәскәүгә барып, нисек итеп телемедицина сеанстары уҙғарылыуын ҡарап ҡайттым. Ошо хаҡта Президент М.Ғ. Рәхимовҡа тәфсирләп һөйләп аңлатҡас, ул беҙҙә лә телесеанстар аша Мәскәү, сит ил медицинаһының арҙаҡлы белгестәренән консультация алыу, видеоконференциялар, вебинарҙар уҙғарыу өсөн финанс сығымдарын ҡапларлыҡ аҡса бүлергә риза булды. Ул саҡта бындай сеанстар бары тик Мәскәүҙә генә бар ине.

Элегәрәк медицина кислороды етешмәй ине, уның урынына техник кислород ҡулланылды. Ошонон арҡаһында республикала наркоздан бер нисә кеше уяна алмай һәләк булды. Мин Өфөлә медицина кислороды етештереүсе заводты астырыу буйынса күп ыҙаландым. "Был заводтың продукцияһын һатһаң, йыл ярым эсендә барса сығымдарҙы ҡаплаясаҡ", - тигәс кенә финанс министры Хантимеров аҡса бүлергә ризалашты. Заводты ҡора башланыҡ, әммә мин икенсе урынға эшкә күскәс, уны Хәлил Мостафин төҙөтөп бөтөрөп, сафҡа индерҙе. Шуныһы ҡыҙғаныс, йүнләп хужалыҡ иткән кеше булмағас, заводты япҡандар. Ә ундай завод ковид-19 пандемияһы осоронда бик тә кәрәкле булыр ине.

**Һеҙҙе республикабыҙҙың халыҡ һаулығын һаҡлау өлкәһендәге ниндәй проблемалар нығыраҡ борсолдора?**

- Мине иң элгәре демографик хәлдең хөртәйә барыуы борсой. Тыуым кимәле үлем кимәленән һәр даим кәмерәк килеп сыға. Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы ауыр йылдарҙа, ирҙәрҙең бик күбе яу яландарында ятып ҡалһа ла, йыл һайын 60 - 65 мең бала тыуған, ә хәҙер 45 меңгә лә етмәй. Былтырғы күрһәткестәр менән сағыштырғанда, быйыл тыуған сабыйҙар һаны 15 меңгә аҙыраҡ. Элек бәләкәй генә ауылдарҙа ла ФАП-тар, участка дауаханалары булды. Хәҙер килеп һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге оптималләштереү, үҙәкләштереү сәйәсәтенең әсе емештәрен татыйбыҙ: күп урындарҙа бала табыу йорттары һәм дауаханаларҙағы бала табыу бүлектәре бөтөрөлдө. Ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарға тиҫтәләрсә саҡрым юлдар үтеп, бала табыу йортона имен-аман барып етергә кәрәк. РФ Конституцияһына ярашлы, һәр граждандың үҙенең һаулығын һаҡларға хоҡуғы бар икәнен онотоп ебәрә шул чиновниктарыбыҙ.

**Йәшерен-батырын түгел, ҡайһы саҡта беҙҙең власть органдарында ултырған чиновниктарыбыҙ белемле, юғары профессиональ кимәлгә күтәрелгән, үҙҙәре етәкләгән коллективты туплай алған әүҙем шәхестәрҙе бер сәбәпһеҙ ситкә тибә башлай. Һеҙҙең менән булған хәлдәр ҙә күптәргә билдәлелер…**

- Рөстәм Хәмитов республика Башлығы булған саҡта минә ошондай ауырлыҡтарҙы кисерергә тура килде. Мәскәү тарафтарында генетиканы үҫтереү, граждандарҙың генетик паспорттарын булдырыу хаҡында һүҙ сыҡҡас, беҙҙең Башлыҡ та бер кәңәшмәлә Өфөлә Генетика үҙәген асыу хаҡында белдереү яһай. Чиновниктарға ни, һыҙғанып эшкә тотоналар. Ул саҡта Хөкүмәттә һаулыҡ һаҡлау өлкәһе өсөн яуаплы вице-премьер, күп уйлап тормай, ошо Үҙәкте беҙҙең Республика клиник перинаталь үҙәгенең элекке бинаһында асырға, тип тәҡдим индерә. Ә мин, ҡаршы булмаһам да, Перинаталь үҙәктең Аврора урамында төҙөләсәк яңы бинаһының бер блогын генетика үҙәгенә бирергә, үҙемдең белгестәремдең бәғзе берәүҙәрен ошо эшкә йүнәлтеү хаҡында тәҡдимемде индерҙем. Мине тыңларға ла теләмәнеләр. Элекке бинала кадрҙар бүлеге урынлашҡан ҡатты бирергә тигәйнем, унығына ла риза булманылар.

Шул уҡ ваҡытта Европа кимәлендәге ҡоралмалар менән тәьмин ителгән Перинаталь үҙәктең яңы корпусы Аврора урамында йыл ярым эсендә төҙөлөп тә бөттө. "Ростехнологиялар" дәүләт корпорацияһы заказын венгр компанияһы ПЭТРУСКо ентекләп эшләнә. Палаталар корпусы майҙаны 24000 квадрат метр тәшкил итте. Комиссия уны бер һүҙһеҙ ҡабул итте. Яңы бинаны асыу тантанаһына РФ Һаулыҡ һаҡлау министры Вероника Скворцова ла килгәйне. Әммә беҙҙең чиновниктар минең яҙмышымды шуға тиклем үк хәл итеп тә өлгөргән булған икән. 2017 йылдың ғинуар айының бер көнөндә мине һаулыҡ һаҡлау министры Әнүәр Бакиров саҡырып алды һәм минең вазифамдан бушатылыуым хаҡында белдерҙе. "Шым ғына китһән, берәй эш бирербеҙ, ҡарышһаң - эшһеҙ ҡаласаҡһың", - тине. Мин үҙ теләгем менән эштән китеүгә ҡәтғи ҡаршы булдым. Вазифамдан алыныуым хаҡында бойороҡ сығарылды. Тәүге тап-ҡыр суд мине яҡлашып, эшемә кире ҡайтарыуына ҡарамаҫтан, контракт бөткәс, яңынан эштән сығарҙылар.

Ике йыл эшһеҙ ятырға тура килде. Хәмитов киткәс, Һуғыш ветерандарының республика клиник госпиталендә эшләй башланым, хәҙер анестезиология-реаниматология бүлеген етәкләйем. Бында һаулыҡтары ныҡ ҡаҡшаған ветерандар дауалана, МХО-ла яраланып ҡайтҡан яугирҙарыбыҙға тейешле медицина ярҙамы күрһәтелә. Госпиталь коллективы, элеккесә, бик тырышып эшләй, дауаланыусылар күрһәткән ярҙамыбыҙҙан ҡәнәғәт ҡала, эшебеҙгә яҡшы баһа бирә.

**Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә проблемалар әле лә етерлек. Уларҙы ваҡытында һәм заманса хәл итә алыу зарур. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Әгәр эштәр элеккесә барһа, халыҡ һаулығын һаҡлауҙа алға китеш булмаясаҡ. Ни өсөн? Квалифакациялы белгестәр етешмәй, байтаҡ ҡына дауаханаларҙа, бигерәк тә районлдарҙа кадрҙар дефициты бөтөрөлмәгән. Баш табибтар йыш алышынып тора, был коллективтарҙың тотороҡло булыуына һәм юғарыраҡ профессиональ кимәлгә күтәрелә алыуына ҡамасаулай. Унан һуң, кешеләрҙең тәнен һәм йәнен дауалаусыларҙың табиб антына тоғролоҡ һаҡлауына, үҙ эштәренә яуаплы ҡарау кеүек сифаттарына иғтибар етешмәй, ә был асылында рухи тәрбиәлектән киләһ.

**Шулай ҙа киләсәккә өмөтләрәк ҡарау өсөн дә ерлек барҙыр бит?**

- Әлбиттә. Боронғолар, өмөтһөҙ - шайтан, тигәндәр бит. Медицина фәне һәм ғәмәлиәте өлкәһендәге яңы асыштар, яңы технологиялар, профессиональ камиллыҡҡа өлгәшә алған табибтарыбыҙҙың күбәйеүе, дәүләтебеҙҙең һаулыҡ һаҡлауға һалған финанс сығымдарының арта барыуы - бына ошондай шарттарҙа әҙәм балаларының сәләмәтлеген нығытыуҙа яҡшы уңыштарға өлгәшербеҙ, уларҙың ғүмер оҙайлығын арттыра алырбыҙ, тигән ышаныста ҡалайыҡ.



**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ТОҒРОЛОҠҠА ҺЫНАУ БЫЛ!

**Элегерәк барыбыҙ ҙа, ВИЧ менән наркомандар ғына сирләй һәм был беҙгә бер нисек тә ҡағылмай, тип һөйләһәк, хәҙер хәл ҡырҡа үҙгәрҙе. Бөгөн халыҡтың маргиналь ҡатламдары ғына түгел, ә эшләп йөрөгән, әүҙем тормош алып барған кешеләр ҙә ауырый. Йәғни, хәҙер оҙаҡ ваҡыт бер ниндәй билдәләре күҙәтелмәгән, ләкин һуңынан ауыр һәм үлемесле хәүеф менән янаған хроник сирҙе һәр кемдең йоҡтороуы ихтимал. Республика СПИД-ты һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, уларға ҡаршы көрәш үҙәгенең табип-эпидемиологы Айгөл ХӘЙЕРТДИНОВА был вирустың хәүефе тураһында һөйләй:**

- ВИЧ-инфекция - вирус тыуҙырған ауырыу. Ул кешенең иммун системаһын ҡаҡшата, уның инфекцияларҙан һәм ауырыуҙарҙан һаҡланыу һәләтен юҡҡа сығара. Һөҙөмтәлә СПИД барлыҡҡа килеүе ихтимал.

ВИЧ-инфекция йоҡтороуҙың иң таралған төрө - енси бәйләнеш. ВИЧ-инфекциянан һаҡланыу өсөн енси мөнәсәбәткә ингәндә презерватив ҡулланырға, шулай уҡ сәләмәт тормош алып барырға кәрәк. Инфекция йоҡтороуҙың тағы бер юлы бар - вертикаль, йәғни сирле әсәйҙән сабыйға күсә. Һәр хәлдә, мөмкин тиклем күберәк мәғлүмәт белеү кешегә һәр анығ осраҡта төплө уйланылған ҡарар ҡабул итергә мөмкинлек бирә. Барыһына ла билдәле "Көс - белемдә" тигән әйтем бөгөн дә актуаллеген юғалтмай. Вирус йоҡтороу юлдары тураһында күберәк беләбеҙ икән, ябай ғына хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү һәм ҡурҡмайынса йәшәү еңелерәк.

Һис шикһеҙ, алкоголь, психотроп матдәләр йыш ҡына осраҡлы енси мөнәсәбәткә сәбәпсе була, ә стериль булмаған шприцтар һәм энәләрҙе ҡулланғанда ВИЧ-инфекция йоҡтороу хәүефе юғары. Табиптар әйтеүенсә, зарарланыу өсөн "бер тапҡыр" ҙа етергә мөмкин. Әлбиттә, даими тест үтеү мөһим. Рәсәй граждандары аноним рәүештә һәм бөтөнләй бушлай үтергә мөмкин. ВИЧ-ты иҫкәртеүҙә ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау, партнерға тоғролоҡ һәм ихтирам ҙур роль уйнай.

ВИЧ-ты тышҡы билдәләре буйынса билдәләп булмай.

Был инфекцияның оҙаҡ ваҡыт бер ниндәй билдәләре күҙәтелмәй. Кеше һау-сәләмәт булып күренергә, әммә шул уҡ ваҡытта сирле һәм инфекция сығанағы булыуы ихтимал. ВИЧ-инфекция тураһында белеү өсөн ВИЧ-ҡа ҡан тапшырырға кәрәк. ВИЧ-ҡа даими тикшеренеп тороу инфекцияны контролдә тотоу һәм үҙеңде, тирә-йүндәгеләрҙе вирустан һаҡлау өсөн үтә мөһим. Әгәр һеҙҙә сир йоҡтороу хәүефе юҡ икән, йылына бер тапҡыр тест үтергә була. Әгәр инфекция йоҡтороу хәүефе булһа, 3, 6 һәм 12 айҙан һуң ҡабаттан тикшерелергә кәрәк. Әгәр тест ВИЧ-инфекцияға ыңғай һөҙөмтә күрһәтһә, тиҙ арала СПИД-ты иҫкәртеү һәм уға ҡаршы көрәш үҙәгенә йәки йәшәгән урын буйынса инфекционисҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Унда диагнозды раҫлау өсөн өҫтәмә тикшереүҙәр үткәрелә. Диагноз раҫланғандан һуң табип дауа тәғәйенләй һәм кәңәштәр бирә.

УЙЛЫҒА...

# ҠАЙҺЫ ЕРЕҢ АУЫРТҺА...

## йәнең шул ерҙә



**Медиктар фекеренсә, кеше организмы 45 del-ға (del - ауыртыуҙың үлсәү берәмеге) тиклем ауыртыуҙы күтәрә ала икән. Ауыртыу был кимәлдән артҡан осраҡта кеше шок хәленә инә һәм иҫен юғалта йә аңын юя. Ә ҡатындар бала тыуҙырған саҡта 57 del берәмгенә тиклем ауыртыу тойғоһон күтәреүгә һәләтле. Был бер юлы кешенең 20 һөйәге һынған саҡта тойолған ауыртыуға тиң. Тап шуның өсөн дә күп кенә әсәләр донъяға тыуған сабыйының тәүге илауын ишетмәй ҡала, баҡтиһәң.**

**"Бер төрлө ауыртыу икенсеһен кәметеүгә булышлыҡ итә. Әгәр ҙә һеҙ теше һыҙлаған бесәйҙең ҡойроғона баҫһағыҙ, ул бынан тик кинәнес кенә аласаҡ", тигән яҙыусы һәм медик Антон Чехов. "Мөхәббәт - ул йөрәктең теш һыҙлауы", тигән Генрих Гейне. "Ауыртыу - аң уяныуы ҡорамалы", тигән тағы ла бер билдәһеҙ аҡыл эйәһе. Ә беҙҙең халыҡта иһә "Ауыртмаған башҡа - тимер таяҡ", "Йөрәге һыҙламағандың башы ауырта", "Ҡайһы ерең ауырта, йәнең шул ерҙә" тигән әйтемдәр бар. Әлбиттә, уларға һалынған кинәйәләр физик кисерештән дә киңерәк донъя, йәшәйеш хаҡында фәлсәфәүи мәғәнәгә эйә.**

Бер мәл дин юлындағы ҡатындың йортона ауыртыу (һыҙлау, әрнеү) ишек ҡаҡҡан. Хужабикә уны йылмайып ҡаршы алған.

- Һау ғынамы, ауыртыу! Ә мин һине һәр ваҡыт иҫемдә тоттом, килереңде әҙерләнеп көттөм. Килер-килер булғасың, былай ғына, эш юҡта эш булһын, тип йөрөмәйһеңдер: һине миңә яуызлыҡ алып килгәндер ҙә, ауылыбыҙға изгелек үткәргәндер, тип уйлайым. Килгәсең, әйҙә, йортома рәхим ит. Ана, мин һиңә өйөмдөң иң төпкө, күренмәгән ҡараңғы мөйөшөнән урын әҙерләгәнмен...

Ҡунаҡҡа хужабикәнең ихтыярына буйһоноуҙан башҡа юл ҡалмаған. Әммә ул шулай ҙа:

- Ҡалай уңайһыҙ булды һиңә килеп. Ғәҙәттә, беҙ кешеләрҙең өйөнә көтмәгәндә килеп инеп, уларҙың ҡотон алырға яратабыҙ. Ундайҙар тәүҙә беҙҙе өйҙәренең тупһаһынан үткәрмәҫкә тырышып, ҡаршы тороп маташа. Ул сағында беҙҙе алып килеүселәр ярҙамға ташлана, улар ишектәрҙе емереп инеп, хужаларҙың үҙҙәрен иң төпкө, иң ҡараңғы мөйөштәргә бырағтырып, беҙҙе түргә мендереп ултырта. Хужалар гүргә ингәнсе беҙҙең урын түрҙә, тамағыбыҙ балда-майҙа була. Улар беҙҙе ҡыуалап та сығара алмай, ҡәҙер итмәйенсә лә хәлдәре юҡ, - тип хужабикәгә үпкәһен белдерергә лә онотмаған.

- Ә ниңә улар һеҙҙе шулай ҡәҙер итәләр һуң? - тип һорай ҡуйған хужабикә.

- Беҙ кешеләрҙең иң ныҡ ауыртҡан, иң һыҙлаған, иң әрнегән ерендә ултырабыҙ шул. Беҙҙең түр ҙә, тәхет тә нәҡ шул урында, - тигән был өйҙә үҙен ҡәҙерле ҡәҙерһеҙ итеп тойған ауыртыу.

- Һуң, ул ауыртыуҙы һүҙ, үлән менән дауалап, иң һуңғы сиктә бысаҡ менән ҡырҡып алып ташлап була бит, - тигән тағы ла нығыраҡ аптырауға ҡалған хужабикә.

- Кешенең ҡайһы ере ауырта, йәне шул еренә күсә шул. Беҙ ана шул йәнгә йәбешәбеҙ ҙә инде. Беҙҙең түр ҙә, тәхет тә йән материяһынан эшләнә. Ә бына һинең өйөндә миңә бик ҡыйынға тура киләсәк. Күңелһеҙ буласаҡ. Бында килгәнемә инде күпме, ә һин миңә һис юғы иғтибар итеү генә түгел, минең хаҡта уйламаның да шикелле. Мин витаминдар, наркотиктар, спиртлы эсемлектәр, тәмәке яратам, ә һин миңә һис юғы үлән сәйе лә эсермәнең...

Ауыртыуға артабан хажабикә бер ни тип тә яуап бирмәгән. Ҡәҙерле ҡәҙерһеҙ ҡунаҡ ҡараңғы мөйөшөндә астан-ас бер нисә көн ҡаҡланып, сарсап ятҡан да, "рәхимһеҙ" хужабикәнең йортон мәңгелеккә ташлап китергә мәжбүр булған. Ауыртыуҙар, һыҙлауҙар, әрнеүҙәр үҙҙәрен иҫкә төшөрмәгән, иғтибар итмәгән "өйҙәрҙә" оҙаҡ тотҡарламайҙар шул. Улар бик ғорур, тәкәббер заттан. Ауыртыуҙың был йорттан сығып киткәнен бәхетле хужабикә һәм уның ғаилә ағзалары бөтөнләй һиҙмәй ҙә ҡалған. Гүйә, ауыртыу уларҙың йортона аяҡ та баҫмаған һымаҡ булған.

Ә ғүмер буйы ауыртыуҙан ҡурҡҡан күршеләренең өйөн ул бик еңел яулап алған. "Ә беҙҙең күршенең йорто бик үк ныҡ та түгел һымаҡ ине, ә ул ауыртыуҙы нисек еңә алды икән?" тигән аптырауға ҡалған күршеләре үҙҙәренең йортона хужа булып алған ауыртыу тойғоһона ярарға тырышып, уны төрлөсә хеҙмәтләндереп.

Был тарихтан күренеүенсә, дин юлындағы хужабикә ауыртыу тойғоһона үҙенең йәне менән идара итергә мөмкинлек бирмәгән. Йән менән идара итеүгә өлгәшкән ауыртыу, һыҙланыу, әрнеү был организмдың ханына, батшаһына, күп осраҡта, Иблисҡә әүерелә. Иблис иһә, үҙ эшен белә: спиртлы эсемлек, наркотик таптыра, хужаһының ауыҙына тәмәке ҡаптыра.

Психологтар депрессияны кешенең көсһөҙлөгө, ихтыярһыҙлығы күренеше тип атау яғында түгел, улар: депрессия - ул кешенең оҙайлы ваҡыт ауыртыуға түҙергә тырышыу күренеше, ти. Ә дин әһелдәре иһә, депрессия, ғөмүмән, юҡ, ә бары тик Аллаһы Тәғәләгә ышанмау ғына бар, тип белдерә. Был дилемма философияның "Инҡар итеүҙе инҡарлау" законына оҡшаған. Ауыртыу, һыҙланыу, әрнеү булмаһа, быларға түҙеү, сыҙау, түҙемлек, сабырлыҡ булмаһа - тәүгеләре юҡ. Беҙҙеңсә, дини аңлатма һәр йәһәттән отошлораҡ: диндар кеше һәр ауыртыуҙы, һәр һыҙланыуҙы, һәр әрнеүҙе йәнен тәхет иткән Иблис итеп түгел, ә Аллаһы Тәғәләнең үҙенә ебәргән һынауы итеп ҡабул итә.

Ауыртыу хаҡында тағы бер риүәйәт-тарих. Румиға бер мәл йөрәге ныҡ ауыртҡан кеше килгән дә:

-Мин барлыҡ төрлө дарыуҙарҙы ҡулланып ҡараным, файҙаһы булманы. Миңә берәр нисек ярҙам итә алмайһығыҙмы? - тип һораған.

Руми уны иғтибар менән интуитив рәүештә күҙ һынауы аша үткәргән дә:

- Миңә ҡайсы алып килегеҙ, - тигән.

- Һеҙ ҡайсы менән минең йөрәкте ҡырҡырға уйламайһығыҙҙыр ул? - тигән тик кенә ултыра алмаған ауырыу, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә.

- Мин хирург түгел, икенсенән, ҡайсы менән йөрәккә операция яһауҙары тураһында ошоғаса ишеткәнем юҡ ине, - тип көләмһөрәгән Руми.

Ҡайсы алып килгәндәр. Оҫта ауырыуҙың кейгән жилетының бер төймәһен ҡырҡып алған да, унда башҡаса төймә таҡмаҫҡа һәм ҡулы менән төймә урынына ҡағылмаҫҡа ҡушҡан.

Ауырыу ҡайтып китер алдынан Руми уға теүәл ике аҙнанан тағы ла килеүен һораған, был ваҡытҡа уның йөрәге һауығыры хаҡында әйтеп өмөтләндергән. Пациент дауалаусыһы әйткәндәрҙең барыһын да үтәгән һәм теүәл ике аҙнанан йөҙө ҡояштай балҡып килеп ингән.

- Әле генә табибта булдым. Ул минең йөрәкте тыңлап ҡараны ла, барыһы ла яҡшы булыуы хаҡында белдерҙе. Һеҙ минең менән нимә эшләнегеҙ ул, әфәндем? Төймәмдән шайтанды ҡыуып сығарҙығыҙмы? - тигән, шатлығын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә.

- Һеҙ ҡулығыҙҙы һәр ваҡыт жилетығыҙҙың йөрәк тапҡырындағы шул төймәһендә тотоп, төймәгеҙ менән уйнап йөрөгәнһегеҙ. Ул төймәгеҙ һәр ваҡыт һеҙҙең йөрәкте ашаусы, кимереүсе шул "бире" булған да инде. Мин ул төймәгеҙҙе ҡырҡып алып һәм ул тирәгә ҡулығыҙҙы алып бармаҫҡа ҡушып, йөрәк тапҡырын һәм нервыларығыҙҙы уйнатыуҙан, йәнегеҙҙе бер туҡтауһыҙ маҙаһыҙлауынан ҡотҡарҙым, - тип яуап биргән Руми уға көләмһөрәп.

Ҡайһы ерең ауырта, йәнең шул ерҙә шул. Кешелек өсөн дә, милләт өсөн дә был тәбиғи тойғо, инстинкт кимәлендә ныҒынған хәләт. Йәнен һаҡларға теләгән һәр тере организм тәүге ауыртыу сигналдары килеү менән сәбәп ҡылырға тотона. Ошо урында икенсе бер халыҡ әйтеме иҫкә килеп төшә: "Йөрәге һыҙламағандың башы ауырта". Хәйер, был хаҡта уҡыусыларыбыҙҙың үҙҙәренең фекерен ишетке килә. Йә, ни тиерһегеҙ?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**




– Яҙ булған бер ваҡиға онотолмай, - Илгиз Сәмиҙең һүҙенә әллә ни иғтибар итмәне, хәбәрен һөйләүен белде. - Кис ҡайҙандыр ҡайтып киләм. Ятаҡтан йыраҡ түгел урамда йәштәр сыр-сыу килә. Теге роликлы таҡта киҫәге бар бит әле, шуның менән йөрөйҙәр. Бер саҡ ҡаршы урамдан бер инвалид килеп сыҡты. Ботона тиклем ике аяғы ла юҡ, шуның һымағыраҡ кескәй таҡта киҫәгенә ултырған, ҡулдары менән этәнеп хәрәкәт итә. Йәштәр ҡартты шәйләне лә аҡырышып-баҡырышып эргәһенән дә, алдынан да, артынан да, тауҙан төшкән саңғысылар һымаҡ, кәйелеп үтергә тотондо. Көләләр, үҙҙәре, давай, кем шәберәк йөрөй, ярышайыҡ, тип ҡысҡыралар. Шулай ҡылана торғас, береһе ҡарт менән йәнәшә килде лә әллә яңылыш, әллә ысынлап тегегә бәрелде бит. Ҡарт йығылды. Мин йүгереп барҙым да әлеге егетте һуғып осорҙом. Ҡыҙғайным нығ. Торғоҙайым тип ҡарт янына барһам, күҙҙәрендә йәш. Ғәрлегенән, үҙенең көсһөҙлөгөнән илай. Аяныс ярты кәүҙәле кешегә ҡарауы. Торғоҙоп, өйөнә ҡәҙәр оҙатып ҡуйҙым... Эйе, бындай хәлдәр көн дә булмаһа ла, осрап тора. Кеше кешегә дуҫ, туған тигән принципты бөгөн, һис икеләнмәй, кеше кешегә бүре тип үҙгәртеп була.

- Ҡот осмалы хәбәр һөйләнең бит әле. Һуғыу түгел, атырға кәрәк ундайҙарҙы. Бала-саға бигерәк ҡоторҙо шул хәҙер. Бының ише лә... Белмәйем. Үҙең суд тигәс әйтәйем инде, былайтып кеше йыҡманым, үлтерманем, һатманым. Аллаға шөкөр, намыҫым таҙа.

- Тимәк, үҙеңде намыҫлы кешегә хисаплайһың? Үҙ ғүмереңдә береһенә лә хаслыҡ ҡылманың инде?

- Ҡылманым. Тик инвалид тураһындағы ваҡиғаны нимәгә һөйләгәнеңде генә аңламаным.

- Уныһы былай ғына, һүҙ ялғау өсөн генә тигән кеүек. Онотолмай. Ә ҡылманым тигән һүҙеңде ихлас әйтелгәндер, тип иҫәпләйек. Суд дауам итә. Тамсынан күл хасил була, тигәндән сығып, беҙ ҙә ғәйептәреңде ваҡтарынан күрһәтә башлайыҡ. Ғәфү үтенәм, инеш һүҙ оҙонғараҡ китте, артабан ҡыҫҡараҡ тотормон... Һеҙ армиянан ҡайтҡанда, беҙ бала-саға инек. Яҙ ине, дөрөҫөрәге, йәй башы. Шул йәй һеҙҙең артан йөрөп кенә үтте. Сыр-сыу килеп бергә һыу инәбеҙ ҙә киң арҡағыҙға массаж яһайбыҙ, тәмәкегә, бүтән ваҡ-төйәк йомоштарығыҙға йүгерәбеҙ. Былар барыһы ла һеҙҙе яҡын күреүҙән, һеҙгә һоҡланыуҙан тыуған тойғолар ине. Һеҙҙең матур, йәш саҡ, армиялағы хәлдәрҙе ҡыҙыҡ итеп һөйләйһегеҙ, волейболды шәп уйнайһығыҙ, эргәгеҙҙә апайҙар өйөрөлә. Көҙөнә машинаға ултырҙығыҙ. Хәтерегеҙҙәлер, быныһы ҡыш булған ваҡиға, минең атай больницаға эләкте, көн аша янына барып торам. Бер заман, район үҙәгенә юлланырығыҙҙы белгәс, мин толопто алып ҡына киләм, тинем дә йүгереп өйгә ҡайтып киттем. Ә һеҙ, ярар, көтөрмөн, тинегеҙ. Ауыр толопто йөкмәгән килеш, ахмаллаға төшөп йүгереп килһәм, һеҙ юҡ, - Илгиз тамағын ҡырҙы, тулҡынланыуын баҫырға тырышып, тын алышын тигеҙләне. - Ғәрлегемдән шунда ятып иланым. Яҡын күргән кешеңдең хыянатынан да ауырыраҡ нәмә юҡ икән.

- Ҡуйсале, Илгиз, әллә ҡасанғыны хәтерләп ултырма. Мин уны онотҡанмын да. - Сәми, шарҡылдап көлөп, бот сапты. - Йәшегеҙ апаруҡ булһа ла, холҡоғоҙ малайҙарса ҡалған икән дә. Көтмәгәнмен, имеш, таптың һүҙ.

- Ул һиңә бер нәмә лә түгел. Үҙ башыңа төшһә, икенсерәк һайрар инең. Кеше ҡайғыһы төштән кире, тип дөрөҫ әйтәләр. Шулай ҙа бер факттан һығымта яһарға ашыҡма. Аҙаҡ иларға тура килмәһен, - тип ҡуйҙы Илгиз ҡаты ғына итеп.

- Илауын илама ла ул, тик бына шуныһына төшөнмәйем, ауыр енәйәт ҡылған кешене суд хөкөмөнә тарттыралар түгелме һуң? Кеше ғүмерен өҙгән, мәҫәлән, һис юғы, анау ғәрипте ҡолатҡан шалопайҙарға. Юҡһа, һеҙ юҡ-бар иҫләп тик ултыраһығыҙ. Малай саҡта ниҙәр булмай, барыһын да хәтерләп, кемгәлер үпкәләй башлаһаң, ҡайҙа китә ул...

- Эйе, хаҡлыһың, Сәми ағай. Килешәм. Ысын суд уҙғарыу өсөн беҙгә күп нәмә етмәй, иң мөһиме - енәйәт ҡылынмаған. Һин быны намыҫ суды итеп ҡабул ит.

- Уны хөкөмгә тарттырып буламы ни? - Сәми яурындарын йыйырҙы. - Беренсе ишетеүем. Ул бит һауала осоп йөрөгән күҙәнәк һымаҡ; күҙгә лә күренмәй, тотоп та булмай, ауырлығын да тоймайһың, ҙурлығын да самаларлыҡ түгел. Ә судҡа бит факттар, шаһиттарҙың һөйләүе, енәйәт ҡылған, быға дусар ителеүсенең күрһәтмәләре кәрәк. Унан, һәр кемдең намыҫы үҙенсә, үҙе аңлағанса...

- Намыҫты хөкөм итеп була, Сәми ағай. Минеңсә, ҡоро факттарҙан, яланғас дәлилдәрҙән кеше күңеле, кеше йөрәге, намыҫы күпкә бөйөгөрәк. Кеше берәүҙең дә ғүмеренә ҡул һуҙмаҫҡа мөмкин, ә үҙенең битарафлығы, кәрәк саҡта ярҙам итмәүе, ваҡытында яҡлап һүҙ әйтеү урынына өндәшмәй ҡалыуы, дуҫлыҡҡа хыянат итеүе физик үлтереүҙән дә яманыраҡ. Һин әйткән һәр енәйәттең нигеҙе шунда яталыр ҙа ул.

- Тапҡанһығыҙ тикшерер нәмә. Бүтән эшегеҙ юҡмы? Әгәр һорауыңа яуап алырға теләһәң, бирәм: кешене ултыртһаң - шәп, ултыртмаһаң - һинән дә хөрт бәндә юҡ. Уныһын ғына беләм. Беренсенән, үҙ машинам түгел, икенсенән, колхоз йомошо менән барам, ә кеше дүрт кеҫәнде тултырғансы рәхмәт әйтә лә төшә, - Сәми урынынан ҡалҡынып иҙән буйлап йөрөп килде лә, нисегерәк, дөрөҫ һөйләйем бит, тигән еңеүле ҡараш менән кире урынына ултырҙы. - Һәр кемдең законы үҙ ҡулында, шоферҙарҙың бигерәк тә.

- Ярай, шулай ҙа булһын, - тине Азамат һүҙгә ҡушылып. - Илгизгә өҫтәп, мин бер нисә һүҙ генә әйтәйем әле. Бына шул районға барғанда, кешенән аҡса йыя торғайның, иҫеңдәме? Ҡарттарҙан да, бала-сағанан да. Ултырғас, кеше ваҡланып тормай, бирә. Тик һин бит бергә эшләгән иптәштәреңдән, шуларҙың ҡатындарынан, балаларынан йыяһың. Ә билет биреү юҡ. Ғөмүмән, билет һатыу ҡаралмаған. Тимәк, үҙеңә йыяһың, колхоз кассаһына түгел. Ауылдаштарыңдың үҙҙәренең хеҙмәт хаҡына алынған автобусҡа ултырып район үҙәгенә барырға ғына хаҡтары юҡмы ни? Һин әйткән белгестәр күрмәмеш тә белмәмеш, сөнки һин уларҙан алмайһың. Хәҙер бит кеше, Сәми беҙҙән йыйған аҡсаға өй һалып керҙе, тип һөйләй. Ә был етди ғәйепләү, ғүмерең буйы йәбешеп йөрөйәсәк рәнйеү.

Сәмиҙең йөҙөнә, ҡарпыш ҡолаҡтарына ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, ҡарашы туҡталыр нөктә тапмай иҙәндә йөрөнө.

- Ҡойоуын ҡойҙоғоҙ ҙа, эс тип әйтергә онотторғоҙ, - тигән булды, берауыҡ һүҙһеҙ ултырғас. Унан көлөп ебәрҙе, ҡулын тубығына һуғып алды, сәғәтенә ҡараны.

- Ваҡытлы, бик тә ваҡытлы әйттең, юҡһа тамаҡ кибеп китте, һүҙ менән туҡ булып ултырмайыҡ әле, күтәрәйек. - Быныһы Билал һүҙе. - Хужа үҙе өндәшмәй.

- Өндәшмәй тип, әйҙәгеҙ...

- Ә һин осло күҙле икәнһең, барыһын да күреп йөрөгәнһең, - тине Сәми, ауыҙына ҙур ғына ҡыяр киҫәге һалғас. - Машинаны ташлауға нисә йыл, ә һин шуны онотмағанһың. Да-а. Дөрөҫөн әйткәндә, ваҡлыҡ был, малайҙар, ваҡлыҡ.

- Аҡсаһы булмай төшөргәнһеңдер берәй, шуға иҫеңдә ҡалған ул, - тине Билал көлөп.

- Бөттө, әрепләшеү бөттө! - Илгиз ҡулдарын өҫтәлгә һалды, унан һалҡын ғына итеп иптәшенә ҡараны. - Суд дауам итә. Яңылышмаһам, бынан һигеҙ йыл элек колхоз идараһы янды. Беҙ ул саҡта, баяғыса, малай-шалай, ә һеҙ, ғәйепләнеүсе Сәмиғулла Боҫҡонов, колхоз рәйесен йөрөтөүсе шофер. Килгән комиссия янғындың сәбәбен электр сымының замыканиеһынан, тип тапҡан. Идара төн уртаһында янды, ә яныр алда кис колхозсыларға эш хаҡы түләү өсөн алтмыш мең самаһы аҡса алып ҡайтҡан булғандар. Кассир, баш бухгалтер, һеҙ.

- Идара йортона үрт һалыуҙы минән күрмәйһеңдер бит? - Сәми, мыҫҡыллы йылмайып, Илгизгә ҡараны. Шулай ҙа йөҙөндәге һауалылыҡ, һеҙгә бары бер ҙә бирешәһем юҡ, юҡҡа тырышаһығыҙ, тигән тойғо юғалды, хафа менән алышынды.

- Юҡ, Алла һаҡлаһын, һеҙ ундай ҡара эшкә бара булаһығыҙмы? Уға бит йөрәк кәрәк. Мине шул аптырата, өс ай самаһы ғына ултырған яңы бинала ниндәй замыкание булыуы бар? Ундай йортҡа мең тикшереп ҡарап, бар нәмәнең өр яңыһын ҡуялар бит инде. Үҙенә күрә комиссияһы ла ҡабул иткәндер әле. Нисә йыл йәшәп, мин замыканиенан ут сыҡҡанын хәтерләмәйем, ишеткәнем дә юҡ. Ярар, сыҡты ла ти, ниңә тап аҡса алып ҡайтҡан төн һуң ул? Етмәһә, төнөн эстәге уттарҙы һүндерәләр ҙә түгелме?

- Ҡарауылсы ултырған бүлмәнән башҡаһы һүнә инде.

- Был - бер. Уйландыра торған икенсе нәмә лә бар. Ошонан һуң бер ай ҙа үтмәй, баш бухгалтер эштән китә, оҙаҡламай кассир, аңы алмашынып, психбольницаға эләгә, һеҙ ҙә эшегеҙҙе ташлайһығыҙ, - Илгиз һөйләүенән туҡтаны ла "ғәйепләнеүсе"гә ҡараны. - Азамат әйткән өйөгөҙ ошо аҡсаға төҙөлмәнеме икән?

- Ниндәй өй? Ниндәй аҡсаға? - Сәми әллә ысынлап аңламаны, әллә аңламағанға һалышты. - Туҡта, һин нимә? - Ул көлөп ебәрҙе. - Улайтып уйлай башлаһаң, милиция теләһә, бағанаға ла бәйләнә ала, тигән һымаҡ, бар нәмәнән дә шөбһә сығарып була инде ул. Беренсенән, мин кассирҙың алып ҡайтҡан аҡсаны сейфҡа һалғанын ҡарап торманым: һәр бер түрә артынан тегендә-бында эйәреп йөрөү ғәҙәтем юҡ. Минең эш бәләкәй, ҡайҙа ҡушалар - шунда алып барам, алып ҡайтам. Ҡарауылсынан ишекте астырып икәүләп керҙеләр ҙә бер аҙҙан кире сыҡтылар. Аҡсаға йөрөй торған оло сумкаларын ҡалдырғайнылар, кассирҙың ҡулында бер төргәк бар ине. Шул. Ә минең өйгә килгәндә, мырҙалар...

- Туҡта, өйөңдө ҡалдырып тор, уйындың иң ҡыҙығына килеп етеп киләбеҙ. - Илгиздең күҙҙәре янып, ҡаштары маңлайына һикерҙе. - Сумкалағы аҡсаны бушатҡан да шунда төргән, тимәк.

- Уныһы миңә ҡараңғы.

Шулай тиһә лә, Сәми, ысынлап та, шулай булыу ихтималлығын тәү ишеткәндәге һымаҡ аптырап китте, маңлайына тир бәреп сыҡты, ауыҙын ослайтты.

- Идара янғас, әлеге төргәк иҫеңә төшмәнеме?

- Әллә тағы? Юҡ. Уйланырға ваҡыты ҡайҙа? Көнө-төнө тәгәрмәс өҫтөндә бит. Тынғыһыҙ председатель форсат бирәме? Һорауы рәхәт, бына һин минең урынға баҫып яуап биреп ҡара. Бынағайыш, комиссия һорамаған әйберҙәрҙе нығыйһың. Етте! Һин кем? Юрисҡа уҡыуың ғына минән һорау алырға хоҡуҡ бирмәй әле. Һынау үткәрергә ҡарар иттеңме? Тәжрибә туплайһыңмы? Практика кәрәк булдымы? Уны ғына аңламаҫҡа мин дүрәк түгел. Азаматҡа күҙ ҡыҫҡаныңды күрмәне тиһеңме әллә? - тыныс ҡына, хатта ирәйеп башлаған Сәми тиҙлеген арттыра башлаған машина шикелле ҡыҙғандан ҡыҙҙы. Урынынан һикереп тигәндәй ҡалҡынды ла, бер Азамат, бер Билал ҡаршыһына баҫып, Илгизгә бармаҡ янырға кереште. - Уҡыған ереңә артыңдан яҙып та ебәрә алам мин. Ғәйепһеҙ кешене мыҫҡыл иткәнең өсөн тиҙ арт һабағыңды уҡытырҙар, ҡыуылып ауылға ҡайтып төшкәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалырһың. Тәк что иплӛп, мырҙам. - Ишек төбөнә еткән Сәми кире боролдо - йөҙөнә тантана, ҡиәфәтенә баяғы һауалығы кире ҡайтҡайны.

- Тыныслан, Сәми ағай, уйнайбыҙ бит, - тине Билал, көлөмһөрәп.

Рюмкаһына араҡы ҡойҙо, "ғәйепләнеүсе"нең ҡулына тотторҙо.

- Уйһыҙ йөрөргә һин мал түгел бит, Сәми ағай. Тәгәрмәсең генә уйланыуҙан мәхрүм - рулде ҡайҙа бораһың, ул шул яҡҡа борола. Ә һинең башың бар, - тине Илгиз, байтаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырғас, Сәмиҙең тәүге һүҙҙәренә кире ҡайтып, әйтерһең, "ғәйепләнеүсе"нең бүтән һүҙҙәрен бөтөнләй ишетмәгән дә, туҙыныуын да күрмәгән. - Шулай ҙа яңы төҙөлөп бөткән идара йортоноң яныуы, үҙегеҙгә өләшәсәк аҡсаның яҙмышы һине саҡ ҡына ла уйға һалманымы? Унда бит һинең дә эш хаҡың булғандыр?

Сәми Илгиздең хәбәрҙе икенсе юҫыҡҡа бороуына, һүҙҙәрен ишетмәмешкә һалышыуына, унан да бигерәк, артыңдан уҡыған ереңә яҙып та ебәрә алам бит, тигәненә хафаға ҡалмауына аптыраны, унан тәҙрәгә ҡарап ҡул һелтәне.

- Минеке күп түгел ине лә ул.

- Шуға ыжламайһың.

- Ыжламайым шул. Хәҙер уның нимәһен соҡорға инде? Килеп тикшерҙеләр, электрҙан сыҡҡан, тинеләр. Идараға кергән ере хәүефле булған тейме. Ҡоро бүрәнәгә ни, ишшеү мүккә лә яҡын торһа, тоҡаныуы һә тигәнсе инде ул. Давай, бәйләнмә, Илгиз. Ул аҡсаны мин алмағанмын, мин үрт һалмағанмын. Ул көн өйҙәренә илттем дә ҡайтып йоҡларға яттым. Бисә төрткөләүенә уяныһ, тәҙрәгә ҡапланһам, кәнсәләр яна. Сыҡ та йүгер. Уйланмайһың тиһәң дә, нығ ҡурҡтым ул саҡ мин. Бына һин, шәп булғас, бала-сағалай уйнап ултырғансы, ана шул кешеләрҙе тап. Тап та хөкөмгә тарттыр, урланған йәки янған аҡсаны ҡайтар. Үәт булырһың юрист. Әтеү юҡ-бар һорап баш ҡатыраһың.

**(Дауамы. Башы 27-се һанда).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТУҢДЫРМА...
## кәйефте күтәрә, имеш

■ Туңдырма яратыусыларға тағы бер яҡшы яңылыҡ: Британия ғалимдары кәйеф булмағанда туңдырма ярҙам итә, тип раҫлай. Улар туңдырманың мөғжизәле сифатына ғилми аңлатма ла тапҡан. Лондон тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре был татлы ризыҡты ашағандан һуң кешенең баш мейеһендә барған процестарҙы МРТ ярҙамында күҙәткән. Баҡтиһәң, туңдырма баш мейеһенең шатлыҡ тойғолары барлыҡҡа килә торған өлөшөнә йоғонто яһай икән. Был зонаны әүҙемләштереү өсөн бер балғалаҡ туңдырма ашау ҙа етә. Ғалимдарҙың иҫәпләүе буйынса, һәр кеше йылына уртаса 12 кг туңдырма ашай.

■ "Sleep Health" журналында баҫылған яңы мәғлүмәт буйынса, бала һәм үҫмер саҡта иртә йоҡларға ятмау һуңынан йоҡоһоҙлоҡҡа килтереүе ихтимал. 1103 кешенән алынған яуаптарҙың һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, 6-17 йәштәге балаларҙың 90 проценты етерлек йоҡламай, һуңғараҡ уларҙа психологик тайпылыштар башлана: эмоциональ фон боҙола, уҡыуға һәләтлелек түбәнәйә, артыҡ ауырлыҡ барлыҡҡа килә, наркотиктар ҡулланыу хәүефе ҙурая. Ҡағиҙә булараҡ, төндә йоҡламаған балалар төрлө электрон ҡоролмалар ҡуллана, ә уларҙың экраны тәбиғи булмаған яҡтылыҡ бүлеп сығара. Көн тәртибен күҙәткән, ваҡытында йоҡларға ятҡан, төндә - планшеттар, ә иртән кофеин менән артыҡ мауыҡмаған ғаиләләрҙә йоҡоһоҙлоҡ менән бәйле проблемалар осрамай.

■ Япон кухняһын яратыусыларға умами тигән тәм биргес яҡшы таныш. Был тәмде натрий глутаматы бирә. Күптәр натрий глутаматына кире ҡараште булһа ла, ысынында иһә глутамат кешенең тәнендә бар һәм ул нервы күҙәнәктәре араһында электр сигналдары ташый. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, умами тәме өлкән кешеләрҙең сәләмәтлегеге өсөн файҙалы. Япония ғалимдары билдәләүенсә, натрий глутаматы һәм башҡа тәм көсәйтеүселәрҙең тағы бер ыңғай яғы бар - улар файҙалы, ләкин тәмһеҙ ризыҡты ла тәмлегә әйләндерә.

■ Табиптар әйтеүенсә, оҙаҡ йәшәү өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Баҡтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, барыҡты күп ашай. Йомортҡа, ит, һөт аҙыҡтарын улар аҙыраҡ ҡуллана. Оҙаҡ йәшәүселәр кәнәшенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай ҙа ҡайны берҙә үҙенә ярайтҡан аҙыҡтарынды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә эшһеҙ торорға тейеш түгел. Быны өсөн иң яҡшы юл - кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙенде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

БАШҠОРТОСТАН КАРТАҺЫ

# "ЕТЕБӨГӨЛӨШ" ҮРЕ



**Республикабыҙҙың һәр ҡалаһын, район үҙәген Өфө менән һәм үҙ-ара яҡшы юлдар бәйләй. Ауылдарға илткәндәре, әлбиттә, икенсе мәсьәлә. Мин үҙем, үткән быуаттың 60-сы йылдарында тыуған быуын вәкиле, асфальтты тәү башлап Сибай менән Баймаҡ араһында ғына күрҙем. Мәүлетдин ағайым, атайымдың ҡустыһы, 1957 йылда армияға алына. Уларҙы Йылайырҙан иң яҡын булған тимер юл станцияһына, Күмертауға, көҙгө ямғырҙа машина менән алап китәләр. Өс көн машина этеп, уны арҡан тағып һөйрәп, 190 саҡрым араны саҡ үттек, тип һөйләгәйне ул. Урал арьяғын баш ҡалабыҙ менән бәйләгән шоссе юл Иҫәнғол, Мораҡ, Мәләүез аша 60-сы йылдарҙа, Башҡорт АССР-ның ул саҡтағы Министрҙар Советы рәйесе Зекерийә Аҡназаров башланғысында һалына. Асфальт иһә тик 80-се йылдар башында ғына түшәлә.**

Сибай - Өфө юлында хәтәр бер урын бар, халыҡ телендә ул "Семиколенка" тип атала. Йәғни "Етебөгөлөш" үре.

Башҡортостан географияһын бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Уны шартлы рәүештә өс зонаға бүлергә мөмкин: Урал тауҙары, Урал алды һәм Урал арьяғы. Атап үтелгән юл Урал арьяғынан башланып, Урал тауының бер өлөшө булған Йылайыр платоһына артыла һәм унан Урал алды киңлегенә төшә. Ошо төшкән урынды Ирғәйеш йылғаһы миллион йылдар уйған упҡындың итәген ҡырҡып һалғандар. Тау рельефын ҡабатлап, ул тигеҙлеккә ете тапҡыр бормаланып барып төшә. Оҙонлоғо - 4,3 саҡрым.

"Етебөгөлөш" аша үтеү үтә хәүефле һаналды элек. Шуға бәйле бала саҡ хәтирәләре әле лә иҫтә.

Марат дуҫымдың Стәрлетамаҡта туғандары йәшәне. Беҙҙең өсөн йәһәннәмдең үҙендә ятҡан кеүек тойолған ҡалаға ҡунаҡҡа барып ҡайтҡас, ул: "Барғанда "Семиколенка" тигән ғәләмәт ҡурҡыныс ерҙән үтергә кәрәк. Ул урында юл ҡая ташлы бейек тауҙы ете тапҡыр уратып, бөгөлөп-бөгөлөп итеп һалынған. Аҫта - төпһеҙ упҡын, ҡараһаң, баш әйләнә. Бер машина төшөп киткән, сығарып ала алмағандар, шунда упҡын төбөндә ята, ти һаман", - тип һөйләй, ә беҙ дуҫыбыҙҙы хайран ҡалып тыңлайбыҙ, уның шундай алыҫ ерҙәрҙә күреп ҡайтыуына көйәбеҙ ҡыҙа. Минең дә Марат һөйләгәндәрҙе күргем килә, һәм был тормошҡа ашмаҫтай хыял түгел, сөнки Иҫәнғолда үрҙә иҫкә алған Мәүлетдин ағайым йәшәй, нефтяник ул, бураулаусы булып эшләй. Ишембай бураулау идаралыҡтарының берәүһе ул ваҡытта Иҫәнғолда торҙо, геологтарҙың ғаиләләре шунда йәшәне.

Ҡартәсәйем йәй һайын улына ҡунаҡҡа барып ҡайта торғайны. Үҙенә иптәшкә апайымдарҙың берәүһен әйәртә, үҫә төшкәс, юлға мине лә ала башланы. "Мәүлетдиндең өгөрсәһе өлгөргәндер, барып ҡайтайыҡ", - ти торғайны ул, юлға йыйынырға ваҡыт икәненә ишаралай була. Ә ағайым оҫта баҡсасы ла ине.

Юлдыбайға барып, туғандарҙа йоҡлайбыҙ ҙа, таң менән Сибай - Һарыҡташ автобусына сығабыҙ. Ул заманда автобус - берҙән-бер ылау һәм ул күп осраҡта шығырым тулы була. Ҡартәсәйемә урын эләкһә, мин уға терәлеү әмәлен табам. Ундай бәхет тәтемәһә, иҙәнгә ҡуйған төйөн сөгөбөҙгә сүгәләйбеҙ.

"Семиколенка... Семиколенка!.." - автобус эсендә ниндәйҙер йәнлә ҡуҙғыуҙан, ҡолағыма эләнеп ҡалған ошо һүҙҙән һиҫкәнеп киттем. Тимәк, бына ул минең дә йондоҙло минуттарым, Семиколенканы күрер мәҙҙәтем! Әле күрәшлекте белмәгән үткер күҙҙәремде асыбыраҡ (бәлки, кирелһенсә, ҡыҫыбыраҡтыр, унынын кем белә инде хәҙер) автобус ишеге быяла һы аша (тәүге барғанда урын эләкмәгәйне беҙгә) урман-тауҙарға бағам. Ысынлап та, пейзаж үҙгәргәйне. Быға тиклем юл буйынса урман аша, бейек ағастар ышығында килдек, бәләкәй яландар, һирәк ауылдар ғына осраны. Ә хәҙер алыҫҡа киткән тау теҙмәләрен күрҙем. Осолары, ялпаҡтары, урманлыһы, ярым пеләштәре бар. Ҡарашымды юл ситенән аҫҡа төбәгәйнем - унда төпһеҙ упҡын! Ағастар араһынан уның төбөн байҡай алманым. Автобус бигерәк ситтән бара һымаҡ тойолдо. Ирекһеҙҙән, ҡаршы яҡҡа боролоп ҡарайым. Унда таш стена - диуар һыҙаты.

Былай ҙа әкрен килгән автобус, тиҙлеген тағы ла яйлатып, һулға тартылды: "Беренсе бөгөл", - тине эргәләге ултырғыстан урын алған ағай. Янындағы ҡатын ултырғыстың тотонғосона сытырман йәбеште. "Барлығы ете тапҡыр бөгөл буласаҡ - Семиколенка!" - тине тантаналы тауыш менән ир. Ҡатынының ҡурҡыуынан кинәнес ала ине шикелле ул.

Мин дә шөрләй биреп ҡуйҙым. Бигерәк тәрән шул упҡын, автобус та тауға һырығып ҡына, ҡолап китеүҙән ҡурҡып ҡына бара төҫлө. Марат дуҫымдың: "Бөгөлдән үткәндә автобус ҡапыл борола, бер тәгәрмәсе упҡын өҫтөндә һауала эленеп тора бер мәлгә хатта", - тигәне иҫемә төштө. Быны мин һиҙмәнем, әлбиттә. Бәлки, дуҫым шыттырғандыр. Уның ундай ғәҙәте бар ине.

Күпмелер ваҡыт үткәс, автобус тигеҙҙән китте, пассажирҙар ҙа ҡапыл йәнләнде. Тауҙан имен төшөп еттек - шуға ҡыуаналар ине.

Аҫта - Хоҙайбәндә (Аҡҡондоҙ) ауылы, тәбиғәт тә бөтөнләй икенсе төҫлө. Түңәрәк һәм бейек тауҙар араһынан китте юл. Тауҙарҙың бер яғын урман ҡаплаған, ә көн бите яланғас - өрпәкәйле малай башы ишеләр.

...Хәҙер "Етебөгөлөш"тән үтеүе ҡурҡыныс түгел. Юлды киңәйткәндәр, бөгөлөш мөйөштәрен турайтҡандар. Хатта юлсылар, туҡтап, тирә-яҡтың хозур тәбиғәте менән һоҡланһын, иҫтәлеккә фотоға төшһөн өсөн, фотозона булдырылған.

Баймаҡ, Сибай тарафынан Өфөгә әлеге ваҡытта Сермән һәм Белорет аша йөрөйҙәр. Әйткәндәй, артабан Инйәр аша Урал тауын ҡырҡып үткән был трасса тәбиғәт күренештәре буйынса Рәсәйҙең иң хозур юлдары исемлегенә ингән. Унда ла борма-борма артылыштар, бөгөлөштәр бихисап.

Белореттан Өфөгә юл 1990 йылдың көҙөндә асыла. Сибайҙар, Магнитогорск аша Белоретҡа сығып, артабан баш ҡалаға юлланған юл унан һуңыраҡ сафҡа инә. Сермәндән Аҫҡарға, унан Баймаҡҡа киткән юлды 2000-се йылдар башында төҙөп бөтәләр. Шулай итеп, сибайҙарҙың хәҙер Өфөгә үҙ юлы (Магнитогорск аша) бар, баймаҡтарҙыҡы - үҙҙәренеке (Сермән аша), йылайырҙар, хәйбуллалар баш ҡалаға элеккесә "Етебөгөлөш" үре аша йөрөй. Йәштәр, 30 йәштән кесе быуын, бәлки, гел ошолай булған, тип уйлайҙыр. Ә бит Сибай - Өфө пассажир поезы ла 1978 йылда ғына йөрөй башланы. Әйткәндәрҙән сығып, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәк халҡы үҙ баш ҡалаһына барыу һәм унан әйләнеп ҡайтыу өсөн мең михнәттәр күргән, тип раҫларға урын бар. Һәр замандың юлдары ғына түгел, уға бәйле йәшәйеш һәм йәмғиәттә урын алған үҙенсәлектәр ҙә үҙенсә шул.

Ғөмүмән, бөгөнгө көндә республика трассалары йөрөү өсөн хәүефһеҙ һәм ҡулай. Тик хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен боҙоу, тиҙлек режимын тотмау ғына юл-транспорт ваҡиғаларына килтереүе ихтимал. Ысынлап та, статистика мәғлүмәттәре буйынса, аварияларҙың сәбәптәре башлыса ошоларға бәйле. Сөнки оло юлдарҙа элекке "Етебөгөлөш" кеүек ҡурҡыныс урындар юҡ инде.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

**✓ Бағтиһәң, зелёнка составындағы баҡыр матдәһе үҫемлектәрҙе төрлө микробтарҙан һаҡлау өсөн файҙалы икән. Зелёнканы ҡулланыу ҡыярҙың төҫөнә тәьҫир итмәй, шуныһы ла мөһим.**



БАҠСА

# ЕЛӘКТӘР ЙЫЙЫЛДЫ, АРТАБАН...



**Баҡса еләге артыҡ ҡатмарлы тәрбиә талап итмәгән культураларҙың береһе. Әммә тәүге йылдарҙа ул мул уңыш бирһә лә, дүрт-биш йылдан һуң уңыштың ҡапыл ғына түбәнәйеүе йәки еләк ҡыуаҡтарының ҡороуы ихтимал. Шуға ла еләктең үҫкән урынын йыш алыштырып торорға кәрәк. Мин үҙем еләкте бер урында ике йыл үҫтерәм, сөнки, күҙәтеүҙәр буйынса, өсөнсө йылына ул насар емеш бирә, сирҙәргә, зарарлы ҡоротҡостарға бирешеп бара, өлөшләтә ҡорой башлай. Шуға ла түбәндәге тәжрибәм менән уртаҡлашам.**

Еләкте күсереп ултыртыу өсөн иң ҡулайлы ваҡыт булып июль иҫәпләнә. Әгәр ҙә һуңғараҡ ҡалһағыҙ, икенсе йылына еләк әллә ни унмаясаҡ. Шуға ла уны күсереп ултырта торған йылда еләккә тәғәйенләнгән түтәлгә редис, йәшел борсаҡ, һарымһаҡ, иртә өлгөрә торған кәбеҫтә, ләлә сәскәләре кеүек июнь айында ҡаҙып алына торған үҫентеләр сәсәм. Минең баҡсамдағы йәшелсә түтәлдәренең "әйләнеше" түбәндәгеսә:

1 - һарымһаҡ, ләлә сәскәһе; 2-3 - баҡса еләге; 4 - татлы борос һәм баклажан; 5 - гладиолус һәм кәбеҫтә; 6 - помидор. Һуңғы өс түтәлдәге үҫентеләрҙе үҙегеҙ теләгәнсе алыштыра алаһығыҙ.

***Еләк ултыртыу.*** Шулай итеп, июлдең тәүге декадаһына иртә өлгөрә торған йәшелсәләр йыйып алынырға тейеш. Бынан һуң түтәлде тәрән итеп ҡаҙып сығырға кәрәк. Янған тирес, компост һәм минераль ашламаны һалып ҡалдырырға. 5-7 көндән һуң ер тығыҙланғас, баҡса еләген ултырта башларға мөмкин. Мин рәттәр араһында 60 см, ә ҡыуаҡлыҡтар араһында 30 см ара ҡалдырам. Түтәлгә еләк ҡыуаҡтарын бер юлы йәки бер нисә өлөшкә бүлеп ултыртырға була. Тик уларҙың барыһын да тиҙерәк сәсеп бөтөү яҡшыраҡ. Еләктәрҙең тамыры даими урынға иртәрәк ултыртылған һайын, улар ҡеүәтлерәк була, тимәк, яҡшыраҡ ҡышлай һәм киләһе йылда уңышты күберәк аласаҡһығыҙ. Был йылда яңы ултыртылған еләктәргә бары тик көндәр ҡоро торған саҡта һыу ғына ҡойоп торорға кәрәк буласаҡ. Әйткәндәй, һыу ҡойғандан йәки ямғырҙан һуң уларҙың араһын йомшартығыҙ һәм барлыҡҡа килгән мыйыҡтарынан таҙартып тороғоҙ. Ҡыш уларҙың өшөп ҡуйыуынан ҡурҡһағыҙ, еләктәрҙең өҫтөнә ботаҡтар һалып ҡалдырығыҙ.

***Яҙ еткәс.*** Ер йылынғас та, еләк түтәлдәрен ботаҡтарҙан, иҫке япраҡтарҙан таҙартырға. Рәттәр араһын йомшартырға. Әгәр ҙә яҙ ҡоро икән, мөмкинлегегеҙгә ҡарап, еләк сәскә атҡан ваҡытта һыу һибегеҙ, тупраҡты йыш ҡына йомшартып тороғоҙ. Еләккә төймәләнгәндән алып уңыш йыйып алғанға тиклем башҡа бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәй.

***Уңыш йыйып алынғас.*** Ер еләге япрағы 60-70 көн йәшәй, һуңынан һулый. Тимәк, уңыш йыйып алынғандан һуң еләк ҡыуаҡлығындағы япраҡтар һыуыҡтар төшөүгә үләсәк. Йәғни, улар ҡыуаҡты һыуыҡтан да һаҡлай алмай, етмәһә, йәш япраҡтарҙың үҫеүенә ҡамасаулай. Бынан тыш, ҡартайған япраҡтарҙа ҡоротҡостар һәм бәшмәкле сирҙәрҙең споралары күп була. Бына шуның өсөн дә уңыш йыйылғандан һуң япраҡтарҙы ҡырҡып алырға һәм ергә күмергә кәрәк. Был эш түбәндәгесә башҡарыла: һул ҡул менән ҡыуаҡлыҡты тотошлай тотабыҙ. Еләктең мыйыҡтары ла бергә алына. Һәр ҡыуаҡлыҡтан ике иң көслө мыйыҡты айырып алып, ергә һалабыҙ. Һул ҡулдағы башҡа япраҡтарҙы һәм мыйыҡтарҙы ҡырҡып ташлайбыҙ. Ҡыуаҡлыҡтар араһындағы ерҙе йомшартып, мыйыҡтарҙың тамырын еңелсә тупраҡҡа батырабыҙ. Был эште башҡарыу алдынан түтәлгә һыу һибелгән йәки ямғыр яуып үткән булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Кәрәкмәгән япраҡ һәм мыйыҡтарҙан арынғас, еләк ҡыуаҡтарын бәшмәкле сирҙәрҙән һәм ҡоротҡостарҙан һаҡлау өсөн эшкәртергә була. 10 литр һыуға 2-шәр ҡалаҡ кельтан һәм баҡыр хлорокисы һалып, бәләкәй генә ҡул насосы менән һәр ҡыуаҡлыҡҡа һибеп сығырға. Кельтан булмаһа, уны колорада ҡуңыҙына ҡаршы ҡулланылған саралар менән алыштырырға була. Күпме ҡуләмдә алырға икәнлеге уның рецебында яҙылырға тейеш. Был эштәрҙе барыһы ла уңыш йыйып алынғас башҡарыла. Ошо уҡ ваҡыттан иртә өлгөрәүсе йәшелсәләр үҫкән түтәлде әҙерләй башларға. Япраҡтарҙан таҙартылғандан һуң ҡалған мыйыҡтар 10-12 көндән нығына, тимәк, уларҙы яңы түтәлгә күсереп ултыртырға кәрәк. Әгәр ҙә уларҙы ере менән бергә күсереп ултыртһаң һәм һыу һипһәң, үҫентеләрҙең барыһы ла үҫеп китәсәк. Яңы түтәл тулғас, тәүге түтәлебеҙҙәге барлыҡ мыйыҡтарҙы алып ташлайбыҙ, яңылары барлыҡҡа килгән һайын уларҙы өҙөп торабыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ҠЫЯРҒА...

## йод һәм зелёнка ярҙамы



**Һәр баҡсасы үҙе үҫтергән йәшелсәнең таҙа булыуын теләп, ағыулы химикаттар ҡулланмай, халыҡ сараларына өҫтөнлөк бирә. Ысынлап та, был сараларҙың күбеһе файҙалы. Әммә баҡсасылар ҡул аҫтында булған йод һәм зелёнка ҡыярҙың ҡайһы бер ауырыуҙарын бөтөрөргә һәм уңдырышлығын арттырырға ярҙам итә икәнен белеп тә бөтмәйҙәр әле.**

Бағтиһәң, зелёнка составындағы баҡыр матдәһе үҫемлектәрҙе төрлө микробтарҙан һаҡлау өсөн файҙалы икән. Зелёнканы ҡулланыу ҡыярҙың төҫөнә тәьҫир итмәй, шуныһы ла мөһим.

● Ҡыяр үҫентеләренең һабағы серегән осраҡта уңышты йыйып алғандан һуң бер биҙрә һыуға 10 тамсы зелёнка тамыҙып һибергә кәрәк. Был иретмәне йәшелсә "ауырый" башламаҫ элек, алдарыҡ һибергә лә була. Шулай уҡ үҫемлектәргә 10 литр һыуға 10 мл йод нисбәтендә иҙеп эшләнгән һыу һиптереү ҙә файҙалы. Тағы ла ҡыярҙы был ауырыуҙан һаҡлау өсөн уның һабағын ерҙән алып, ун сантиметр тирәһе бейеклектә 1:2 нисбәтендә йод йә зелёнка һалынған һыу менән буярға була. Ике ҡулланыуҙан уҡ яҡшы һөҙөмтә бирә. Был исул бигерәк тә вертикаль рәүештә үҫкән ҡыяр үҫентеләрен сереүҙән һаҡларға ҡулайлы.

● Онло ысыҡ ауырыуынан ҡыяр үҫентеләре һарғайып һулый башлай. Был ауырыуҙан янған бесән төнәтмәһе ярҙам итер. Уны эшләү өсөн ҙур булмаған мискәнең яртыһына тиклем янған бесәнде һалып, өҫтөнә сығарғансы һыу ҡойоп, 2-3 көн төнәтеп, һөҙөп алырға. Төнәтмәне һипкәндән һуң бер аҙна туҡталып торорға, шунан тағы ла һибергә кәрәк. Өс тапҡыр ҡулланғандан һуң ҡыяр үҫентеләренең онло ысыҡ ауырыуы бөтә.

Ә бына ялған онло ысыҡ ауырыуын бер биҙрә һыуға 10 мл зелёнка, 2 литр эремсек һыуы (һөт ҡулланырға ла була), 50 грамм мочевина һалып эшләнгән изма ярҙамында бөтөрөргә була. Ҡыяр үҫентеләрен ошо рәүешле миҙгелгә өс тапҡыр эшкәртергә тәҡдим ителәр: тәүҙә ҡыяр сәскә ата башлаған осорҙа, һуңынан бер аҙна аша.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡолаҡлы ябалаҡ**

**(Ушастая сова)**



Уртаса ҙурлыҡтағы ябалаҡ. Арҡаһы һорғолт-көрән, ҡорһағы ерән йәки һарғылт - ваҡ ҡына буй һыҙаттар төшкән. "Ҡолағы" оҙон, күҙҙәре ҡыҙғылт һары, суҡышы - ҡара. Төндә һунар итә. Тауышы йәлләткес ухылдау, һыҙғырыу һәм шыңшыуҙан тора. Йәш ҡоштар көслө һыҙғырыу ярҙамында ата-инәһенән ризыҡ таптыра.

Ябалаҡтың был төрө республиканың бөтөн районда рында ла осрай, тик һаны күп түгел. Шыршы, аҡ шыршы, ҡайын урмандарын үҙ итә. 2008 йылда ҡолаҡлы ябалаҡтың Башҡорт дәүләт академия драма театры эргәһендәге паркта оя ҡороуына шаһит булдыҡ. Ошо уҡ йылдың майында ҡолаҡлы ябалаҡтың шыршыға ҡоролған ояһында 4 бәпкәһе лә бар ине. Ырымбур өлкәһендә оя ҡороп йәшәүсе, хатта ҡышлаусы ҡош.

Урман ҡошо, шулай ҙа ҡараңғы урмандарҙы өнәмәй, уның ситенә урынлаша. Дала зонаһында баҡсаларҙа, баҫыуҙарға ултыртылған ағастарға ла оя ҡора. Ергә түгел, ағасҡа ҡуна. Март-апрелдә йырлай башлай, һаҙлыҡ ябалағы кеүек ҡанаттарын ҡағып, талпына. Ябалаҡтар үҙҙәре оя ҡормай, башҡа ҡоштар ташлап киткәндәрен үҙләштерә. 3-8 йомортҡа һала, 25-28 көн баҫа. Яңы ғына сыҡҡан бәпкәләрҙең йөнө аҡ, 10-12 көндән улар көлһыу төҫкә инә, "йәҙ"ҙәрендә ҡара "битлек", "ҡолаҡ"тары ла һиҙелә башлай. Оя эргәһендә үҙҙәрен ҡыйыу тоталар, кешегә ҡысҡыралар, суҡышын шаҡылдаталар, ҡайһы саҡта уға яҡын ботаҡҡа уҡ килеп ҡуналар. 20-26 көнлөк йәш ҡоштар ояны ташлап оса башлай. Ике ай тулғансы, ата менән инә ҡош уларҙы ризыҡ ташып ашата. Әгәр ҙә кимереүселәр аҙ икән, оло ҡоштар ояһында ултырып астан үлә һәм бәпкәләре уларҙы ашай. Төп ризығы - ҡыр сысҡаны, һирәгерәк һуҡыр сысҡан, ваҡ ҡош-ҡорт, тейен, ярғанат. Ҡараңғы төндә лә һунар итә ала, ҡорбанын ҡыштырлап йөрөүенән, ҡышын ҡар аҫтынан иһә сыйылдауынан таба.

Көҙ ахырына яҡынлашҡанда ғына ҡышлау урынына оса, төндә һәм яңғыҙ оса. Шулай ҙа ҡайһы саҡта тупҡа йыйылалар. Миграция юлы кимереүселәрҙең күпләп йәшәгән ерҙәре, шулай уҡ ҡар ҡалын булмаған урындар аша үтә. Ҡайһы бер ҡолаҡлы ябалаҡтар ҡышты үҙебеҙҙә ҡышлай, башлыса дала, урманлы дала йәки үҙе оя ҡороп йәшәгән урынды һайлай. Төньяҡҡа кире февралдә үк ҡайта. Бер йәшлек ҡолаҡлы ябалаҡ йомортҡа һалып, бәпкә сығарырға һәләтле. Беҙ тәпәйенә балдаҡ кейҙереп, билдә һалып ебәргән ҡош 28 йәшкә тиклем йәшәне, ул беҙгә билдәле иң ҡарт ҡолаҡлы ябалаҡ булып тора.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



### 21 ИЮЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.25, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 "Время героев". [16+]
13.00, 14.15 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.55 Т/с "Ищейка". [12+]
19.55 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Граница. Таежный роман". Памяти Александра Митты. [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 13.00.
13.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
14.30, 1.45, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Медиум". [12+]
3.55 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**14.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45, 20.15 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30, 3.00 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.00 Династия чести. [12+]**
**22.00, 2.30 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**23.30 Т/с "Паук". [16+]**
**1.00 Спектакль "Дочь степей". [12+]**
**3.30 Күстәнәс. [12+]**
**4.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**
**5.30 Колесо времени. [12+]**

### 22 ИЮЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.55 Т/с "Ищейка". [12+]
19.55 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Граница. Таежный роман". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.45, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Медиум". [12+]
3.55 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 "Из жизни доктора". [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 "Занимательная биология". [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Т/с "Паук". [16+]**
**1.30 Спектакль "Ильгизар+Вера". [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 23 ИЮЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.55 Т/с "Ищейка". [12+]
19.55 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Граница. Таежный роман". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.45, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Медиум". [12+]
3.55 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 "Атайсал". [6+]**
**16.00, 3.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Д/с "Большой скачок". [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 "Туриада Юрюзань-2025". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2025". [12+]**
**0.00 Т/с "Паук". [16+]**
**1.30 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

### 24 ИЮЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.55 Т/с "Ищейка". [12+]
19.55 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Ангел мести". [16+]
22.45 Т/с "Граница. Таежный роман". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.45, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Медиум". [12+]
3.55 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Профессионалы. [12+]**
**12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 23.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 "Туриада Юрюзань-2025". [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф "Вода и злато". [12+]**
**21.00 "Асыш". [6+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**0.00 Т/с "Паук". [16+]**
**1.30 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**3.15 Письма солдатам. [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

### 25 ИЮЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Т/с "Ищейка". [12+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.55 Премьера. "Наша новая музыка". [12+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе! Народный кастинг". [12+]
23.40 Х/ф "Тени прошлого". [16+]
3.25 Х/ф "От сердца к сердцу". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 "Асыш". [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**23.30 "Ете егет". [12+]**
**0.30 Т/с "Паук". [12+]**
**2.00 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.00 Хазина. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 26 ИЮЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Письмо Уоррену Битти". Памяти Владимира Высоцкого. [16+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Василий Шукшин. Душе нужен праздник". [12+]
13.05 Х/ф "Два Федора". Ко дню рождения Василия Шукшина. [0+]
14.45 Д/ф "Владимир Высоцкий. "И, улыбаясь, мне ломали крылья". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 "Своя колея". [16+]
20.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Превратности любви". [16+]
0.40 Х/ф "Злая судьба". [12+]
4.05 Х/ф "Оазис любви". [16+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 17.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Хазина. [12+]**
**9.00 "Весело живем!" [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.45 Книга сказок. [6+]**
**11.00 Зерно. [6+]**
**11.30 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/с "Заповедники России". [12+]**
**18.00 Д/с "Большой скачок". [12+]**
**18.15 Профессионалы. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [16+]**
**19.15, 3.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Т/с "Паук". [12+]**
**1.15 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!" [12+]**
**3.45 "Ете егет". [12+]**
**4.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.30 "Простые истории: жить, работать, любить". [12+]**

### 27 ИЮЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.40 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.10 Премьера. "Морпехи". Специальный репортаж. Светлой памяти дважды героя России Михаила Гудкова и его боевых товарищей. [12+]
11.05, 12.20 Д/ф "История российского флота". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.45 Х/ф "72 метра". [12+]
17.05 Д/ф Премьера. "Балтийские морпехи. Сквозь шторма и пламя". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 Х/ф Премьера. "Северный полюс". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". Новые серии. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.55, 1.55 Х/ф "Эта женщина ко мне". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". Специальный выпуск ко Дню Военно-Морского Флота РФ. [12+]
12.00, 1.05 Д/ф "Адмирал Кузнецов. Флотоводец Победы". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Песни от всей души". Специальный праздничный выпуск ко Дню Военно-Морского Флота РФ. [12+]
22.30 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.46 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 "Легенды Урала". [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 "Весело живем!" [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.45 Тирмәкәй. [6+]**
**11.00 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.15 "Беседка". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Асыш". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**13.30 "Занимательная биология". [12+]**
**14.00 Дорога к храму. [6+]**
**14.30 Д/с "Большой скачок". [12+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**17.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**18.15 Все песни о прекрасном… [12+]**
**19.15 Әлләсе… [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Радика Вальмухаметова. [12+]**
**1.00 Т/с "Паук". [12+]**
**2.00 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**4.30 Письма солдатам. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Июль (Мөхәррәм - Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (26) дүшәмбе | 2:56 | 5:08 | 13:30 | 18:55 | 21:36 | 23:06 |
| 22 (27) шишәмбе | 2:57 | 5:10 | 13:30 | 18:54 | 21:35 | 23:05 |
| 23 (28) шаршамбы | 2:58 | 5:11 | 13:30 | 18:54 | 21:33 | 23:03 |
| 24 (29) кесе йома | 2:59 | 5:13 | 13:30 | 18:53 | 21:32 | 23:02 |
| 25 (30) йома | 3:00 | 5:14 | 13:30 | 18:52 | 21:30 | 23:00 |
| 26 (1) шәмбе | 3:01 | 5:16 | 13:30 | 18:51 | 21:28 | 22:58 |
| 27 (2) йәкшәмбе | 3:01 | 5:18 | 13:30 | 18:50 | 21:27 | 22:57 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Сәскәһе япрағынан алда сыға. Уны йыйғас, тиҙ киптерергә кәрәк. Кипкән сәскәһенән бешерелгән сәй тамаҡ төбө ауыртҡанда, тамаҡ ҡарлыҡҡанда файҙалы, йүтәлде лә бөтөрә.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ ГЕОЛОГТАРЫ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**27-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Акцент. Грант. Торатау. Ғына. Ләйсән. Елмәрҙәк. Ҡырҡ. Арбаһы. Кресс. Тау. Ҡуштау. Нарыҫтау. Битләп. Уйыл. Әлкә. Лава. Әрме. Нары.

**Вертикаль буйынса:** Еләкташ. Ғүмеремдең. Сөн.Тауҙар. Ирәмәл. Бар. Күгәрепкәй. Әмәлен. Ташҡа. Тап. Татыулыҡҡа. Ҡурайҙары. Баштау. Саҡма. Наҙлы. Урал.

БАШ ҠАТЫРМАҠ

# РИЗЫҠТЫ БЕЛДЕРГӘН ТӨҪ НИНДӘЙ?



**Ошо ябай ғына һорауҙарға яуап биреп, үҙеңдең башыңдағы белемде һанап ҡара. Йә был викторина һорауҙарын балаңа төбәп, уның белем кимәлен тикшер.**

**11.** Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһын ата.

**12.** Зәйнулла ишан Рәсүлев, "Ал, улым, бәлки, берәй нәмә һатып алырһың", - тип, кемгә 10 тинлек алтын аҡса тоттора?

**13.** Икенсе һорауҙа һүҙ барған кеше был 10 тинлек алтын аҡсаны нимәгә тотона?

**14.** "Донъяның виртуоз ҡумыҙсыһы" тигән данлыҡлы исемен алған милләттәшебеҙҙе ата.

**15.** Бөйөк Ватан һуғышында партизандар хәрәкәтен етәкләүсе легендар "Ҡара генерал"дың исеме кем?

**16.** Йыһан караптарында космонавтар тәғәмләнгән башҡорт милли аҙығын ата.

**17.** Башҡорт телендәге ниндәй төҫ ризыҡ исемен аңлата?

**18.** Боронғо башҡорттарҙа мал-тыуарҙы, башҡа төр матди байлыҡты урлап алып китеүгә ҡарата ҡүрелгән яуап сараһы нисек аталған?

**19.** "Төньяҡ амурҙары" романының авторы кем?

**20.** Тауыҡ йомортҡаһын ярмай ғына 6 метрға нисек ташларға була (Һуңғы һорау - отҡорлоҡҡа)?

**27-се һандағы баш ҡатырмаҡ яуаптары:** Ҡолас; Асҡар менән Илдар Абдразаҡовтар; Лев Толстой; Роберт Юлдашев; Эрнст Мулдашев; "Салауат Юлаев"; Ғабдрахман Ҡадыров; тоҙ; Илгизәр Бураҡаев; Келәш.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ҮЛӘН ЙЫЙЫУ МӘЛЕ

**Һәр йондоҙлоҡтоң үҙенең шифалы үләне бар, бөгөн һеҙҙе шулар менән таныштырырға теләйем. Кемдер йондоҙлоҡтарға бик ышанып та етмәйҙер, шулай ҙа хәтер һандығығыҙға һалып ҡуйығыҙ. Йондоҙлоҡтарҙың исемдәрен дә үҙемсә атайым.**

***Ҡусҡарҙарға*** баш, күҙ ауырыуы, аңҡау һәм ауыҙ эсенең лайлалы тышсаһы боҙолғанда һары мәтрүшкә, ҡара ҡарағат, балан, күк сәскә (синеглаз) үләндәре файҙа бирә. Үләндәрҙең сәскәһен һәм орлоғон файҙаланырға кәрәк.

***Үгеҙбыҙауҙарға*** миләүшә, шалфей, сирень, мәтрүшкә, ҡуҙғалаҡ, айыу баланы, төйөнтамыр (ятрышник) үләндәренең тамырын тамаҡ, ҡан әйләнеше ауырыуҙарынан, астманан дауаланыу өсөн ҡулланыу отошло.

***Игеҙәктәргә*** борсаҡ, ҡомалаҡ, сырмалсыҡ, бесәй үләне, лиана, селдерей япрағы пневмония, туберкулез, астма, бронхит һәм нервы ауырыуҙарынан сихәт бирә, дауалай.

***Ҡыҫалаларға*** итләс, һыуһыл үҫемлектәр - ҡыяр, ҡарбуҙ, ҡабаҡ, ҡауын, томбойоҡ, ынйы, розмарин гастриттан, склероздан, шеш-яранан, һарыһыу ауырыуҙарынан дауа булып тора. Был үҫемлектәрҙең һабаҡтарын ғына файҙаланырға кәрәк.

***Арыҫландарға*** үгәй инә япрағы, бәпембә, артыш, петрушка, укроп, тырнаҡ гөлдөң орлоҡтары йөрәк, арҡа ауырыуҙарынан, стенокардиянан һәйбәт дауа бирә.

***Ҡыҙҙарға*** һоло, арыш, райхан гөлө, миндаль сәтләүегә эсәк сирҙәренән, перитонит, эс ҡатыу, эсәк сырмалыуҙан ҡотҡара. Фәҡәт тамырын файҙаланырға кәрәк.

***Үлсәүҙәргә*** инжир, миләүшә, цитруслыларҙың япраҡтары диабеттан, бөйөргә таш ултырыуҙан, нефрит һәм уремиянан дауаланырға ярҙам итә.

***Саяндарға*** әрем һәм райхандың һабаҡтары енес ағзаларын, геморройҙы, гепатит һәм эренле тәрән яраларҙы дауалауға ярҙам итә.

***Уҡсыларға*** меңъяпраҡ, дегәнәк, ирәүән, ҡурай үләне (дудник), мүк еләге, кориандр, ҡыҙыл туҡранбаш, шыршы еләгенең сәскәләре һәм емештәре ревматизм, ишнас (радикулит), тын алыу системаһы сирҙәренән дауа булып тора.

***Кәзәмөгөҙҙәргә*** шыршы, кипарис, туя, ҡыҙыл сөгөлдөр, әрем, шыршы үләне (баҫыуҙа күп була), шиңмәҫгөл үләндәренең тамыры май биҙҙәре сирен, һынған урындарҙы дауалауҙа отошло.

***Һыуғоярҙарға*** ишәкҡолаҡ (окопник), ҡош өрәңгөһе (палуб) үләндәренең япраҡтары менән ҡан тамырҙарының варикоз киңәйеүенән һәм нервы ауырыуҙарынан дауаланыу кәңәш ителә.

***Балыҡтарға*** мүк, ҡыяр үләне, йәғни һыу үҫемлектәренең япраҡтары төрлө шештәрҙе, аяҡ табанындағы бәшмәк ауырыуҙарын дауаларға ярҙам итә.

***Әйткәндәй, үгәй инә үләне тураһында:***

Сәскәһе япрағынан алда сыға. Уны йыйғас, тиҙ киптерергә кәрәк. Кипкән сәскәһенән бешерелгән сәй тамаҡ төбө ауыртҡанда, тамаҡ ҡарлыҡҡанда файҙалы, йүтәлде лә бөтөрә. Сәс-кәләренә япраҡтарын да ҡушып ҡайнатһаң, ашҡаҙан, бөйөр ауырыуынан, һейҙек ҡыуығы сиренән дауалай.

**Мөнирә МОНАСИПОВА.**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## БЫНДА ТАРИХТАРҘЫҢ СӨҢГӨЛДӘРЕ...

Бында Йәнбикәнең йәме ҡалған,
Йәнбирҙенең йәне һаҡланған.
Урал Йәншишмә тип башын һалған,
Төк-кот ҡалған Аҡбуҙ аттан да.
Шүлгән үҙе сал тарихҡа шылған,
Шүлгәнташы - аҫыл ҡомарҡты.
Йылҡысыҡҡан өйөр йылҡыларын
Илгә биргән - үҙе йомаҡ бер.
Бында Күсәк Ҡарағөлөмбәтте
Ҡурыуҙыла ҡурып, үҫ алған.
Бөрйәндәр бит, бер йәндән дә үрсеп,
Аҡтамырҙай илдә үҫ(ә)лгән.
Бында солоҡ ҡорто төйәк тапҡан,
Айыу-бүреләре үҙ, яҡын.
Йәнтөйәгем сәскә атһын тиеп,
Тырыш хеҙмәт итә бит халҡым.
Бында - тарихтарҙың сөңгөлдәре,
Бында - үлмәҫ башҡорт рухы ла.
Бында ашҡа-аш тип йөшәгәндәр
Туҫтаҡ ҡымыҙ һонор дуҫына.



## БӨРЙӘНГӘ МӘҘХИӘ

Урал батыр эҙҙәренә баҫып,
Шүлгән эскән һыуҙы һыулап беҙ.
Бөрйән тигән бәрәкәтле ерҙә
Меңәр-меңәр йылдар йәшәйбеҙ.
Алдарҙарҙан ҡалған аҫабалыҡ,
Ал бирмәҫлек сифат -Мәсемдән,
Изгеләрҙән-изге ҡаҡшамаҫ рух
Йөрәктәрҙә йәшнәй йәшендәй.
Аҡбуҙаттың тояҡ эҙҙәренән
Сылтыр шишмәләрем атылһа,
Йылҡысыҡҡан илгә биргән булыр -
Сысҡан һыртлы ала ат булһа.
Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикәнең
Йәнен, йәмен һаҡлай был ҡәүем -
Ерен һаҡлап, нәҫелен арттырып,
Халҡымдың бит бурыс үтәүе.
Бабсаҡтарҙан ҡалған был егетлек,
Саялыҡтар - Инсебикәнән.
Һәр заманда ла бит Бөрйән ерен
Ул-ҡыҙҙары данлы итәләр.
Аҡһаҡалдар йәшендәһең, Бөрйән,
Йөҙөк ҡашы башҡорт иленең.
Милләт рухының һин - сөңгөлдәге,
Йәншишмәһе халҡым теленең.
Киләсәгең һинең аяҙ булһын,
Сәскә ат һин күкрәп тағы ла -
Һинә булған беҙҙең оло һөйөү
Йөрәк йырҙарымда сағыла...

## УРАЛ БАТЫР ТОҠОМОНАН...

Шүлгән батшаһының иленән.
Төпкөлдәрҙә ҡурай моңон һуҙа
Аҡбуҙаттың тояҡ еләнән.
Аҡыҡ ҡаштай гүзәл ҡылдәремдә
Вальс әйләнә һомғол ҡамыштар.
Башҡорт көйөн көйләп шишмәләрем
Ағиҙелкәй менән ҡауыша.
Болоттарға морон төртә тауҙар,
Ҡайтауаздар шандай ҡаяла.
Ҡайындарҙың сулпыларын тартып,
Урынһыҙға елдәр шаяра.
Бал еҫтәре аңҡый болондарҙан,
Ҡымыҙ еҫе әкрен иҫертә.
Сал тарихтан тыуған бөгөнгөнөң
Кендеге бит бында киҫелгән...
Урал батырҙың беҙ тоҡомонан,
Беҙ - бөрйәндәр бергә - бер йәндәр.
Уйҙа ғына ҡайттым Бөрйәнемә -
Үҙем булдым айыу менгәндәй...

## АҪАБАМЫН ҮҘ ЕРЕМДӘ

Был ерҙе мин һайламаған -
Уны насип иткән Аллам.
Бабамдар һөйгә - бында,
Минән аҙаҡ йәшәр балам.
Был ерҙә мин яңғыҙ түгел,
Әҡрәбәләр ауыл-ауыл.
Бирешмәҫлек рәтем барсы
Ҡупҡанда ла туфан, дауыл.
Был ерҙә мин түлһеҙ түгел -
Ҡыҙым ҡыҙлы, улым еткән.
Аҫабамын үҙ еремдә,
Түгел сит-ят, үткән-үткән.
Был ерҙән мин ҡомар алам -
Шиғырҙарым - күнел аһым.
Бөрйән тиеп яныр йөрәк,
Ошо ергә сүгер башым...
Был ерҙә мин солтан түгел,
Олтанлығым - үҙе бәхет.
Тәхеттәрҙән өҫтөн булыр
Тупрағына уйған ләхет.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОРАЛ КЕМДЕКЕ...

## заман шуныҡы

Юрға менгән юлдашынан айырылыр, күп йәшәгән ҡорҙашынан айырылыр, күп һөйләгән дуҫынан айырылыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшәү хәрәкәт талап итә.

**(Аристотель).**

Ахмаҡ уйҙар һәр кем башында була, ләкин аҡыллылар уны ҡыҫҡырып әйтмәй.

**(Вильгельм Буш).**

Гонаһлыларҙың көсө ҡасандыр бер килеп юҡҡа сыға.

**(Владимир Мономах).**

Яҡындарыңа мөхәббәт сикһеҙ булмай, сөнки һәр кем иң тәүҙә үҙ-үҙен ярата.

**(Августин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Дуҫымдың ҡатыны вафат булды. Мин ҡайғы уртаҡлашырға килгәндә, дуҫым мәйетте һуңғы юлға оҙатыу мәшәҡәттәре менән була ине. Бына ул ҡатынының әйберҙәре һаҡланған комод йәшниген асты ла, унан бер төргәк килтереп сығарҙы. Төргәк эсендәге иҫ киткес матур селтәрле эске кейемде ҡулына алды. "Мин был бүләкте 8-9 йыл элек сит илгә командировкаға барғанда алып ҡайтып, ҡатыныма бүләк иткәйнем, - тип һөйләп китте дуҫым. - Ҡатыным уны киймәне, "Айырым бер осраҡта кейермен", тип, кәҙерләп һаҡланы. Бына шундай "айырым осраҡ" килде инде бына..."**

**Шулай тине лә дуҫым, матур эске кейемде вафат булған ҡатынына кейҙерәсәк башҡа әйберҙәр янына һалды. Шунан миңә табан боролоп:**

**"Бер ваҡытта ла "айырым осраҡ өсөн" тип, бер нимә лә һаҡлама. Беҙ йәшәгән һәр көн -айырым осраҡ ул..." - тине.**

**Мин һаман дуҫымдың ошо һүҙҙәре тураһында уйлайым. Ул һүҙҙәр минең тормошомдо үҙгәртте шикелле. Бөгөн мин күберәк уҡыйым. Йортом алдындағы эскәмйәгә ултырып алам да, тирә-яҡҡа һоҡланам, әммә баҡсамдағы сүп-сарға, әйләнә-тирәмдәге ваҡ-төйәккә әллә ни иғтибар итмәйем. Мин ғаиләм, дуҫтарым менән - күберәк, эштә аҙыраҡ ваҡыт үткәрергә тырышам. Мин шуны аңланым: тормош - ул тәжрибә туплау, һәм уны баһаларға кәрәк...**

**Һәм тағы. Бер нимәне лә "айырым осраҡ" өсөн һаҡламайым. Шкафымда торған бар һауыт-һаба менән ҡулланам. Кәрәк икән, ҡала буйлап йөрөргә сыҡҡанда ла өр-яңы костюмымды кейеп алам... Йәшәйешкә шатлыҡ һәм йылмайыу килтерә торған бер нимәне лә һаҡламайым һәм иртәгәгә ҡалдырмайым. Һәр көн, һәм минут - ул айырым осраҡ, тим үҙ-үҙемә..."**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ТӘРБИӘЛЕ КЕШЕ...

## киммәтле аҡылға эйә

- Елдәр аяҡтан йыҡһа ла, ҡылыҡтарыбыҙ йыҡмаһын.
- Эсендә ни - тышында шул, уйында ни - телендә шул.
- Үҙең дә аҙағынаса атҡармаҫтай эште башҡаларға таҡма.
- Әсә илатҡанды һыу йотор, ата рәнйеткәнде ер убыр, изгелек эшләгән күккә осор - кәрәкләһен үҙең һайла.
- Яуызлыҡ эшләгән закон яҙаһынан ҡотолһа ла кеше нәфрәтенән тайшанып ҡала алмай.
- Ҡағыҙ - ул күтәрелгән ҡылысты ҡынға һалырға мәжбүр иткән, тамырҙарын тәрәнгә ебәргән имәндәй түрәләрҙе лә урынларынан осора торған көс.
- Үҙ һүҙле ҡаратырыш, тиҫкәре кеше генә бар ғаләмде болғарға оҫта.
- Ҡарышҡыр утта яныр, ынғайҙар күккә ашыр.
- Һәр кем үҙ һурпаһында бешә, сит ҡалаҡҡа урын юҡ.
- Тәрбиәле кеше ҡиммәтле аҡылға эйә - уның менән һөйләшеү үҙе бер ғүмер.
- Үҙеңде хурлаусыға күп һүҙҙәр яуҙырма, тәрән мәғәнәле, әсе һүҙле бер һөйләмде һип өҫтөнә.
- Алаһы әйберенде яҡшылап ҡарап ал, алыусының ҡулына тоттор - икеһе лә әҙәплелек.
- Дуҫҡа барһаң, әрләп-әйрәтеп һыу эсерер, дошманға барһаң, маҡтап-ҡуптап ыу эсерер.
- Ҡото осҡанға ҡот ҡойҙор, ете ҡоҙоҡ һыуын эсер.
- Кеше бөйөклөккә лә менеүсе, ҡурҡыныс түбәнлеккә лә тәгәрәүсе, замандың ҡаты һынауҙарына ла бирешмәүсе йән эйәһе икәнен онотмайыҡ.
- Ҡаты иҫкән ел аяҡтан йыҡһа йыҡһын, үҙ телең, үҙ ҡылығың ғына йыҡмаһын.

**АҒИНӘЙ.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# ШЫРШЫ ГӨЛДӘР ҮҪҺЕН!

**Өфө ихаталарына ултыртыр өсөн шыршы гөл ҡыуаҡтарын шыптырға тәрөп килтерҙеләр. Араларында бер генә лә шырыҡ үҫенте лә юҡ.**

**Шырыҡ**. "Хөрт, насар" тигән һүҙҙәрҙе икенсе төрлө шырыҡ тип тә әйтә алабыҙ. *Йәшем етте ҡырҡҡа, эштәр китте шырыҡҡа (әйтем). Ауылда шырыҡ йорттар күренмәй. Шырыҡ ҡойма-ҡорҙәләр ҙә юҡ.*

**Шыптыр.** Полиэтилендан эшләнгән әйбер йә тоҡсайҙы бәлдерә шыптыр. *Хәҙер күп нәмәне шыптырға төрөп һаталар. Шыптыр әйберҙәрҙе тәбиғәттә һәм бөтән урында ташламай, яңынан эшкәртеү талап итәлә.*

**Шыршы гөл.** Шыршы гөл - мәңге йәшел ылыҫлы ҡыуаҡ; сауыр. Туя. *Аҡ ҡарҙа йәм-йәшел булып ултырған шыршы гөл - ҡышҡы баҡса биҙәге . Шыршы гөлгә ҡош ҡунды.*

**Шына балта.** Утын ярыу балтаһын ҡайһы бер яҡта шына балта тип йөрөтәләр. *Шына балтаң бармы? Әре утынды шына балтаһыҙ ярырмын тимә.*

**Шырҙыбай.** Артыҡ асыҡ, күп һөйләй торған кеше була шырҙыбай. *Шырҙыбайҙың эсендәге - тышында. Шырҙыбайҙа сер тормаҫ.*

**Шулай итеп, шырҙыбай түгел, тел байлығының, телмәр оҫталығының кешене күркәмләүен баһалаусылар, тел байлығын һаҡлаусылар артһын!**

**НУРБИКӘ** әҙерләне.

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25028

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 июль 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -**
17 июль 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1339